✓ *Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде үҙеңде ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.*

*(Эпиктет).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5 - 11 МАРТ (БУРАНАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№10 (428)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ҡырҙастар ҙа ҡушылды,**

Әхмәттәр ҙә ҡуш булды...



4

**Иң юғары вазифабыҙ...**

үҙ йортонда ҡот һәм йылылыҡ булдырыу



6

**Шәрифә Тимерғәлина**



7

**Тоҡомобоҙҙо һаҡлау өсөн...**



8-9 Хоҙай беҙҙе горур итеп яратҡан

14 ТВ-программа




## АСЫЛМАҪ СЕР - ҠАТЫН КЕШЕ

*Өс мөғжизә мине әсир алды -*
*Ер, йәнә күк,*
*йәнә ҡатын кеше.*
*Өс сер мине уйға, шомға һалды -*
*Ер, йәнә күк,*
*йәнә ҡатын кеше.*

*Ерҙең сере бөтә. Күк һайығә.*
*Төбө күренер бына асылыр ҙа.*
*Ҡатын кеше генә*
*Асылмаҫ сер,*
*Тылсым булып ҡалыр асылында.*

*Мостай КӘРИМ*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Байрам көндәрендә "Алтын башлы ҡатындан баҡыр башлы ир артыҡ" тигән мәҡәлдең мәғәнәүи хикмәтен сисәйек әле, егеттәр! Ниңә шулай тип әйткән икән халҡыбыҙ?

*Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көнгәк" гәзите баш мөхәррире:* Һорау еңел генә күренһә лә, ҡапыл ғына яуап биреүе ауыр, сөнки, кем әйтмешләй, кешелектең икенсе (бындай нумерлауҙы мин уйлап сығарманым) яртыһы үпкәләп ҡуйыуы бар. Алтын иң ҡиммәтле металдарҙың береһе генә түгел, ә иң йомшағы ла. 1 килограмм таҙа алтынды 12 километрға һуҙып була, ә баҡырҙың ундай "һәләте" юҡ. Электр тогын да тәүгеһе нығыраҡ үткәрә. Ә кешеләргә килгәндә, уларҙың араһында төрлөһө бар. Был ике металл уртаһында көмөш барлығын да онотоорға ярамай. Билдәле йәнһүрәттәге маймыл әйтмешләй: "әҙәм балалары араһында көмөш башлылары гораздо күберәк". Мин, мәҫәлән, кешенең затына ҡарамай, уның фекерләү алымына ҡарап һығымта яһайым. Әгәр етәксе, белгес тиҙ һәм аныҡ ҡарар ҡабул итһә, мин уны ирҙәрсә фекерләй, тип иҫәпләйем. Ҡыҙ-ҡатынға тәбиғәт үҙе төптән, оҙағыраҡ уйлап эш итергә ҡушҡан. Бөгөн тормош ныҡ үҙгәрҙе, бындай алымдар күп осраҡта һәләкәткә килтереүе мөмкин. Быға күп миҫалдар килтерергә була. Ғаиләнең ойошҡан көнөн генә алайыҡ. Динебеҙ буйынса, кейәү кеше кәләште уның атаһынан йәки ҡарап үҫтергән башҡа ир заттан һоратырға тейеш. Ә бөгөн ир-ат был йоланан ситтә ҡалыуҙы хуп күрә, сөнки һуңынан ул бер нәмәгә лә яуап бирмәй, ҡатыны алтын башлы булғас ни. Бындай ирҙең башы алтынмы, баҡырмы? Элек ҡыҙҙарын: "Барған ереңә таш булып бат", - тип оҙатҡандар. Шуға ғаиләләр ныҡлы булған. Хәҙер заман менән бергә "белемле" ҡәйнәләр күбәйҙе, улар йәштәргә аҡыл өйрәтә, тормоштарына ҡыҫыла. Шуға күрә ғаиләләр тарҡала. Беҙ ни эшләптер йәштәр донъя көтә алмаҫ, тип ҡурҡабыҙ. Йәш ғаиләгә ни тиклем күберәк үҙаллылыҡ бирһәк, улар тормошҡа шул тиклем тиҙерәк өйрәнәсәк бит. Улар замана балалары, үҙҙәренсә йәшәһен. Бынан 4,5 мең йыл элек йәшәгән Геродот: "Үәт бөгөн ниндәй йәштәр китте, бер нәмә лә белмәйҙәр. Киләсәктә донъя ҡайҙа барыр?" - тигән. Ул фекер бөгөн дә ҡабатлана, әммә тормош һаман дауам итә. Минеңсә, әгәр алтын һәм баҡыр баштар урынына тағы ла "көмөш башлылар" тыуһа, тормошобоҙ күпкә еңеләйер ине. Алтын менән баҡырҙың "алтын урталығы" ул көмөш.

Баштарыбыҙ баҡыр ғына булһа ла, беҙ яратабыҙ һеҙҙе алтын башлы һылыуҙарыбыҙ, хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ. Байрамығыҙ ҡотло булһын!


**(Дауамы 2-се биттә).**

**✓ Ул хатта "баҡыр башлы" ғына ирен дә үҙенән өҫтөн ҡуя белә. Бәлки, бында мәҡәлде шулайыраҡ итеп үҙгәртеп әйтергә лә кәрәктер: "Ирен үҙенән өҫтөн күргән ҡатын алтын башлы була", тип.**



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АТА-ӘСӘЙЕНДЕҢ ҠӘБЕРЕ...

**Мәҡәл-әйтемдәр нисек тыуа? Улар - бер кешенең башына осраҡлы ғына барлыҡҡа килгән, бер ваҡиғанан йә тәжрибәнән сығып ҡына яһалған һығымта-фекер түгел. Мәҡәл-әйтемдәрҙең нигеҙендә милләттең, кешелектең күп быуатлыҡ, меңәр йыллыҡ йәшәү тәжрибәһе, һәр заман өсөн дә ярарлыҡ фекер, идея ята. Башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәре араһында ла уртаҡ тәжрибә, дөйөмләштерелгән фекер кимәленән үтеп, милли идеяға торошлолары бихисап. Беҙ шул мәҡәл-әйтемдәрҙе табып, уларҙы үҙебеҙ аңлаған кимәлдә тәфсирләп ҡарарға булдыҡ. "Милли идеяға торош" рубрикаһы тап шул хаҡта.**

Бисмиллаға "Ата-әсәйеңдең ҡәбере убала булһын", тигән башҡорт халыҡ мәҡәлен алайыҡ. Төптән уйлап ҡараһаң, тап ошо һүҙҙәрҙә бик тәрән аҡыл, күп быуатлыҡ тәжрибә һәм самими мөнәсәбәт ята. Беренсенән, тарихҡа күҙ һалһаҡ, кемдәрҙе убаға ҡуйғандар һуң? Әлбиттә, хандарҙың, ханбикәләрҙең, үҙ ҡәүемендә оло дәрәжәгә ирешкән заттарҙың ҡәбере өҫтөнә уба-уба тупраҡ өйгәндәр. Убаның әһәмиәте шунда: ҡәбер алыҫтан күренеп торған һәм уба бейеклеге был урынды тапандыға, саңдауға әүерелеүҙән һаҡлаған. Тимәк, һин үҙ ата-әсәңде, ғүмерҙәре тамам булғансы, хан дәрәжәһендәй убала ерләрлек кимәлгә күтәрергә, уларҙы ихтирам итергә бурыслыһың.

Икенсенән, һинең ата-әсәйең ханханбикә дәрәжәһенә өлгәшһен өсөн һин үҙең дә шундай уҡ дәрәжәгә күтәрелеп етерлек фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ күрһәтергә бурыслыһың. Бында шундай ҡағиҙә: "Ата-әсәһе хан-ханбикә булғандың балаһы ла хан ғына түгел, балаһы хан булғандың ата-әсәһе лә шул уҡ дәрәжәгә эйә". Тик ошо ҡағиҙә үтәлгән осраҡта ғына һин ата-әсәңде убаға күмергә хаҡлыһың.

Тик бында йәшәүҙең маҡсаты мотлаҡ хан булыу, тип тә аңларға кәрәкмәйҙер. Әммә шуныһы бәхәсһеҙ: кеше туғандары, милләте, иле алдында тоғролоғо, намыҫлы хеҙмәте, фиҙаҡәрлеге ярҙамында хан кимәлендәй шәхес булыуға өлгәшә ала. Ҡыҫҡаһы, йәшәү мәғәнәһе, тормош программаһына, милли идеяға торошло аҡыл ята был мәҡәлдә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәлки, был мәҡәлде икенсе төрлө юҫыҡта аңлата алыусылар барҙыр. Рәхим итегеҙ, "Милли идеяға торош" рубрикаһы һеҙҙең ҡарамаҡҡа.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Байрам көндәрендә "Алтын башлы ҡатындан баҡыр башлы ир артыҡ" тигән мәҡәлдең мәғәнәүи хикмәтен сисәйек әле, егеттәр! Ниңә шулай тип әйткән икән халҡыбыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Камил ИЛЕМБӘТОВ, Хәйбулла районы Әбеш урта мәктәбе уҡытыусыһы, ҡурайсы-сәсән:*** Мин был мәҡәлде тура мәғәнәһендә аңлайым. Әммә ундағы һүҙҙәр ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы кәмһетеү, хурлау өсөн әйтелмәгәндер тип уйлайым. Һәр кемдең, шулай уҡ ирҙәрҙең дә, ҡатындарҙың да донъяла үҙ урыны бар - был мәҡәлдә күберәк ана шуға ишара. Икенсе бер "Ирҙән ир быуаҙый" тигән мәҡәл дә юҡтан ғына әйтелмәгәндер. Ни өсөн тигәндә, ысын ирҙәр тик ирҙәр йоғонтоһонда ғына тәрбиәләнә. Әгәр ҙә малай, үҫмер кеше атай, ҡартатай, ағай йә башҡа берәр өлкән ир-ат йоғонтоһонда булмаһа, ҡатын-ҡыҙ йоғонтоһонда ул барыбер ысын мәғәнәһендә ир-азамат булып тәрбиәләнә алмайҙыр ул. Уның был осраҡта барыбер ҙә бер яғы китек була. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: йөҙ бейәнән торған өйөр йә йөҙ һыйырҙан торған көтөү, йөҙ кеше ҡайыңһа ла, барыбер тырым-тырағай йүгерешеп китә. Әммә шул өйөр алдына бер айғыр, көтөү алдына бер үгеҙ сығыуы була, таралашҡан малдар йәһәт кенә бер йөҙроҡҡа туплана. Ҡатын-ҡыҙ ҙа, иренән нисек кенә аҡыллы булмаһын, тәбиғи ерлек барыбер ҙә ир аҡылының өҫкә сығыуын талап итә. Киреһенсә булған осраҡта ир абруйына зыян килә һәм тәбиғи ҡанун емерелә башлай.

Алтын башлы ҡатынды беҙ ни өсөн фәҡәт "алтын башлы"тип әйтәбеҙ һуң? Мәсьәлә бында ябай ғына кеүек: ул хатта "баҡыр башлы" ғына ирен дә үҙенән өҫтөн ҡуя белә. Бәлки, бында мәҡәлде шулайыраҡ итеп үҙгәртеп әйтергә лә кәрәктер: "Ирен үҙенән өҫтөн күргән ҡатын алтын башлы була", тип. Һәр хәлдә, алтын башлы булып ҡалһын ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ.

***Флур ҒАЗИН, яҙыусы, фоторәссам:*** Хоҙай ир-атты өҫтөнлөклө итеп яралтҡан. Шуға күрә ул һәр ваҡыт, хатта "баҡыр башлы" ғына булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙан өҫтөн булырға бурыслы. Тейеш түгел, фәҡәт бурыслы. "Бурыслы" һүҙе аҫтында ла оло мәғәнә ята. Мин эштән һәр ваҡыт йәйәү ҡайтам. Ҡайтып еткәнсе мине ике-өс урында туҡтатып, әзмәүерҙәй ир-аттар һыраһыҡ 3-5 тәңкә аҡса һорап өлгөрә. Бирмәһәң, асыуланалар, бирһәң, шайтанға хеҙмәт итәһең. Уларға нисек: "Һеҙ ҡатын-ҡыҙҙан өҫтөн булырға бурыслыһығыҙ", - тип әйтәһең инде. Ә бит мәҡәлдә "баҡыр башлы ир" тип алынған, "көмөш башлы" тип тә әйтелмәгән хатта. Бында, заман ирҙәренә ҡарап, "баҡыр" тигәндә "бахыр" тип аңларға кәрәктер тип уйлайым.

***Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:*** Миненсә, мәҡәлдәге фекерҙең айышына төшөнөр өсөн төрлө яҡлап уйларға кәрәктер. "Был мәҡәл бына фәҡәт шуның өсөн ошолайтып әйтелгән", тигән аңлатма, барыбер, бер яҡлы буласаҡ. Яуап тулы булмаясаҡ. Был мәҡәлде тағатыр өсөн тағы ла бер аҡыл эйәһенең әйткән һүҙҙәренә лә аңлатма биреп ҡарайыҡ. "Аҡыллы ҡатын-ҡыҙ аҡыллы ирҙәрҙең етешһеҙлеген, иҫәр ирҙәрҙең өҫтөнлөгән күрергә тырыша", тигән ул кеше. Ни өсөн шулай, алтын башлы ҡатынға баҡыр башлы ир-ат яҡыныраҡ һуң? Сөнки "Ир - баш, ҡатын - муйын", тиҙәр, йәғни алтын башлы ҡатын баҡыр башлы ирҙе үҙе теләгән йүнәлешкә бора ала, ә бына алтын башлы ирҙең бер бөртөк мыйығын да ҡыймылдата алмаясаҡ. Шуның өсөн дә алтын башлы ҡатынға баҡыр башлы ир яҡыныраҡтыр. Миненсә, был мәҡәлде ҡасандыр ҡатын-ҡыҙ уйлап сығарғандыр тип уйлайым. Әгәр ҙә уны уйлап сығарыусы кеше ир-ат булһа, юғарылағы аңлатма бармай. Мәҡәлдең әһәмиәте лә шунда: уға бер төрлө генә итеп яуап биреп тә булмайҙыр ул. Уны һәр кем, үҙ башының алтынлығына йә баҡырлығына ҡарап, барыбер үҙенсә аңлайҙыр ул.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ?

**Хәбәр ителеүенсә, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ март аҙағына тиклем 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙыла ала.**

Март айында 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан берәү **микротулҡынлы мейес** отасаҡ. Уйын апрелдә лә дауам итер һәм, моғайын, ҡатнашыусыларҙы дәртләндерер тағы берәй бүләк тәҡдим ителәр, тигән өмөттә ҡалабыҙ.
Шулай итеп, микротулҡынлы мейесте кем алыҡ? Беҙҙең индекстар:
50665 - алты айға 330 һум 24 тин, 50673 (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә кәңәш ҡорайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә һығымталар яһайыҡ!**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты күренекле сыуаш мәғрифәтсеһе Петр Мироновтың тыуыуына 150 йыл һәм сыуаш халыҡ шағиры Яков Ухсайҙың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓"Независимая газета" заказы менән 2011 йылдың ғинуарында Иҡтисади яңылыҡтар агентлығы үткәргән тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй төбәктәре башлыҡтары араһында иң яҡшы лоббистар тиҫтәһенә инде. Тикшереүҙә РФ субъекттары башлыҡтарының төбәк проекттарын үҫтереүгә йүнәлтелгән эш һөҙөмтәләре баһаланды. Төбәк лидерҙары араһында Башҡортостан Президенты "Көслө һөҙөмтәләлек" төркөмөндә унынсы урынды биләй.

✓Башҡортостанда Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы эмблемаһын эшләүгә ижади конкурс башланды. 1 марттан 1 апрелгә тиклем Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтендә эмблеманың график проекттары рәүешендәге конкурс эштәре ҡабул ителә. Теләге булған һәр кем конкурста ҡатнаша ала. Эштәр электрон ысул менән йәки ҡағыҙҙа тәҡдим ителә. Түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итергә: 450101, Өфө ҡалаһы, Тукай урамы, 46, БР Президенты Хакимиәте. Белешмәләр өсөн телефон: 8(347)250-02-06.

✓Был юлы "Әсәлек даны" миҙалына республика райондарынан һәм ҡалаларынан 72 ҡатын-ҡыҙ лайыҡ булды. Бүләкләү тантанаһында БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Фидус Ямалтдинов ҡатнашты. Был миҙалға лайыҡ булған биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға бер тапҡыр түләнә торған 10 мең һумлыҡ пособие ла бирелә. Шулай уҡ Хөкүмәт күп балалы ғаиләләр өсөн айлыҡ пособиелар, коммуналь хеҙмәт өсөн түләүҙәр, транспортта түләүһеҙ йөрөү, мәктәптә түләүһеҙ туҡланыу һәм бушлай мәктәп формаһы кеүек льготалар ҙа билдәләнгән.

✓4-6 мартта баш ҡаланың "Приозерный" физкультура-һауыҡтырыу комплексында ушу буйынса Волга буйы федераль округы чемпионаты һәм беренселеге була. Был ярыш Өфөлә өсөнсө тапҡыр үткәрелә.

## ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




**Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар байрамы алдынан Башҡортостан Республикаһы Президенты блогин байҡап ултырғанда Клэр Бут Льюстың шул һүҙҙәре хәтерҙән сыҡманы. Эйе, аңлағанһығыҙҙыр, эш хаҡы тураһындағы темаы ҡыҙыҡһынып күҙәтәм. Әлбиттә, был тема бары тик ҡатын-ҡыҙға ғына ҡағылмай, әммә бер кемгә лә сер түгел - беҙҙең илдә ир-аттың килеме ҡатын-ҡыҙҙыҡына ҡарағанда күпкә юғарыраҡ. Дин күҙлегенән ҡарағанда, гүзәл зат өйҙә бала тәрбиәләп, иренең эштән ҡайтыуын тәмле-татлы ризыҡ әҙерләп көтөп торорға, уның ялы өсөн уңайлыҡтар булдырырға тейеш. Әммә хәҙер заман башҡа. Софи Такер әйтмешләй: "18 йәшкә тиклем ҡатын-ҡыҙға яҡшы ата-әсә кәрәк, 18 йәштән 35 йәшкә тиклем - яҡшы тышҡы ҡиәфәт, 35 йәштән 55 йәшкә тиклем - яҡшы характер, ә инде 55 йәштән һуң - яҡшы аҡса". Эйе, бөгөнгө ысынбарлыҡ шундай. Сөнки донъя статистикаһын ҡараһаҡ, 50 йәштән уҙған ҡатын-ҡыҙҙарҙың 47 проценты яңғыҙ, никахтарҙың 50 проценты айырылышыу менән тамамлана, айырылышыуҙан һуң ҡатын-ҡыҙҙың тормош кимәле 73 процентҡа түбәнәйә, өлкән йәштәге кешеләрҙең 3/4 өлөшөн ҡатын-ҡыҙ тәшкил итә һәм уларҙың 80 проценты элек етеш йәшәгән, 10 ҡатын-ҡыҙҙың 7-һе иртәме, һуңмы, нужа менән осраша... Ә ирҙәр осрашмаймы, тигән һорау бирерҙәр. Эйе, улар ҙа тормоштоң ошондай һынауы алдында тора, әммә ҡатын-ҡыҙ - әсә, ирҙәр донъяуи проблемаларҙы хәл иткәндә, фән менән шөғөлләнгәндә, глобаль проблемалар тип баш ватҡанда, төрлө һуғыштарҙа ҡатнашҡанда ҡатын-ҡыҙҙар осон-осҡа ялғап булһа ла балаларын ашатырға, кейендерергә, кеше итергә тырыша... Саҡ ҡына һүҙҙе ситкә борҙом шикелле, булмаһа, халыҡтың аҡса, эш хаҡы тураһында Президент блогина яҙылған фекеренә күҙ һалайыҡ.**

# ЭШЛӘ ЛӘ АҠСАҺЫН АЛ -

## донъя шул саҡта түңәрәк була

**Ildaris.** Граждандар ҡануниәтен, юридик шәхестәр һәм эшҡыуарҙар хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын түләүҙә бурысы булмағанда ғына алыш-биреш һәм башҡа юридик эшмәкәрлек башҡарырға хоҡуҡлы, тигән положение менән тулыландырырға тәҡдим итәм. Һалым органдарына тапшырылған документтар пакеты ла эш хаҡын түләү торошо тураһында документ булмайынса ҡабул ителмәһен. Шулай уҡ предприятие ике ай дауамында эш хаҡын түләүҙе тотҡарлай икән, уға ҡарата банкротлыҡ процедураһы инициативаһы менән сығыуҙы ла федераль законға индерергә кәрәк. Был осраҡта һаҡлап ҡалған милек иҫәбенә эш хаҡын түләү мөмкинлеге буласаҡ.

**kozetta11gugo.** 2010 йылдың сентябрендә БР хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ф. Ямалетдинов телевизор аша эш биреүсенең эш хаҡы хеҙмәткәрҙәрҙекенән тиҫтәләрсә тапҡыр ҙур булырға тейеш түгел, тип бармаҡ янаны, әммә быны тиң бурысына аныҡ ниндәй сара күрелде? Ниндәй закон нигеҙендә эш биреүсе үҙенә шундай "тормоштағы ожмах" мөмкинлеге таба? Ындай закондарҙы тиҙерәк ғәмәлдән сығарып, эш биреүсегә эшселәренән ике тапҡырға ғына күберәк эш хаҡы алырға рөхсәт бирергә кәрәк. Һәм ул эш хаҡын иң һуңғы булып алһын.

**slovesnik_ff.** Ни өсөн бюджет өлкәһендә бурыстар юҡ, унда барыһы ла яҡшы? Сәбәптәрҙең береһе: бюджет өлкәһендә эшләүселәрҙең эш хаҡы юғары түгел. Шунда ла бурыс булһа инде. Ғилми дәрәжәһе булған доцент бөтөн иҫәпләүҙәр менән бергә 10 мең эш хаҡы ала. Шунан һалымдарҙы, башҡа иҫәпләүҙәрҙе тотоп ҡала баллаһаң... Быны Рәсәй буйынса минималь эш хаҡы менән нисек сағыштырырға?

**y_sundukov.** Халыҡ, әгәр бер нисә ай эш хаҡы түләмәйҙәр икән, уны артабан да түләрҙәренә ышаныс юҡ икән, хәл-торошҡа етдиерәк ҡараһын ине. Халыҡҡа үҙ хоҡуҡтарын өйрәтергә, профсоюздар эшмәкәрлеген ҡайтанан ҡарарға, һәр өлкә өсөн берҙәм хеҙмәт килешеүе индерергә кәрәк. Банкрот предприятиелар тураһында. Үҙ аҡылында булған бер генә милексе, үҙ предприятиеһын банкрот хәленә еткермәҫ. Тап республика балансында булған предприятиелар банкротҡа әйләнделәр. Тимәк, Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министрлығы яғынан ҡаты контроль булдырырға кәрәк. Банкротлыҡҡа еткергән етәкселәргә, әгәр объектив раҫлауы булмаһа, "кәзә билеты" тотторорға.

**kolybanov.** СССР-ҙа 1986 йылда уртаса эш хаҡы 223 һум ине, ә йәшәү минимумы - 70. Йәғни уртаса эшсе өс йәшәү минимумы күләмендә эш хаҡы алды, теләһәң дә астан үлеү мөмкин түгел ине. Хәҙерге аҡсаға күсергәндә был яҡынса 22300 һум була. Әгәр инде инфляцияны, күсемһеҙ милекте ҡушып иҫәпләгәндә, был 223 һум 55000 һумға барып баҫа. Сағыштырығыҙ, уйлағыҙ, ғәҙеллеккә эҙләгеҙ.

**daut55_kor.** Ни өсөн беҙҙең эш биреүсе, шәхси булһынмы ул, дәүләттекеме, эш хаҡын түләмәҫкә йәки аҙ түләргә хоҡуҡлы? Күрәһең, закондар эшләмәй, шуға күрә улар яза ла алмай. Дәүләт үҙенең граждандарын яҡлай алмай. Артҡа боролоп ҡараһаҡ та, 80 йылда берәү ҙә түләргә артыҡ тырышып бармаған. Ауылдарҙа оҙаҡ йылдар трудоденгә бил бөккәндәр, ғөмүмән, совет осоронда кеше астан үлмәҫлек, тунмаҫлыҡ ҡына эш хаҡы түләгәндәр. Күптәр быны бөгөн дә ҙур байлыҡ тип ҡабул итә. Ҡоллоҡ психологияһы. Ә эш биреүселә быңдай, төкөрөп бирҙем, тигән мөнәсәбәт йәшәй әле, ул бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙең ҡол кеүек түҙеүе лә һаҡлана. Был күренештәр постсовет киңлегенә хас.

**Алещенко Мария.** Бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа тын алырға ирек бирегеҙ, ул ваҡытта кешеләр предприятиеларҙа аҡса көтөп ултырмаҫ, ә үҙҙәре эшләй башлар. Ә әлегә Рәсәйҙә эшселәр түгел, ә жуликтар эраһы. Мәсәлән, Ҡытайҙа бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ эске тулайым продукттың 60 процентын тәшкил итә. Ә беҙҙә ни бары "Газпром"ды һәм башҡа халыҡ байлығын ғына үҫтерәләр, ә бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа төкөрөп тә бирмәйҙәр. Ғинуар өсөн яңы ставкалар буйынса һалым түләнем. Минең эш хаҡына һалымдар һәм йыйымдар ҡулыма алған суммаһың 54 процентын тәшкил итте. Быға тиклем 27 процент ине әле. Минең эш хаҡым былтырғыға ҡарағанда кәмерәк килеп сыҡты...

**rinatrs.** Үҙ аҡылында булған бер генә етәксе лә эш хаҡын түләү буйынса проблемаһы барлығын әйтмәҫ - был үҙ-үҙенде үлтереүгә тиң. Үҙ аҡылында булған бер генә хеҙмәткәр ҙә эш хаҡын тотҡарлауҙары тураһында хоҡуҡ һаҡлау органдарына әйтмәйәсәк - был да үҙ-үҙенде үлтереүгә тиң. Ҡулаҡса йәки "ҡара эш хаҡы" түләгән етәкселәр үҙ хеҙмәткәрҙәре менән килешеү буйынса эшләй. Ғәҙәттә, уның шарттары ике яҡты ла ҡәнәғәтләндерә. Ҡәнәғәтләндермәй икән, хеҙмәткәр оҙаҡ тотҡарланмай. Барыһы ла "аҡ эш хаҡы" түләп, күпме бушаашарҙы тотҡанын аңлай. Шуға ла тәү сиратта таҙартыуҙы юғары даирәләрҙән башларға кәрәк, ул саҡта аҫтағылары үҙҙәренән-үҙҙәре ҡайтанан формалашасаҡ. Рәсәйҙә күп осраҡта тәртип булдырыуҙы өҫтән башлайҙар.

**Ankosterenko.** Бөгөн эшселәр наҙан түгел. Эшләгән аҡсанан 18 процент НДС, 13 процент НДФЛ, 34 процент төрлө фондтарға түләргә кәрәк. Күпселек ир-ат, ни өсөн Пенсия фондына түләргә, уртаса статистика күрһәткестәре буйынса ирҙәрҙең ғүмере пенсия йәшенә лә етмәй бит, ти.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эш хаҡы түләү, уны тотҡарлау, бөтөнләй түләмәү хаҡындағы тема бөгөн генә түгел, һәр заманда ла көнүҙәк булған. Хатта бер ваҡыт шундай көләмәс тә йөрөй ине. Имеш, бер предприятиела хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын тотҡарлай башлағандар. Эшселәр барыбер эшкә йөрөй икән. Күпмелер ваҡыт үткәс, предприятие директоры шундай бойороҡ сығара: "Бөтөнләй түләмәҫкә!" Эшселәр барыбер эшкә килеүен туҡтатмаған. Күпмелер ваҡыттан һуң директор урынбаҫарҙарын кәнәшкә йыйып ала. Был ни ғиллә, эш хаҡын тотҡарланыҡ, халыҡ эшкә йөрөнө, бөтөнләй түләмәй башланыҡ, халыҡ барыбер ғәҙәттәгесә эшкә килә. Шул ваҡыт бер урынбаҫар ҡыйыуһыҙ ғына: "Бәлки, эшкә түләтеп индереү системаһын булдырырбыҙ..." - ти. Көлкө, әммә ысынлап та, ҡоллоҡ психологияһы ҡанға йылдар буйы һеңгән халыҡ эшкә түләп инергә булһа ла йөрөр, моғайын. Ә бит эш хаҡының һәр һумы кеҫәгә инеп ятһын өсөн бөгөн яҡынса 1 һум 50 тиндән ашыу аҡса эшләргә тейешбеҙ. Әммә был хаҡта халыҡҡа бер кем дә аңлатмай. Сөнки белгән хеҙмәткәргә ҡарағанда белмәгәне ҡулайыраҡ, наҙандар менән идара итеүе еңелерәк. Моғайын, шуның өсөн дә балаларға балалар баҡсаһынан алып: "Яҡшы уҡы, мәктәпте тамамлағас вузға ин, дипломың булһа, карьера эшләрһең", - тип тылҡып, унан дәүләттең ҡолон формалаштыраларҙыр. Ә инде Рәсәй мәғариф ситемаһында төрлө фәндәр уҡытыла, ләкин нисек итеп аҡса эшләү, киләсәгендә үҙеңә хәстәрләү тураһындағы дәрес бары тик хыялда ғына ҡала.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Иҡтисад, эшҡыуарлыҡ һәм ер сәйәсәте буйынса комиссияһының Мәсетле районында үткән күсмә ултырышы Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш районында эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә арналды. Унда республиканың төньяҡ-көнсығыш райондарындағы хакимиәт, бизнес-берләшмә вәкилдәре ҡатнашты. Ултырышты комиссия рәйесе Иршат Аҫылгужин алып барҙы. Әле был районда 722 бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекты теркәлгән. Был башҡа райондарҙағы ошондай уҡ күрһәткестән байтаҡҡа юғарыраҡ. Былтыр бөтә милек формаһындағы предприятиелар тарафынан 30 млн һум самаһы аҡса үҙләштерелгән, 168 яңы эш урыны булдырылған.

✔Республикала сираттағы "Хәүефһеҙ йорт, хәүефһеҙ подъезд, хәүефһеҙ фатир" киң күләмле иҫкәртеү акцияһы үтте. Саралар БР буйынса Эске эштәр министрлығының ете меңгә яҡын хеҙмәткәре йәлеп ителде. Акция сиктәрендә күп ҡатлы ике мең йорт, 48 мең фатир тикшерелде. Тәжрибә күрһәтеүенсә, бурҙар һаҡ сигнализацияһы ҡуйылған фатирҙарҙы урап үтергә тырыша. Ведомствонан тыш һаҡ идаралығы хеҙмәткәрҙәре 70 меңдән ашыу фатирҙы хеҙмәтләндерә. "Хәүефһеҙ йорт" акцияһы ваҡытында подразделениеларҙа фатир, шәхси йорт, коттеджлар милекселәренән меңдән ашыу ғариза ҡабул ителгән, автотранспорт сараһын һаҡлауға 170 килешеү төҙөлгән.

✔Башҡорт дәүләт медицина университетының Волонтерҙар үҙәге 10 мартта "Асыҡ ишектәр" көнө уҙғара. Сараның маҡсаты - Сочиҙағы Олимпиадала ҡатнашыу өсөн волонтерҙар ҡабул итеү тураһында һөйләшеү. Хәбәр ителеүенсә, былтыр БДМУ юғары һәм урта махсус белем биреү учреждениелары араһында 2014 йылда Сочиҙа үтәсәк Олимпиада һәм Паралимпия уйындары өсөн волонтерҙар әҙерләү үҙәге булдырыу хоҡуғын алыуға конкурса "Дөйөм медицина" лотында еңгәйне.

✔"Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән "Ел ҡыуыусы" тулы метражлы фильм (режиссеры Айсыуаҡ Йомағолов) Ханты-Манси ҡалаһында үткән "Ут рухы" IX халыҡ-ара кинематография дебюттары фестивалендә тамашасы һөйөүен яуланы.

*НИСЕК АҢЛАЙҺЫҢ?*




# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТ: "Иреңдең мал-мөлкәтенә һаҡсыл бул"

**Флүзә УРМАНТАЕВА, пенсионер:** Был нәсихәттең төп мәғәнәһе һаҡсыллыҡҡа ҡайтып ҡала. Һаҡсыллыҡ - ғаилә именлегенә алып килер ҡиммәттәрҙең береһе. Мин килен булып төшкән саҡта үҙемә 18 йәш тә тулмағайны. Ирем менән бергә 49 йыл бергә йәшәйбеҙ. Тормошобоҙ теүәл, тапҡан малыбыҙ бәрәкәтле булыуында ҡәйнәмдең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыуым да булышлыҡ иткәндер. Ир кеше тапҡан аҡсаны ҡатын ҡәҙерләп кенә тотонорға бурыслы. Бының өсөн әллә ни иҫ китерлек һәләт тә талап ителмәй: бары алама ғәҙәттәрҙән алыҫ торорға - айыҡ тормош алып барырға кәрәк. Аҡсаның бәрәкәте - уны әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуймаған ҡатындың ҡулында. Иң мөһиме, өй эсендә алама ғәҙәттәргә урын булмаһын. Ә аҡсаны дөрөҫ тотоноу - ҡатын-ҡыҙға тәбиғәттән бирелгән һәләт. Минең өс ҡыҙым, бер улым бар. Улыма: "Атайыңдың йортон ташлама, был нигеҙҙең ҡотон һаҡла", - тип, йыш ҡына әйтә киләм. Ул Магнитогорск ҡалаһында ғаиләһе менән йәшәй, заводта эшләй. Киленемде үҙ ҡыҙым һымаҡ күрәм, ул да миңә "әсәй" тип өндәшә. Ҡыҙҙарым да, киленем дә ирҙәренең мал-мөлкәтенә һаҡсыл ҡараштa.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ, журналист:** Беҙҙең халҡыбыҙҙа борон-борондан ғаилә мөнәсәбәттәрендә ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙың үҙенә генә тәғәйен бурыстар билдәләнгән. Ғаилә ҡоролғас, был ғаиләнең уртаҡ хужалығы була. Сөнки ғаилә - ул хужалыҡ берәмеге лә. Сөнки унда ир кеше лә, ҡатын кеше лә эшләй. Балалар ҡул аҫтына инһә, улар ҙа хужалыҡ эштәрендә ярҙам итә башлай. Һәр ғаиләлә дөйөм мөлкәт була. Шулай ҙа элек-электән ир - мал табыусы, ғаиләһен ашатыусы, кейендереүсе, ғаиләһенә етеш тормош ҡороусы булараҡ билдәле. Ә ҡатын-ҡыҙға күберәк өй эштәре менән булышыу, мал ҡарау, йорт тирәһендәге башҡа эштәрҙе башҡарыу тейгән. Ир ваҡ эштәр менән бер ваҡытта ла шөғөлләнмәгән: һунарға китәме, бал ҡортон ҡараймы, мал көтәме - уның үҙ ҡарамағында. Шуның өсөн борон-борондан малды ир таба, ә уны ҡатын-ҡыҙ тотона тигән йола барлыҡҡа килгән. Ҡатын кешене мин ғаиләнең иҡтисадсыһы ролендә күрәм. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында ирҙәре тапҡан малды тиҙ арала туҙҙырып бөтөргәндәр ҙә осрай бөгөн. Ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт уйлап, планлаштырып эшләргә тейеш. Иң тәү сиратта нимә һатып алырға кәрәк, һуңынан нимә? Кемгә алырға: балаларғамы, үҙенәме, иренәме. Бына шул һаҡсыл ҡараш "ирең тапҡанды әләф-әләф итмә, ҡәҙерләп, һаҡлап тотон" тигәнде аңлата ла инде. Мал туплау, ғаилә ҡеүәтен, матди хәлен яҡшыртыу өсөн ҡатын-ҡыҙға шундай нәсихәт бирелгән, тип уйлайым.

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!*

# ҠЫРҘАСТАР ҘА ҠУШЫЛДЫ,

## Әхмәттәр ҙә ҡуш булды...



**Әбйәлилдә, Һәйетҡол ауылында, ағинәйҙәр инициативаһы менән башланды был "Айыҡ ауыл" хәрәкәте. "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ойоштороуҙың башында торған егеттәр ҙә Әбйәлилдән. Шуға ла был егеттәр республикала үткәреләсәк айыҡлыҡ сараларының иң башына "Айыҡ ауыл" конкурсын ҡуйҙы һәм ул йыл башынан старт алып, 1 апрелгә тиклем конкурста ҡатнашыусыларҙан ғаризалар ҡабул ителә. Әле "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләк белдереүселәр арта бара. Белорет районынан - Мөхәммәт, Ғафури районынан - Сәйетбаба, Хәйбулла районынан Йәнтеш, Йәрмәкәй районынан Ҡолбай, Күпсәнәй, Рәтамаҡ, Спартак, Әбйәлил районының Ҡырҙас һәм Әхмәт, Учалы районының Һөләймән ауылы конкурста ҡатнашырға ғариза бирҙе.**

Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы халҡының конкурста ҡатнашырға ҡарар ҡабул иткән ҡоронда бик күп әхлаҡи мәсьәләләр тикшерелде, тормоштағы ҡайһы бер насар күренештәрҙең яман шеш хәленә әүерелеүе билдәләнде. Мәҫәлән, 2009 йылда Әбйәлилдә - 56, ә 2010 йылда 52 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалып, яҡты донъянан киткән. Барыһы ла тиерлек йәштәр һәм иҫерек килеш был ҡурҡыныс аҙымға барған. Ғөмүмән, ауылдарҙа күҙәтелгән күп кенә кире күренештәрҙең нигеҙендә эскелек ята. Шуға ла йыйында ҡатнашыусылар барыһы ла бер тауыштан ошо яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшкә күтәрелергә ҡарар итте.

Ҡырҙас район үҙәге Аҫҡарҙан 26 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Унда бөгөн даими рәүештә 764 кеше йәшәй. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында Ҡырҙаста 654 кеше иҫәпләнгән, һуңғы иҫәп алыу ваҡытында, йәғни һигеҙ йыл эсендә ауыл халҡының 100 кешегә артыуы күрһәтелгән. Йәғни был ауыл халҡы 15 процентҡа артҡан. Ғөмүмән, Ҡырҙас ауыл советындағы һуңғы дүрт-биш йылдағы ыңғай күренештәр тәү сиратта уның хакимиәт башлығы Мәүҙиғә Нәби ҡыҙы Баймөхәмәтова исеменә бәйле. Ауыл советы башлығы булыр алдынан ул 20 йылдан артыҡ мәктәптә директор урынбаҫары һәм ауылдың ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булып эшләгән. Мәүҙиғә Нәби ҡыҙы яҡын киләсәктә ауыл советы биләмәһен айыҡлыҡ зонаһына әйләндерер өсөн тырышасағын белдерә. Әле үк балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр араһында Ҡырҙас ауылы советына ҡараған ауылдарҙан бер етем дә юҡ, бер суицид осрағы ла теркәлмәгән, ауыл магазиндарында араҡы һатыу тыйылған, самогон ҡойоусылар менән әүҙем көрәш алып барыла. "Ҡатын-ҡыҙ донъяны ҡотҡарыр!" тигән лозунгыны күҙҙә тотоп, был осраҡта ла республикабыҙҙағы Мәүҙиғә Нәби ҡыҙы кеүек апайҙарҙың аҡылына, тырышлығына, һәләтенә таянырға була, тигән фекерҙәбеҙ. Донъяны ҡотҡарыу айыҡлыҡ өсөн көрәштән башлана икәнен дә һыҙыҡ өҫтөнә алып ҡуяйыҡ.

**Азат ХӘЛИУЛЛИН, БДУ студенты.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Әбйәлил башҡорттары ҡоролтайы лидерҙары быйылғы йылды районда "Айыҡлыҡ йылы" тип иғлан итергә тигән тәҡдим менән район хакимиәте башлығына мөрәжәғәт иткән, тигән хәбәр ҙә килеп етте.**

**Ә үҙен "Иң айыҡ коллектив" тип танытҡан "Киске Өфө" гәзите "Айыҡ туй сценарийы"на конкурс иғлан итте.Сценарий халҡыбыҙҙың матур туй йолаларына нигеҙләнеп, заманса уйындар, йыр-бейеү, күңелле тамашалар менән үрелеп барырға тейеш. Конкурста ҡатнаша алырҙай сценарийҙар гәзитебеҙ биттәрендә баҫыласаҡ. Ә иң яҡшы авторҙар иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ буласаҡ.**

*ХОККЕЙ*

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - ЯРЫМФИНАЛДА!

**Континенталь хоккей лигаһы чемпионатының Көнсығыш конференцияһында "Салауат Юлаев" Новосибирск ҡалаһының "Себер" командаһы менән сирек финалда көс һынашты. Билдәле булыуынса, ярым финалға сығыу өсөн һәр ике команданың береһе 4 тапҡыр оторға тейеш.**

Юлаевсылар плей-офф ярыш-алыштарына бик яҡшы әҙерлек менән килде, беренсе көндәге алышҡа сәмләнеп-ажарланып сыҡты. Дөрөҫ, "Себер" хоккейсылары тәүге минуттан үк көслө һөжүмгә ташланды, әммә уңышҡа өлгәшә алманы. Юлаевсылар иһә уйын дилбегәһен аҡрынлап үҙ ҡулына алып, уны бөтә осрашыу буйына ҡулдан ысҡындырманы. 9-сы минутта Петр Счастливый һуҡҡан шайба бәхетле булып сыҡты. Беренсе осор шулай ҡаршы яҡ ҡапҡаға берҙән-бер гол индереү менән тамамланды. Иң көсөргәнешле һәм ҡыҙған уйын икенсе осорҙа башланды. Иң тәүҙә Игорь Григоренко иҫәпте икегә еткерҙе. Уның артынан уҡ Владимир Антипов өсөнсө голдың авторы булды. Иң ахырҙа Петр Счастливый һәм Игорь Григоренко дубль яһаны һәм иҫәпте бишкә еткерҙе. Өсөнсө осорҙа "Себер" хоккейсылары юлаевсыларҙың тыныслығынан файҙаланып, ике шайба индерҙе. Уйын 5:2 иҫәбе менән юлаевсылар файҙаһына тамамланды.

Көс һынашыуҙың икенсе көнөндә юлаевсылар матчты 3:1 иҫәбе менән тамамланы.

Көс һынашыу Новосибирск ҡалаһында дауам итте. Юлаевсылар бында ябай еңеү генә түгел, бәлки майҙан хужаларын ҙур иҫәп менән ҡыйратты. Иҫәп 6:2.

Һуңғы, дүртенсе осрашыуҙа "Салауат Юлаев" осрашыуҙы "ҡоро" иҫәп, 5:0 менән тамамланы. "Салауат Юлаев", шулай итеп, Континенталь хоккей лигаһы чемпионатының Көнсығыш конференцияһында ярымфиналға сыҡты.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы предприятиелары былтыр 80 ил менән хеҙмәттәшлек алып барған һәм уларҙың тышҡы сауҙа әйләнеше 1 млрд 358 млн доллар тәшкил иткән. Төп сауҙа партнерҙары - АҠШ, Һиндостан, Франция, Ҡытай, Ҡаҙағстан, Нидерландтар һ. б. Тауар әйләнешенең дөйөм күләмендә экспорт өлөшө 81 процент тәшкил иткән. Экспорт күләменең яртыһынан күберәге минераль продукттарға һәм нефть эшкәртеү предприятиелары продукцияһына тура килә.

✓Орджоникидзе район хакимиәте иң яҡшы "Шәжәрә" төҙөү конкурсы иғлан иткәйне. Эштәр 18 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Конкурстың тәүге этабы 18 марттан 28-енә тиклем үтә - жюри ағзалары тапшырылған эштәрҙе өйрәнеп, икенсе этапҡа үтеүселәрҙе билдәләй. Икенсе этап һәм байрам концерты 2011 йылдың 31 мартында "Новатор" балалар ижады йортонда үтәсәк. Ҡатнашыусылар эштәрен Өфө ҡалаһы, Тыныслыҡ урамы, 6-сы йорт, 503-сө кабинетта тапшыра ала. Тулы мәғлүмәт алыу өсөн телефон: 243-10-00.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы ҡарары менән "Тыуған ер батырҙары" тигән патриотик йырҙар конкурсы уҙғарыла. Унда 12 йәштән 30 йәшкә тиклемге йәш башҡарыусылар, шулай уҡ коллективтар, ансамблдәр саҡырыла. Конкурста ҡатнашыуға ғаризалар 5 апрелгә тиклем Октябрь проспекты, 118-се йорт, 26, 28 бүлмәләрҙә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 279-06-60.

✓5 мартта Нижегородка биҫтәһендә, 6 мартта Дим районында, шулай уҡ Нефтехимиктар, И. Якутов исемендәге, "Ҡашҡаҙан" Мәҙәниәт һәм ял парктарында, С. Аксаков исемендәге баҡсала ҡышты оҙатыу байрам саралары үтәсәк.

✓**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 24 мартта Нефтселәр мәҙәниәт һарайында мәшһүр ҡурайсы Роберт Юлдашевтың концерты үтә. Ҡурайсыға һорауҙар бирегеҙ һәм билет отоғоҙ, тип тәҡдим итәбеҙ. Һеҙ биргән һорауҙарға Роберт Юлдашев гәзит аша яуап бирәсәк, уның күңеленә оҡшаған һорауҙар авторына концертҡа билет биреләсәк. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

ӘЙТӘГҮР!

**Ҡатын кеше генә асылмаҫ сер,**
**тылсым булып ҡалыр асылында...**
**Шулай тип яҙғайны халыҡ шағиры Мостай Кәрим. Һәм унан менән һис кенә лә килешмәйенсә булмайҙыр. Әгәр шулай булмаһа, ир-егеттәребеҙ беҙгә йөрәк хистәрен, йырҙарын арнамаҫ ине. Ә беҙ быға лайыҡбыҙмы һуң? Ниндәйбеҙ беҙ бөгөн? Нимә беҙҙе борсой? Ана шул хаҡта бөгөнгө әңгәмә. Әңгәмәсебеҙ - журналист, бәхетле ир ҡатыны һәм әсә Баныу ҠАҺАРМАНОВА.**

# ЭШЛЕКЛЕ ҠАТЫНДАРҘА...

## ирҙәр сифаты бар. Ул беҙҙе биҙәмәй.

**▸ Дәүерҙәр, заманалар үҙгәреп тора, уның артынан йәмғиәт тә, кешеләр ҙә үҙгәрештәргә дусар. Бөгөнгө ҡатын-ҡыҙ ниндәй ул? Уның холоҡ-фигелен ниндәй һыҙаттар билдәләй?**

- Заманалар, йәмғиәт үҙгәреү менән генә ҡатын-ҡыҙ булмышы ҙур үҙгәрештәр кисерәләр, тип уйламайым. Йәғни, бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙың мода, социаль ҡалыптар-талаптарға яраҡлашырға маташыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тышҡы "кәбеген" алып ташлаһаҡ, ул мең йыл элек йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙан бер нимәһе менән дә айырылмай: уның өсөн һөйөп һәм һөйөлөп ғаилә ҡороу, бергә ҡабыҙған ғаилә усағын һаҡлау, бала табып, уны ҡурсалау, нәҫелен дауам итеү һаман беренсе урында ҡала бирә. Әммә бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙар үҙ аллы йәшәргә, аҡса эшләргә өйрәнде. Ирҙәрҙең ауыҙына ғына (дөрөҫөрәге, аҡса янсығына) ҡарап йәшәмәгәс, улар холҡонаң кире яғына күҙ йомоп тормайҙар, баш баҫып йәшәмәйҙәр. Тик арабыҙҙа эшлекле ханымдар арткан һайын, беҙҙең енескә хас нәзәкәтлек, гүзәллек юғала барғандай тойола, уның урынына ирҙәргә хас сифаттар арта. Үҙемдең өләсәйҙәремә ҡарап, уларҙың беҙгә ҡарағанда күпкә сабырыраҡ икәнлеген билдәләйем. Сабырлыҡтың төбө алтын икәнлеге мәғлүм булғанда ла ҡыҙыу баштан, ярһып эш итеүсәнбеҙ.

**▸ Заман ҡатын-ҡыҙының карьера, эш тип яныуы тәбиғи. Ирҙең тапҡанына ҡарап ятып булмай, берҙән, йәшәү ҡиммәт, икенсенән, шәхес булараҡ үҙеңде тормошҡа ашырғы килә. Был маҡсатты нисек яҡшы әсә булыу ниәтенә яраҡлаштырырға мөмкин? Ара-тирәгеҙҙә быға миҫалдар бармы?**

- Үҙеңдәге потенциалды файҙаланырға тырышыу, һис шикһеҙ, маҡтауға лайыҡ. Әммә, урыҫтар әйтмешләй, ике ҡуян артынан сапһаң, береһен дә тотоп булмай. Шуға ла мин, балаларын ныҡлап аяҡҡа баҫтырмай тороп, карьераға тотонған ҡатын-ҡыҙҙарға шикләнеп ҡарайым. Әлбиттә, күп етәксе ҡатын-ҡыҙҙар, мин эштә лә өлгөрәм, ғаиләмә лә ваҡытым ҡала, ти. Ләкин ысынбарлыҡта иһә, ҡатын-ҡыҙ эшендәге кәйефте өйөнә алып ҡайта, ире, балалары менән етәксе булараҡ һөйләшә, эшем көйлө барһын, тип ныҡышҡанда тейешле һигеҙ сәғәт урынына, тугыҙ-ун сәғәт эшләргә мәжбүр, етмәһә, уны йорттағы мәшәҡәттәрҙән дә бер кем бушатмай (керен, иҙәнен, һауыт-һабаһын йыуаһы, аш-һыу бешерәһе бар). Әсәһе етәксе булып эшләгән ғаиләлә үҫкән балалар әсәйҙәрен ихтирам итә, улар менән һоҡлана, тик шул уҡ ваҡытта рухи бәйләнештең юҡлығын, араларында һалҡын кәртә тороуын билдәләй. Шуға ла ниндәйҙер вазифа биләп тә, яҡшы әсәй була алған ханымдарға һәйкәл ҡуйырлыҡ.

**▸ Башҡорт рухлы ҡатын-ҡыҙ ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Ғөмүмән, балаларыбыҙҙа был рухты нисек һаҡлап ҡалырға?**

- Беҙҙең халыҡҡа, ғөмүмән, тоғролоҡ хас. Беҙ ҙә, ир-егеттәребеҙ һымаҡ, илебеҙгә, еребеҙгә, дуҫтарыбыҙға, туғандарыбыҙға, ғаиләбеҙгә тоғробоҙ. Көслө ирҙәр янында - баҫымһаҡ, ҡурҡаҡтар эргәһендә - батырбыҙ. Тик ошо саялығыбыҙ арҡаһында башҡа милләт кешеләренә эйәреп, заман шауҡымына бирелеп, беҙ ир-егеттәрҙе икенсе планға күсерәбеҙ, уларҙың абруйын төшөрәбеҙ, балалар алдында йөҙөн йыртабыҙ. Ә бит төп көстө, дәртте, тәжрибәне балалар атайҙарҙан ала. Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар - илһам, хис-тойғолар сығанағы. Гел ҡатын-ҡыҙҙар тәрбиәһенә ҡалған ир балаларыбыҙ көсһөҙ, инициативаһыҙ, нәзәкәтле булып үҫә лә, үҙ ғаиләһендә тик икенсе скрипканы ғына уйнарға, ҡатынына буйһоноп йәшәргә мәжбүр. Был ғаиләлә тағы ла көслө ҡыҙҙар, көсһөҙ егеттәр үҫәсәк. Был ҡуласаны емереп, ир балаларҙы ир итеп, яҡлаусы, һаҡлаусы итеп үҫтереү бурысы алдыбыҙҙа тора. Шул саҡта ғына беҙ рухыбыҙҙы юғалтмаясаҡбыҙ.

**▸ Олатай-өләсәй тәрбиәһенә нисек ҡарайһығыҙ? Әллә баланы балалар баҡсаһына йөрөтөү яҡшыраҡмы?**

- Элек бергә, берҙәм йәшәп кенә тереклек итеп булған: өлкән быуын бәләкәстәрҙе ҡараған, урта быуын эшләгән, ашарға тапҡан. Улар үҫеп килеүсе быуынға тормош һабаҡтарын, йәшәү ҡанундарын өйрәткән, рухи байлыҡ тапшырған. Был ғаилә структураһының ғына түгел, йәмғиәттең нигеҙен тәшкил иткән. Бөгөн ошо нигеҙ күпселек рухи ҡиммәттәр менән бергә юҡҡа сығарыла. Туғандарҙың бик тығыҙ аралашып йәшәүенә ҡоролған (меңәр йылдар буйына норма тип ҡабул ителгән) социаль институттың һуңғы йылдарҙа емерелеүе бик хәүефле күренеш ул. Быуындар бәйләнеше өҙөлә, кеше янғыҙлыҡҡа дусар була, ғүмер юлында күп хаталар яһай. Шуға ла балалар баҡсалары менән бер рәттән өләсәйолатайҙар мәктәбен дә һаҡлап ҡалыу мөһим, тим. Улар икеһе ике бурысты үтәй. Мәҫәлән, мин үҙем өләсәйҙәр тәрбиәһендә үҫтем, улар арҡылы донъяны таный-белергә өйрәндем. Ә минен бала саҡ әхирәтем, белорус ҡыҙы Лилиә балалар баҡсаһына йөрөгәйне. Ул матур итеп һүрәттәр төшөрә, пластилиндан төрлө нәмәләр эшләй белә - иҫем китеп уның шөғөлдәренә ҡарайым, һәләттәренә һоҡланам. Үҙемдә бер нәмә белмәгән белдекһеҙ, тип уйлайым. Ә Лилиә, киреһенсә, минең дарыу үләндәрен таныуым, уларҙың нимә өсөн ҡулланылғанын белеүемә, көн торошон билдәләй алыуыма, оҙон-оҙон әкиәттәр, төрлө йомаҡ-мәҡәлдәр белеүемә аптырай. Беҙ икебеҙ ике төрлө "мәктәп" үткәнгә шулай булған бит.

**▸ Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары күберәк йорт, ғаилә тип кенә йәшәй. Биҙәнептөҙәнеп, матур кейемдәр кейеп ултырырға ваҡыттары юҡ тиерлек. Замана ҡатын-ҡыҙҙарынан ҡалышмаҫ өсөн уларға ни кәрәк?**

- Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ҡаланыҡыларҙан бер нимәһе менән дә ҡалышмай, хатта, киреһенсә, егәрлелек йәһәтенән бер башҡа өҫтөн тора, сөнки ауылда эш күп, ялҡауланырға, бот күтәреп телевизор ҡарап ятырға ваҡыт юҡ. Иртәнән кискәсә йүгерекләргә тура килә. Унда өҫ-башты ҡарау, бит-муйынды тәрбиәләү ҡайғыһымы?! Етмәһә, аҡса яғы ла ҡыҫығыраҡ, ауылдарҙа матурлыҡ салондары ла юҡ иҫәбендә. Ҡалаға барғанда ла ауыл ҡатын-ҡыҙҙары матурыраҡ кейемдәрен түгел, ә уңайлырағын кейеп бара - сумка һөйрәп йөрөйһө бар бит әле уға! Үҙемә ҡалһа инде, ауыл ҡыҙы булараҡ, ҡаланыҡыларҙан айырылмаҫ өсөн зауыҡ буйынса бер нисә ҡағиҙәне гел үтәйем: таҙа, үтекләнгән өҫ кейеме, таҙартылған аяҡ кейеме, таҙа сәстәр - мотлаҡ; өҫтөмдәге бар нәмә бер-береһенә төҫө, фасоны менән тап килергә тейеш, шулай уҡ сифатҡа ҙур иғтибар бирәм.

Гөлшат ХАЖИЕВА-НУРДӘҮЛӘТОВА
әңгәмә ҡорҙо.

НИСЕК АҢЛАЙҺЫҢ?




# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТ:

## "Иреңдең серен һөйләмә..."

**Земфира АҠБУЛАТОВА, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ аспиранты:** Ир менән ҡатын бер тәртәлә. Икеһенең тормошо, һөйләр һүҙҙәре, берегер серҙәре лә бер. Бер-береһен, ә тәү сиратта, бер-береһенең серҙәрен ихтирам итеп йәшәһәләр, тимәк, был ғаиләнең нигеҙе ныҡлы буласаҡ. Ҡатын-ҡыҙ әсәһе, әхирәте йәҙәндә сер бүлешер кеше тапһа, ир-ат күңелен тиҙ генә аса һалып бармай. Бүлешһә лә ул серен ҡатыны менән генә бүлешергә мөмкин һәм беҙ, ҡатын булараҡ, ул серҙе ҡаты йоҙаҡ аҫтында тоторға бурыслыбыҙ. Ул һеҙгә серен асҡан икән, йүгереп сығып әхирәтегеҙ менән бүлешергә, донъя тултырып фекер алышырға мөмкинлек бирелгән, тип уйларға ярамай. Ирҙең сере менән бүлешеүҙе беҙҙән ниндәйҙер ҙур ярҙам өмөт итеүенә лә бәйле булмаҫҡа мөмкин. Кеше бер урында тапанмай алға атлау өсөн күңелендәге уй-серҙәрен кем менәндер уртаҡлашырға тейеш. Тормош шулай ҡоролған. Ирегеҙ серен уртаҡлашыр кеше итеп нәҡ һеҙҙе һайлаған икән, быға ҙур яуаплылыҡ менән ҡарап эш итеү мөһим. Беҙ бер ғаилә, тип хатта аталары һөйләгәндә балаларға ла асып- ярып һалырға ярамай. Әгәр ҙә улар белергә тейешле мәғлүмәт булһа, ир кеше үҙе еткерер.

**Салауат ВӘЛИЕВ, дәүләт хеҙмәткәре:** Ир менән ҡатын араһында ихласлыҡ, эскерһеҙлек булырға тейеш, әлбиттә. Ләкин был барлыҡ серҙәрен бер-береһенә һөйләп барырға тейештәр, тигәнде аңлатмай, миненсә. Мәҫәлән, бергә тормош ҡорғанға тиклем тик һинә генә ҡағылышлы булған ниндәйҙер сер хаҡында ҡатыныңа һөйләп тороу кәрәкмәй. Булған - үткән, ул бары тик һинең генә серең. Мин дә, үҙ сиратымда, уға ҡағылышлы, үткәндә тороп ҡалған хәл-ваҡиғаларға бәйле серҙәрен белмәүҙе хуп күрәм. Үткәндең бөгөнгөгә ҡағылышы булмаҫҡа тейеш. Һәр кемдең шкафында, урыҫтар әйтмешләй, йәшерелгән һөлдә бар, һәм ул башҡаларҙың, шул иҫәптән, ҡатыныңдың да, күҙенә салынмаҫҡа тейеш. Ә бөгөнгөгә килгәндә, тормош юлдашым итеп һайлаған ҡатынымдан сер итеп йәшерерҙәй ваҡиғаларға, ситуацияларға тарымаҫҡа тырышам. Икенсе яҡтан ҡараһаҡ, икәү белгән сер - сер булыуҙан туҡтамаймы ни?

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Һалҡын теймәһен, тиһәң...



❖ Вируслы ауырыуҙар ҡиҫкенләшкән саҡта кеше күп йыйылған урында булып ҡайтҡандан һуң бер стакан йылымыс һыуға ярты балғалаҡ аш тоҙо һалып болғатып, уҫҡа һалып, танау менән тартып алып, ауыҙҙан сығарып йыуҙырырға. Аҙаҡтан ошондай уҡ һыу йәки бер стакан йылы һыуға бер балғалаҡ аш содаһы һалып, тамаҡты сайҡатып ҡуйһағыҙ, ауырып китеү ихтималы кәмей.

❖ Шулай уҡ бер стакан ҡайнар һыуға берәр балғалаҡ аҡ сәскә, бәйгәмбәр тырнағы, шалфей һалып, 20 минут төнәтеп, һөҙөп, тамаҡты сайҡатығыҙ. Ошо уҡ төнәтмә менән танауҙы сайҡатып, оҙайлы һалҡын тейеүҙән ҡотолоп була. Ләкин аллергия булмаһын, һаҡ булығыҙ.

❖ Башлы һуғанды таҙартып, йыуып, 2-3 минут сәйнәп, төкөрһәң, ауыҙ эсендәге бактериялар юҡҡа сыға.

## Хәлде яҡшыртып, тонусты күтәрер өсөн

Берәр өлөш шалфей, йод йәки кейеҙ үләне (медуница), шайтан таяғы (татарник), бәпкә үләне (спорыш), бөтнөк, ике өлөш бәпембә тамыры алып болғатырға. 2 ҡалаҡ үләндәр ҡатнашмаһына (чертополох) сәскәһен ҡушып, 1 көнлөк төнәтмә яһап эсергә. Дауаны 10-12 көн дауам итергә.

## Яман шеш

Был насар сир булмаһын өсөн 10-ар көн дауамында йылына 3-4 тапҡыр үләндәр менән дауаланып алыу зыян итмәҫ. Бының өсөн ҡайын япрағы, юл үләне, һары мәтрүшкәне бер күләмдә алып болғатығыҙ һәм 2 ҡалаҡ ҡатнашмаға ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт төнәтергә. Һөҙгәндән һуң көнө буйы эсеп бөтөрөргә.

Шулай уҡ 1-әр балғалаҡ ҡайын еләге япрағы, һары мәтрүшкә, бәпкә үләне, эхинацея алып, 1 стакандай ҡайнар һыу менән бешекләп 30-40 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Был төнәтмәне бер көндә эсеп бөтөргә кәрәк. Дауаны 10 көн дауам итергә.

Флора БИКЕМБӘТОВА.

***✓ Ирем Хөрмәт бик иғтибарлы, яуаплы ғаилә башлығы. Янымда уның кеүек ныҡлы таянысым булғанда, балаларҙы үҫтереү, уларға матур тәрбиә биреүҙең ҡыйынлығы булмаҫ, тип ышанам.***

Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!

**Ҡатын-ҡыҙ бәхете нимәнән ғибәрәт? Беҙ ниндәй ваҡытта бәхетлебеҙ һәм тулы бәхет өсөн беҙгә нимә кәрәк? Ҡайһы саҡта беҙ үҙебеҙ ҙә был һорауҙарға яуап таба алмайбыҙ. Уйлап ҡараһаң, ҡатын-ҡыҙ бәхете өсөн күп тә кәрәк түгел: изге ҡараш, яратҡан кешеңдең йылмайыуы, балалар көлөүе, донъялар тыныслығы, яҡты көн, йылы ямғыр, сағыу сәскәләр... Шулай уҡ ҡәҙерле кешеләрең өсөн борсолоу, уларҙың һинең өсөн йән атып тороуы ла оло бәхеттер ул. Өфө районы Нуғай ауылында йәшәүсе өс бала әсәһе Гүзәл ШӘРИПОВА менән әңгәмәбеҙ башлыса ошо хаҡта - ҡатын-ҡыҙ бәхете, уның ғаиләләге урыны, бурыстары тураһында барҙы.**

# ИҢ ЮҒАРЫ ВАЗИФАБЫҘ...

## үҙ йортоңда ҡот һәм йылылыҡ булдырыу

### Яҡшы ҡатын - өй йәме

Яҡшы ҡатын - өй йәме, тиҙәр беҙҙең халыҡта. Ғаилә усағын һүндермәй, өйҙө таҙа, йыйнаҡ тотоу, ире эштән, балалары мәктәптән, балалар баҡсаһынан ҡайтыуға тәмле-татлы ризыҡтар бешереп, табын әҙерләп, яҡты сырай, асыҡ йөҙ менән ҡаршы алыу - ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы. Ошо бурысыңды үтәгәндә генә тормош иптәшең һәм балаларың ашҡынып, һине һағынып ҡайтыр, өйҙә йылылыҡ, ҡот, бәрәкәт, сафлыҡ булыр. Эйе, ҡыҙ-ҡатындың йортта башҡарған вазифалары ғәйәт ҙур һәм яуаплы, шуға ла ҡатын-ҡыҙҙың эше тауыҡ сүпләһә лә бөтмәй, тигәндәрҙер инде. Шулай ҙа йорт эштәре күп һәм бер ҡасан да бөтмәҫ кеүек тойолһа ла, уларҙы ихлас башҡарһаң, етмәһә, ул эштәргә ғаилә ағзалары - балаларыңды һәм иреңде лә йәлеп итә белһәң, һиҙелмәй ҙә ҡала. Был йәһәттән мин тыныс: балалар ҙа ҡул аҫтына инә башланы, ирем дә һәр ваҡыт ярҙамға килергә әҙер.

Кешенең эшкә оҫталығы, таҫыллығы ғаиләлә тәрбиәләнә. Мин был йәһәттән атайым менән әсәйемә бик рәхмәтлемен. Беҙ ғаиләлә өс ҡыҙ үҫтек, өсөбөҙ ҙә бешереүгә лә, ҡул эштәренә лә бик оҫтабыҙ. Әсәйемдең матур тәрбиәһен ҡәйнәм дауам итте. Ул бик аҡыллы, уңған ҡатын, юҡ ҡына нәмәнән бар яһай ҙа ҡуя. Шуға мин һәр ваҡыт ҡәйнәм менән кәңәшләшеп эшләйем, унан күп нәмәгә өйрәнәм.

Ғаиләне тулы килеш һаҡлар, балаларыңа матур тәрбиә бирер өсөн иң мөһиме - ир менән ҡатындың бер-береһенә булған мөхәббәтен, ихтирам тойғоһон һүрелтмәү. Кәңәшле өй таркалмаҫ, тигән аҡылды иҫебеҙҙә тотоп, ирем менән һәр эште кәңәшләшеп эшләргә тырышабыҙ. Әле яңы йорт һалабыҙ, бында ла минең кәңәштәрем, йылы һүҙем иремә мөһимдер, тип уйлайым. Өй һалғанда өйҙәй ҡатының булһын, тиҙәр бит инде. Ҡулымдан килгәнсә ярҙам итергә, сабыр булырға тырышам, эшселәргә аш яраштырыуҙы тулыһынса үҙ өҫтөмә алғанмын.

Туйыбыҙҙа ҡартатайым: "Ирегеттең бурысы - табыу, ә уны нисек ҡулланыу ҡатын-ҡыҙҙан тора", - тигәйне. Ысынлап та, ҡатын-ҡыҙ ире алып ҡайтҡанды әләф-тәләф итмәй бешерергә, табынға ҡуйырға бурыслы. Әгәр ҡатын ире тапҡанды исраф итһә, дөрөҫ ҡуллана белмәһә, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртһа, был йортта бәрәкәткә, ырыҫҡа, йылы мөнәсәбәттәргә урын ҡалмай.

### Бөтәһен дә үҙем әҙерләйем

Иремдең дә, балаларымдың да сәләмәтлегә минең ҡулда, тип һанайым, сөнки кешенең һаулығы уның нисек туҡланыуына бәйле. Шуға күрә бешергән һәр бер ризығым һаулығыбыҙға зыян итмәһен, файҙалы булһын, тип тырышам. Магазиндан аҙыҡ-түлекте һирәк һатып алам, сөнки колбаса, йогурт, соус, майонезды бөтөнләй ашамайбыҙ. Ашарға бешереү - үҙе бер сәнғәт бит ул. Мин бер ҡасан да әҙер рецепт буйынса бешермәйем, өйҙә нимә бар - шуны үҙемсә төрләндерәм. Өй ризығы тәмлерәк тә була бит инде, әле бәләкәй булыуҙарына ҡарамаҫтан, балаларым магазиндан алынған туҡмас ашын әлә ни өнәп етмәй. Ә сабыйҙары теләмәй генә ашап ултырһа, ниндәй әсә ҡәнәғәт ҡалыр? Шуға күрә туҡмасты өйҙә йәйәм, икмәкте лә үҙем бешерәм. Бешергән ашамлыҡтарыңды яҡындарың яратып, тәмләп ашаһа, рәхмәттәр әйтһә, үҙеңдең дә күңелең була, бешергән һайын бешерге килеп кенә тора. Ғаиләбеҙҙең иң яратҡан ризығы - ҙур бәлеште бешерә башлаһам, сәскәләрен беҙ эшләйбеҙ, тип бәләкәстәрем янымда йүгереп йөрөй.

Тәбиғи ризыҡтар, йәшелсә, емеш-еләк менән бик дуҫбыҙ. Балаларҙы ла тәбиғәтте яратырға, үләндәрҙе, сәскәләрҙе дөрөҫ файҙаланырға өйрәтәбеҙ. Һәр яҙ ҡайын һыуы йыйабыҙ, шулай уҡ уны һыуыткыста һаҡлап, ҡыш буйы ҡайын һыуы эсеп сығабыҙ. Ҡайын һуты организмды нығыта, бигерәк тә балалар өсөн уның файҙаһы әйтеп бөткөһөҙ. Ғөмүмән, балалар ауырыһа, шунда уҡ дарыу бирергә ашыҡмайым, бәләкәйҙән дарыу ашап өйрәнмәһендәр, халыҡ медицинаһын да өйрәнеп үҫһендәр, тием. Ҡышҡы һалҡындарҙа емешеләк һуты эсәбеҙ, һыуыҡтан һаҡланыр өсөн ҡарағат, лимон, һарымһаҡ, һуған ашайбыҙ.

Йәйгеһен төрлө һуттар, салаттар эшләйем, ҡайнатмалар ҡайнатам. Ҡарағаттан, алманан эшләгән ҡаҡтарҙы балалар бигерәк ярата. Шулай уҡ өҫтәлебеҙҙән халҡыбыҙҙың билдәле һөт ризыҡтары: май, эремсек, ҡорот өҙөлмәй. Бының өсөн ауылдағы туғандарыбыҙға ҙур рәхмәт! Йәшелсә, емеш-еләктәрҙе шул килеш һыуыткыста һаҡлағанға күрә, ҡыш буйы витамин ашап сығабыҙ. Был шул йәһәттән дә унайлы: тиҙ генә бешереп ебәрәм тиһәң, барыһы ла ҡул аҫтында, алаһың да ҡулланаһың.

### Бала тәрбиәләү - иң яуаплы эш

Хәҙерге заманда, бигерәк тә ҡалала, ғаиләлә күп бала үҫтереүе ҡыйын, тип зарланыусыларҙы, ошо изге бурысты ауырлыҡҡа һанап, бер генә бала тәрбиәләүсе ғаиләләрҙе беләм. Был ғаиләләр ҡалай хаталана, үҙҙәрен донъяланы иң ҙур бәхеттән мәхрүм итә, тип әйтер инем. Һәр бер бала донъяға үҙ ризыҡы менән тыуа, ғаиләлә балаларҙың күп булыуы, киреһенсә, мул бәхет күрһәткесе бит. Бөгөн күп ҡатын-ҡыҙҙар карьера артынан ҡыуып, эштә ҙур вазифалар биләп, ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Ошо арҡала беҙ милләтебеҙҙең һанын да кәметәбеҙҙер, моғайын. Миненсә, ҡатын-ҡыҙ үҙен тик ғаиләлә генә тулыһынса аса ала. Юғары вазифа биләп йөрөүселәр, бәлки, иптәштәре, коллегалары араһында үҙен бәхетле, лайыҡлы тип тоялыр ҙа ул, ләкин өйөндә уны һағынып көтөп тороусылар булмауы ни тиклем аяныслы. Быйндай тормоштоң бер ниндәй ҙә мәғәнәһен күрмәйем. Ҡайһы ваҡыт шул тиклем арып ҡитәһең, әммә сабыйыңдың эргәңә килеп бер һүҙ әйтеүе бөтөн арыуҙарыңды юҡҡа сығара һәм һин йүгереп йөрөп уларҙы хәстәрләй башлайһың.

Ҡатын-ҡыҙҙың төп тәғәйенләнеше һәм иң изге бурысы - әсә булыу, милләтенә лайыҡлы улдар-ҡыҙҙар тәрбиәләү. Уның был бурысты ниндәй кимәлдә атҡарыуы тәрбиәләп үҫтергән балаларынан күренә лә инде. Бала тәрбиәләүе бик яуаплы эш. Ирем Хөрмәт бик иғтибарлы, яуаплы ғаилә башлығы. Янымда уның кеүек ныҡлы таянысым булғанда, балаларҙы үҫтереү, уларға матур тәрбиә биреүҙең ҡыйынлығы булмаҫ, тип ышанам. Улдарым үҙҙәренә һәр ваҡыт атайҙарын үрнәк итеп ала. Үҙем дә атай абруйын һиҙыҡ өҫтөнә алып торам. Бигерәк тә өлкән улыбыҙ Иҙелхан атаһына булышып, күберәк уның янында йөрөй. Шулай итеп үҙенә тәжрибә лә туплай, һүҙ араһында атаһының кәнәштәрен дә ҡолағына һеңдереп бара. Уралбатыр менән Илһөйәр әле бәләкәй булғас, күберәк минең янымда. Көнө буйы улар менән уйнайбыҙ, әкиәт, шиғырҙар уҡыйбыҙ, йәнһүрәттәр ҡарайбыҙ. Уларҙың ҡыҙыҡһынып биргән һорауҙарын яуапһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышам. Тәрбиә йәһәтенән шулай уҡ олатай-өләсәйҙәренең дә йоғонтоһо көслө: ауылға ҡайтҡан һайын төрлө һөнәрҙәргә өйрәнеп, аҡыл-зиһен туплап киләләр. Баланы бер ҡасан да ноҡот уҡып өйрәтеп булмай, тәрбиә эш, хеҙмәт менән бергә үрелеп барырға тейеш. Үҙемде лә атай-әсәйем бойороп, әрләп тәрбиәләгәнен бер ҙә хәтерләмәйем.

Кистәрен йортобоҙ умарта күсе кеүек геү килеп тора: һәр кем үҙенең көндәлек кисерештәре менән бүлешә, күмәкләшеп йә шахмат, йә шашка уйнайбыҙ, хатта телевизор ҡабыҙырға ла ваҡытыбыҙ ҡалмай. Геү килеп торған ғаиләмә ҡарайым да, шөкөрҙәр әйтәм, бөтәбеҙгә лә иҫәнлек-һаулыҡ теләйем.

Аллаһы Тәғәлә ҡатын-ҡыҙҙы гүзәл зат итеп яралтҡан, беҙ шуның менән дә бәхетлебеҙ. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ беҙ һәр ваҡыт матур, нәфис булып ҡалырға тейешбеҙ. Кейемебеҙ ҙә, сәсебеҙ ҙә, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙ ҙа һоҡланыу уятырлыҡ булырға тейеш. Иптәшем минең ҡулдәк кейгәнемде ярата, итәге тубыҡтан өҫтә булмаһын, тигән талабы ла бар. Ашарға бешергәндә яулыҡ ябынам: бер яҡтан ҡараһаң, ҡатын-ҡыҙға яулыҡ килешә, икенсенән, был таҙалыҡты ла күҙ уңында тота. Бер ҡасан да өйҙә шамтылап халат кейеп йөрөргә ярамай. Өйҙә булһаң да һин бит кеше өсөн түгел, үҙең өсөн йәшәйһең. Һинең күңелең күтәренке, йөҙөң яҡты булһа, башҡаларҙың да күңеле күр, өй тулы шатлыҡ булыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Гүзәл Шәриповананан рецепт:**

**Ашҡабаҡ һәм балан повидлоһы**

**0,5 кг баланды таҙалап, эҫе һыуҙа тотоп алырға, иләк аша үткәрергә. 0,5 кг ашҡабаҡты эсен-тышын таҙалап, әҙ генә бешереп алырға, шулай уҡ иләк аша үткәрергә. Икеүһен бергә ҡушып болғап, 1 кг шәкәр ҡомо өҫтәп, ярты сәғәт повидло кеүек ҡуйырғансы ҡайнатып алырға. Файҙалы ла, тәмле лә ризыҡ килеп сыға.**

**Үҙенсәлекле ҡоймаҡ**

**400 гр он, 30 гр сүпрә, 2 бешкән картуф, 1 аш ҡалағы үсемлек майы, 1 аш ҡалағы шәкәр, тоҙ, 1 һарымһаҡ тырнағы, 1 стакан йылы һөт. Һөткә шәкәр менән сүпрәне һалып бутарға һәм йылы урынға ҡуйырға. Картуфты ҡабығынан әрсергә, иҙергә һәм ҡамыр менән бутарға. Килеп сыҡҡан массаға үсемлек майы, һарымһыҡ, ондо өҫтәргә. Күберсектәр сыҡҡансы иҙергә. Он һибергә һәм тағы бер сәғәткә ҡуйып торорға. Ҡамыр ике тапҡырға артасаҡ. Бәләкәй өлөштәргә бүлеп, майҙа ҡыҙҙырып алырға.**

**Духовкала бешкән тауыҡ ите**

**0,5 кг тауыҡ итен тоҙ, борос, һарымһаҡ (майонез да ҡушырға мөмкин) һыларға. Картуфты түнәрәкләп ҡырҡып шулай уҡ һыларға. Табаға әҙ генә май һалып, беренсе ҡатламға ит, икенсегә картуф, өсөнсөгә һуған, дүртенсегә ҡырғыстан үткәрелгән сыр һалып, өҫтөн майонез йәки май менән һыларға. Духовкала 40 минут бешереп алырға.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**



ШУНДАЙ ШӘХЕСТӘР БУЛҒАН!

# ШӘРИФӘ ТИМЕРҒӘЛИНА

**Ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә әллә күпме эштәр башҡарып өлгөргән, юғары үрҙәргә күтәрелгән шәхестәрҙең береһе - Шәрифә Тимерғәлина. Ул 1910 йылда Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең Ҡәнзәфәр исемле башкорт ауылында тыуған. Ул ерҙәр 1918 йылдан Башҡортостандың Арғаяш кантонына инә, 1930 йылда бында Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондары ойошторола. 1934 йылда башкорт райондары БАССР-ҙан алынып Силәбе өлкәһенә бирелә. Хәҙер был ауыл Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районына ҡарай.**



Шәрифә Тимерғәзи ҡыҙы Тимерғәлинаның бала сағы бик ауыр заманға тура килә. Граждандар һуғышы һәм унын артынса килгән ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә 1921 йылда Башҡортостанда ҡот осҡос аслыҡ башлана. Аслыҡтан унын атаһы, ике һеңлеһе һәләк була. Бәләкәй Шәрифәне Һары ауылындағы балалар йортона урынлаштыралар. Бында ул 1922 йылдың көҙөнә тиклем тәрбиәләнә. Әммә балалар йорто ябылғас, ҡайтып, ауыл муллаһының йортонда өй эштәрен башҡарып көн итә. 1924 йылда ҡыҙҙы Өфөгә Ленин исемендәге етем балалар өсөн махсус мәктәпкә урынлаштыралар. Бында Шәрифә Тимерғәлина комсомол эшенә ылығып китә. Әүҙем ҡыҙҙы 1929 йылда Башҡортостан ВЛКСМ-ы өлкә комитетына саҡыртып, пионерҙарҙың өлкә бюроһы рәйесе урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. ВЛКСМ өлкә комитеты бюроһына ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлайҙар.

Бер йылдан Шәрифә Тимерғәлина Башҡортостан пионерҙары ойошмаһы етәксеһе итеп һайлана. Ул үҙен һәләтле ойоштороусы итеп тә таныта. 1929 йылда унын тырышлығы менән пионерҙарҙың 1-се слеты уҙғарыла. Был сара пионерҙар хәрәкәтенең көсәйеүенә булышлыҡ итә.

Унын эшен комсомол етәкселеге лә күрә. 1931 йылда Тимерғәлина ВЛКСМ-дың пропаганда һәм мәҙәниәт бүлеге мөдире, артабан 2-се секретары булып эшләй. Шул уҡ йылды уны БАССР ВЛКСМ-ы өлкә комитетының 1-се секретары итеп һайлайҙар. 20 йәшлек комсомол етәксеһе ең һыҙғанып эшкә тотона. Бер йыл эсендә генә Башҡортостанда индустриялаштырыу эшенә өс мең тирәһе йәш кеше йәлеп ителә, шулар араһынан 2 меңе комсомол була. Шәрифә Тимерғәлина йәштәрҙе уҡытыуға ла ҙур иғтибар бирә. 1931-1932 йылғы уҡыу йылында Башҡортостан комсомолынан педагогия курстарына 2 меңдән ашыу кеше уҡырға ебәрелә.

1931 йылда комсомолдарҙың һаны 32 мең кешегә артып, Башҡортостан комсомолы үҙ сафтарында 75 мең кешене туплаған йәштәр ойошмаһына әүерелә. Шәрифә Тимерғәлина үҙенә лә белемен камиллаштырырға, артабан уҡырға кәрәклеген яҡшы аңлай. Сөнки ул 8 класс ҡына тамалап өлгөрә, артабан пионер, комсомол эшенән бушамай. 1933 йылда ул үҙен уҡырға ебәреүҙәрен һорап Мәскәүгә, ВЛКСМ-дын Үҙәк Комитетына мөрәжәғәт итә. Әммә Үҙәк комитет быға ризалыҡ бирмәй.

Шәрифә Тимерғәлина үҙенең тырыш хеҙмәте, ойоштороу һәләте менән республикала ҙур абруй һәм ихтирам ҡаҙана. Тиҙҙән унын исеме Советтар Союзы кимәленә сыға. 1934 йылда Тимерғәлина СССР ҡатын-ҡыҙҙары делегацияһы составында Парижда үткән һуғышҡа ҡаршы ҡатын-ҡыҙҙар конгресында ҡатнаша.

Комсомолдың X съезында һағаған ялҡынлы сығышында Шәрифә Тимерғәлина урындағы комсомол ойошмаларының етешһеҙлектәрен асып һала. Шулай уҡ ул ҡатын-ҡыҙҙар хоҡуҡтарын яҡлап сығыш яһай. Ошо уҡ съезда Шәрифә Тимерғәлина ВЛКСМ Үҙәк Комитеты бюроһы ағзаһы итеп һайлана. Ул Үҙәк Комитеттың уҡыусы йәштәр бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. 1937 йылдың авгусында ошо бүлектең мөдире вазифаһын биләй. Шул уҡ 1937 йылда үткән комсомолдың 4-се пленумында Ш. Тимерғәлина ҡатын-ҡыҙ йәштәр араһында эш алып барыу буйынса ВЛКСМ Үҙәк Комитеты секретары итеп тәғәйенләнә. Ошо уҡ йылдың декабрендә ул Советтар Союзының юғары башҡарма органы - СССР Юғары Советы депутаты итеп һайлана.

Шулай итеп, 27 йәшендә Шәрифә Тимерғәлина Советтар Союзы кимәлендәге комсомол етәкселәренең береһенә әүерелә. Әммә тап ошо осорҙа "халыҡ дошмандарын" эҙәрлекләү башлана. Сталиндың репрессия машинаһының ауыр тәгәрмәсе аҫтына партия эшмәкәрҙәре генә түгел, комсомол етәкселәре лә эләгә. 1938 йылда совет власына ҡаршы эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, Башҡортостан комсомолының етәкселеге ҡулға алына. Улар бөтәһе лә Л. Троцкий яҡлы контрреволюцион йәштәр ойошмаһын төҙөүҙә ҡатнашҡанлыҡтарын "таный". НКВД-ның тырышлығы менән Башҡортостанда буржуаз-милләтселек йәштәр ойошмаһы булыуы "асыҡлана". Ҡулға алынған комсомол етәкселәре был ойошманың башлығы итеп Шәрифә Тимерғәлинаны күрһәтә.

Башҡортостанда "халыҡ дошмандарын" асыҡлау менән шөғөлләнгән КПСС өлкә комитеты секретары Заликин Тимерғәлина тураһында Мәскәүгә хат яҙа. 1938 йылдың октябрендә Шәрифә Тимерғәлина ВЛКСМ Үҙәк Комитетындағы эшенән бушатыла. Башҡортостандан килгән икенсе ялыу һөҙөмтәһендә уны ҡулға алалар. Был осорҙа инде ВЛКСМ Үҙәк Комитеты ла Сталин тарафынан тар-мар ителә. 1938 йылдың 26 февралендә СССР Юғары Советының Хәрби коллегияһы Шәрифә Тимерғәзи ҡыҙын атыуға хөкөм итә. Сталин үлгәндән һуң, 1956 йылдың июлендә шул уҡ Хәрби коллегия Шәрифә Тимерғәлинаның исемен аҡлай.

**Азат ЮЛАН.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

## ТЕЛЕ ҒӘҘЕЛ БУЛМАҒАНДЫҢ...

### күңеле ҡара була

- Кеше күңеле - төпһөҙ ҡойо, алтын сынйыр кәрәк төшөргә.
- Эскән кеше - муйынына элмәк һалған хәмер ҡоло.
- Ҡар аҫтындағы бысраҡ күренмәгәндәй, үҙ насарлығын һиҙелмәй.
- Күҙ йәштәрен ағыҙып ҡына хәсрәттән ҡоролоп булмай - кешеләрҙә һине йәлләү тойғоһо ғына тыуа.
- Әсе теллелең ауыҙы - борос һауыты, ғәйбәтсенеке - әрем.
- Олонан һабаҡ, йәштән көс-ғәйрәт ал.
- Иркәнең елкәһе йоҡа: тиҙ ауырый ҙа, тиҙ арый.
- Аш ҡәҙерен белгәндәргә алабута ла аш, ҡойҡа ла туй һыйы.
- Уйлау бер эш, уйҙы һүҙгә әйләндереп ваҡытында әйтеү - ҙур тәүәккәллек.
- Ҡул көсөң етмәгәндә аҡыллы хәйләңде эшкә ек.
- Сәйләү ғәбе - тормош ғәме: уйҙарҙы берләштерә, эштәрҙе төрләндерә.
- Һүҙ донъяһы - тәрән даръя, кисеү тап һәм йөҙә бел.
- Һөнәр алырға тырыш - ул һинең ашарға һорамай, ә бирә.
- Һәр дәүерҙең аҡылдан шашҡан ҡылыҡтарына эйәреп шашма аҡылдан, үҙең булып ҡал.
- Эт елмәйгән хужаһы күҙенә, ришүәтсе, йоторҙай булып, йомошсо ҡулына ҡарай.
- Аҡ янында ҡараны хурлама, аҡ та ҡараға әйләнә.
- Икмәк һәр саҡ яңы була, ашаусы һайланмаһа.
- Тотона белгәнгә тин дә ҙур аҡса, асыҡ ҡулға меңе лә етмәй.
- Юлдар оҙон, әммә сиге бар, уй-хистәрҙең генә осо юҡ.
- Яҡшы бәндә өргән эткә тиң - һәр ергә ыҙғыш сығарырға әүәҫ.
- Теле ғәҙел булмағандың күңеле ҡара булыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

НИСЕК АҢЛАЙҺЫҢ?




# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТ:

## "Ирендең йоҡоһон һаҡла"

**Әминә БИКТАШЕВА:** Хәҙер инде байтаҡ йәшкә еткән кеше булараҡ, шуны аңланым: ҡатын-ҡыҙ нәфис зат тиһәк тә, ир-аттың организмы беҙҙекенә ҡарағанда күпкә көсһөҙөрәк. Уларға ял, яҡшы мөнәсәбәт, һәйбәт туҡланыу кеүек һаулығын һаҡларлыҡ мөмкинселек ғаиләлә булырға тейеш, сөнки иң ауыр, иң яуаплы мәлдә ир-атҡа таянмай хәлең юҡ. Был ҡанунды йәштән үк белмәһәм дә, эске бер тойомлау булғанмы икән, бер ҡасан да олатайығыҙға минән оҙағыраҡ йоҡлап ятаһын, тип әйткәнем булманы. Гел эштә булды, шуға ла өйҙә булған сағында бер-аҙ ял итеп алыуын мөмкин тиклем хуплап торҙом. Аллаға шөкөр, олатайығыҙ 75 йәшкә етте, мин 70-те үтеп киттем, унын һаулығының ныҡ булыуы ғаиләбеҙҙең именлеген булдыра.

Ғөмүмән, донъя көткәндә иң ауыр эштәр ирҙәргә эләгә. Яңыраҡ телевизорған хайуандар донъяһынан бер күренеште күрһәттеләр ҙә, шуға ғәжәпләнеп, байтаҡ уйланып йөрөнөм. Арыҫландарҙың инәһе аҙыҡ табып, тотош ғаиләнен туйындыра икән. Ә ата арыҫлан аҙыҡ та тапмай, балаларын да ҡарамай, әммә ошо ғаиләлә йәшәй. Балалары ҙурая башлаһа ла инә енеслене генә әсәһе менән һунарға йөрөй башлай. Уйлап ҡараһаң, ата арыҫландың бөтөнләй кәрәге лә юҡ һымаҡ. Ғаилә ҙурайғас, аҙыҡ күберәк кәрәк бит инде, шуға ла инә арыҫлан ҙурыраҡ берәй йәнлеккә, мәҫәлән, буйволға һөжүм итә, әммә көсө етмәй. Тап ошо ваҡытта ата арыҫландың кәрәге тейә икән, ул инә арыҫланға ярҙамға килә. Шуның шикелле, тормошта ҡатын-ҡыҙ атҡара алмаҫтай, уйлап еткерә алмаҫтай мәсьәләләрҙе ир-ат тиҙ генә хәл итә лә ҡуя. Шуға ла, хөрмәтле гүзәл ҡатын-ҡыҙҙар, ирегеҙҙең йоҡоһон да, тыныслығын да, сәләмәтлеген дә һаҡлағыҙ.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ, драматург:** Борон-борондан ҡатын ғаилә усағын һаҡлаусы иҫәпләнә. Иренең һәм балаларының тамағы туҡ, өҫтө таҙа, күңелдәре бөтөн булыуын ҡатын хәстәрләй - был яҙылмаған ҡанун. Ә ир - мал табыусы. Ул арып, йонсоп ҡайтмаһен өсөн ваҡытында йоҡоһон туйҙырып йөрөргә тейеш. Йоҡоһо туйған кешенең кәйефе лә яҡшы була, ул балаларына һәм ҡатынына йылы һүҙҙәрен дә йәлләмәй бит инде. Шуның өсөн ҡатын иренең йоҡоһон һаҡларға тейеш, тип яуап бирһәм, был бик иҫкерген, күп тапалған фекер була. Был нәсихәтте бөгөнгө күҙлектән ҡараһаҡ, нимә күрәбеҙ һуң? Ир ҡайһы осраҡта тыныс йоҡлай? Ғаиләнен ҡараған, улар мохтажлыҡ кисермәҫлек аҡса тапҡан, фатиры йәки йорто булған ирҙең, әлбиттә, йоҡоһон һаҡларға кәрәк. Был осраҡта ғаиләһенә ел-ямғыр тейҙермәгән ирен ҡатын да һаҡлаясаҡ. Донъяһы теүәл булған ирҙең йоҡоһо ла яҡшы була. Әммә бөгөн ирҙәрҙең төрлөһө төрлө хәлдә. Уларға хәҙер бигерәк ауыр, сөнки бөгөн беҙҙең дәүләт ирҙәр тураһында хәстәрлек күрмәй, уларға үҙ һәләтлектәрен тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирмәй. Эш хаҡы бәләкәй, фатир һатып алыу ниндәйҙер татлы төш кеүек кенә. Йәшәр урыны булмағас, егеттәр өйләнергә лә ашыҡмай. Шуға ла тыныс ҡына йоҡлап ятырға унын үҙенең дә теләге юҡтыр, моғайын.

*✓ Бында ла ҡатын-ҡыҙҙың сабыр, теге-был ситуациянан шымараҡ сыға белеүе ҡотҡара. Әлеге лә баяғы буйһоноусанлыҡ. Ир-ат бит аҙағын уйламай, начальнигы ҡыҫырыҡлай башлаһа, күтәреп һуғып сыға ла китә.*

# ТОҠОМОБОҘҘО

## Хоҙай беҙҙе ғорур

**Ҡатын-ҡыҙҙар байрамы алдынан республикабыҙ райондарында йәшәгән, үҙебеҙҙең авторҙарыбыҙ булған гүзәл заттарға - Бөрйән районынан Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНАға һәм Учалы районынан Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВАға өс һорау ебәргәйнек, улар беҙгә яуаптарын яҙып та өлгөрттө. Ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәндә әңгәмәселәр, гәҙәттә, бер-береһенә эйәреп фекер ҡора. Ситтән тороп диалог ҡорғанда, билдәле, һәр кем үҙ аллы фекер төйнәй. Бында ла бер үк һорауға төрлө яуаптар ишетербеҙ. Ә һорауҙар шулай ҡуйылғайны:**

**1. Ир-аттарҙың башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын ғорур булыуҙа ғәйепләүенең сәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ?**

**2. Заманға һәм ирҙәребеҙгә яраҡлашабыҙ, тип, беҙ, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, ҡылыҡ-фиғелебеҙҙе үҙгәртә алабыҙмы?**

**3. Сит милләт ҡыҙҙарына егеттәребеҙҙе бирмәҫ өсөн беҙ ни эшләргә тейеш?**

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА:**

1. Ир-аттарҙың башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын ғорур булыуҙа ғәйепләүендә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем. Ғәйепләһендәр. Барыбер башҡорт ир-атының күпселеге үҙ милләтенән йәр һайлай бит. Шулай булғас, ғәйепләү һүҙҙә генә ҡала. Мәҫәлән, минең тыуған ауылым Мәһәҙейҙе генә алғанда ла, белеүемсә, сит милләт вәкиленә тормошҡа сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар 4-5-тән артмай. Ә икенсе милләттән ҡатын алған ирҙе төбәп кенә әйтә лә алмайым, юҡ, шикелле.

Теге "ғәйепләү"ҙең артында ғорурланыу ҙа яталыр, тим. Эйе, беҙ ғорурбыҙ. Беҙҙең халыҡҡа сөсөләнеү, ярамһаҡланыу хас түгел. Уны беҙ үҙебеҙ, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, үҙгәртә алмағанды, ир-ат ҡына үҙгәртә алмай инде. Был сифат - Хоҙайҙан. Хоҙай бүләгелер. Яҙаһылыр, тип әйтә алмайым, сөнки Аллаһы Тәғәлә - иң әҙәми зат. Бәй, шулай булғас, ғорур булыуыбыҙға шөкөр итеп йәшәйек. Киҫкен заман тайпылыштары осоронда милләт булараҡ һаҡланып ҡалыр өсөн Хоҙай беҙҙе шулай ғорур ҡылғандыр, моғайын. Башҡорттоң "Ир - баш, ҡатын - муйын" тигән мәҡәле бар барлыҡҡа, әммә башты муйын бора бит.

Беҙҙең ғорурлыҡ тәкәбберлек түгел. Күңелендә борсаҡ ҡәҙәре генә лә тәкәбберлек булғандар ожмахҡа инмәй, тиҙәр. Беҙҙең ғорурлыҡ - баҫалҡылыҡ. Ә мосолман - ирме, ҡатынмы ул, баҫалҡы булырға тейеш.

Кешелек донъяһы үҙенә иң Бөйөк зат - Аллаһы Тәғәлә ебәргән Конституциянан - Ҡөрьәндән ситләшеп, ҡалыптарына үҙе һыймаған закондар уйлап сығарған. Ана шул яһалма ҡалып-ҡанундарға һыя алмай тыпырсынған ҡәүемде, беҙҙе, моғайын, Аллаһ ошо сифат менән бүләкләгән. Аллаһ закондары буйынса ир-ат мал табып, ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеп, үҙе Ҡөрьән ҡушҡанса ғәмәл ҡылырға, артынан ғаиләһен - көтөүен эйәртергә тейеш. Шул осраҡта ҡатын-ҡыҙ уға буйһонорға бурыслы. Ә беҙҙә нисек? Киреһенсә. Үҙе дин тотмаған, намаҙ уҡымаған, Ҡөрьәнде ни тип тә белмәгән, ураҙа тотмаған, зәкәт түләмәгән иргә шыпа буйһонғо килмәй. Сөнки Аллаһ ҡушҡанса түгел ғәмәлдәребеҙ. Ҡатынын иманға өндәп, балаларын намаҙға баҫтырыу ҙа, мосолман кейемдәре алып биреү ҙә - ир бурысы. Аллаһ алдында тәү бурысын үтәмәгән иргә ҡатын нисек буйһонһон? Был - абсурд. Әгәр ирең иманлы булып, ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итһә, һыуыҡҡысы тулы ризыҡтан аш-һыу әҙерләп, ирең өсөн биҙәнеп-төҙәнеп ултырыу беҙгә, ҡатын-ҡыҙға, һис ауыр түгел. Бешерә белмәһәң, кәңәш китаптары донъя. Ирең намаҙҙа булып, өйҙө аҙан тауышы менән ен-шайтандан таҙартып торһа, уның артына баҫып, намаҙ уҡыу нимә ул беҙгә! Ир-ат беренсел бурысын үтәһә, Аллаһ закондары буйынса йәшәһә, ғаиләһен шуға әйҙәһә, гендарында булған буйһоноусанлыҡты эшкә егеү ҡатын-ҡыҙға бер ни түгел.

Икенсенән, ир-аттың күбеһе хәҙер эшһеҙ. Бигерәк тә ауыл ерендә. Бында ла ҡатын-ҡыҙҙың сабыр, теге-был ситуациянан шымараҡ сыға белеүе ҡотҡара. Әлеге лә баяғы буйһоноусанлыҡ. Эшкә, етәксегә. Ир-ат бит аҙағын уйламай, начальнигы ҡыҫырыҡлай башлаһа, күтәреп һуғып сыға ла китә. Уның баяғы тәү инстинкты эшләй: кеше кеше ҡоло түгел, Аллаһ ҡоло!

Беҙҙең тормош-йәшәйешебеҙ дөрөҫ төҙөлмәгән. Тигеҙлек, тип, Октябрь революцияһынан һуң ҡатын-ҡыҙҙы йәмғиәт үҙе шаштырҙы. Мосолмандың яулығын көсләп систереп, диндар халыҡты атеист яһанылар. Асылынан яҙған халыҡ ни европаса йәшәй алманы, ни үҙе булып ҡала алманы. Аҡса эшләй башлағас (ҡайһы бер осраҡта ирҙәрҙән күберәк) ҡатын-ҡыҙ буйһоноу сифатын юғалтты. Бәй, аҡсаһыҙ, мәшәү, ғаиләһен түгел, үҙен дә ҡарай алмаған иргә нисек буйһонмаҡ кәрәк?

Беҙҙең йәмғиәттә шулай: ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа тыуаһы-тыуғандан алып ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһендә. Балалар баҡсаһы, мәктәп коллективтары тотош ҡатын-ҡыҙҙан тора.



Сөнки унда ир-ат бармай - эш хаҡы аҙ, түләнмәгән эше күп.

Бөгөнгө көндә ғорур башҡорт ҡатын-ҡыҙы ла, шул ғорурлыҡты еңә алмаған ир-ат та ике ут араһында. Береһе икенсеһеҙ йәшәй алмай, бергә лә ҡыйын. Көрсөктән сығыу юлы - дин. Дин тергеҙелә башлағас, мәсеткә кем йөрөнө - ҡатын-ҡыҙ, ураҙаны күпселек кем тота - улар. Бәй, шулай булғас, Хоҙай үҙе әлеге рухи көрсөк осоронда асылыбыҙ сылбыры өҙөлмәһен өсөн дилбегәне ҡатын-ҡыҙ ҡулына тапшырған булып сыға түгелме һуң? Әле саҡ дингә килгән йәш егеттәребеҙ үҙ балаларын шәриғәт һәм үҙ милләтенең рухиәт ҡанундары буйынса тәрбиәләп, донъя йөгөн үҙ ҡулына алғанғаса.

Рух ҡуласаһын тотоп тороусы йәбештергес - баяғы ғорурлыҡ. Уны өҙмәйек, өҙөргә маташмайыҡ, йәмәғәт. Хоҙай үҙе икенсе юл биргәнсе сабыр итәйек.

2. Маташып ҡараныҡ бит инде. Сәсте ҡырҡтыҡ, хәмерен эсәбеҙ, тәмәкеһен тартабыҙ, итәктәр - бот төбөнән, телебеҙ ни урыҫ түгел, ни башҡорт түгел.

Иң аяныслыһы - беҙгә әле һанап ки телгән сифаттар йоҡмай. Заманға эйәреү беҙгә мандыу ҙа, бәрәкәт тә, муллыҡ та, башҡа бер ни ҙә бирмәне. Күпселек башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары әле асылын юғалтмаған- ауылдарҙа әле һүҙ башында ҡылыҡһырланған "ханым"дар баһаһыҙ. Заманға күҙ йомоп эйәреү беҙгә ни бирҙе? Балалар суициды, ҡыҙҙар фәхешлеге, хәмер һаҙлығына батыу, рух аҡһауы, ауырыу, битараф быуын. Ошо быуын да - беҙҙең балалар, беҙҙең милләт вәкилдәре. Үрҙә әйтелгән насар сифаттар менән телетапшырыуҙар, китаптар, милицияға тарттырыу аша ғына көрәшеп булмай. Былар - ваҡытлыса дарыу. Төптән ошо сирҙәрҙән арыныу өсөн рухты тәрбиәләү шарт. Был тәңгәлдә рухи тәрбиә тағын дин менән бергә алып барылырға тейеш. Динле ҡыҙ бот төбөнән юбка кейеп, тәмәкеһен арҡыры тешләп, фәхишә булып йөрөмәйәсәк, динле егет элмәккә башын тыҡмаясаҡ.

***Аллаһ закондары буйынса ир-ат мал табып, ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итеп, үҙе Ҡөрьән ҡушҡанса ғәмәл ҡылырға, артынан ғаиләһен - көтөүен эйәртергә тейеш. Шул осраҡта ҡатын-ҡыҙ уға буйһонорға бурыслы. Ә беҙҙә нисек? Киреһенсә. Үҙе дин тотмаған, намаҙ уҡымаған, Ҡөрьәнде ни тип тә белмәгән, ураҙа тотмаған, зәкәт түләмәгән иргә шыпа буйһонғо килмәй. Сөнки Аллаһ ҡушҡанса түгел ғәмәлдәребеҙ. Ҡатынын иманға өндәп, балаларын намаҙға баҫтырыу ҙа, мосолман кейемдәре алып биреү ҙә - ир бурысы. Аллаһ алдында тәү бурысын үтәмәгән иргә ҡатын нисек буйһонһон? Был - абсурд. Әгәр ирең иманлы булып, ғаиләһен матди яҡтан тәьмин итһә, һыуыҡҡысы тулы ризыҡтан аш-һыу әҙерләп, ирең өсөн биҙәнеп-төҙәнеп ултырыу беҙгә, ҡатын-ҡыҙға, һис ауыр түгел.***

Әлбиттә, замандан артта ҡалмаған, сит телдәр белгән, компьютерҙы уйынсыҡтай ҙа күрмәгән, рухлы йәштәр маҡтауға лайыҡ. Заманға яраҡлашыу (насар яҡтан) ҡатын-ҡыҙға бумеранг булып ҡайта. Үҙең эсеп, аҙып-туҙып йөрөһәң, балаң кем була? Мода артынан ҡыуыу - ғәүрәт ерҙәрҙе күрһәтеү бихисап ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарына килтерә. Енси аҙғынлыҡ ҙур гонаһ ҡына түгел, сирҙәр сылбыры, түлһеҙлек тә...

3. Бөгөндән эш башларға. Ҡатын-ҡыҙ, һүҙ башымдағыса, өйҙә ултырып, балаһына дини тәрбиә бирмәһә, йөрәк емешен урам, Интернет йә "астан үлмәҫ өсөн " генә эшләп йөрөгән тәрбиәсе, уҡытыусы тәрбиәләһә, рухи көрсөк киләсәктә буласаҡ. Сөнки хәҙер китап уҡымаған, спектаклдәргә йөрөмәгән, көнө буйы компьютер артында ултырған, "аська" аша аралашҡан ялҡау, битараф, Аллаһ урынына аҡса тип телен асҡан быуын үҫеп килә. Заман технологиялары, ҡул көсөн техника алмаштырыу бер яҡтан һәйбәт булһа, икенсе яҡтан буш ваҡыты күп булған балаларҙы үҙ башын юҡ-бар менән тултырырға мәжбүр итә.

Берауыҡҡа туҡтап, уйлап ҡарайыҡ: беҙҙең ҡайһыбыҙҙың балаһының теле үҙенекенән бай? Юҡ бит. Кемдең балаһы үҙенән күп китап уҡый? Юҡ бит. Тел гәүһәрҙәрен "аська", рух йәдкәрен Васька алыштырҙы. Беҙ үҙ ата-әсәйҙәребеҙ эшләгән күләмдә эш эшләмәһәк, беҙҙең балалар беҙ эшләгән эштең сиреген дә эшләмәй. Хәҙер мәктәп - мода күрһәтеү урынына әйләнеп барһа, балаларыбыҙҙың "үҫеш"ен ҡиммәтле кейем алып биреүҙә - замандан артта ҡалдырмауҙа күрәбеҙ. Быныһы ла кәрәк. Башҡалар кәмһетеп ҡарамаһын өсөн.

Әммә рухиәт яғы аҡһай бит. Бында ла: рух тәрбиәләгәндә дингә таянырға, дини тәрбиәлә рухты онотмаҫҡа бурыслыбыҙ.

Фәһем, шәхси өлгө, тыуаһы-тыуғандан дини, рухи тәрбиә - ҡотҡарыу түңәрәге. Ә бәғзе бер егеттәребеҙ икенсе милләт вәкилдәренә өйләнә икән - мәйелдәре. Үҙ асылынан биҙеп, икенсе рухи донъя һайлағандар икән - үҙҙәренә ҡарап үпкәләһендәр. Улар барыбер камил бәхетле түгел. Кишер түтәлендәге бер бөртөк алабутаға көн юҡ - йолҡоп быраҡтыралар, йә ҡояшта кибә, күҙгә салынып зитҡа тейә.

Әлеге мәлдә дингә йөҙ борҙоҡ. Унда ла аҙашабыҙ, абынабыҙ-һөрлөгәбеҙ. Йәрең кем булһа ла булһын, фәҡәт мосолман булһын, тигән төптө хата ҡараш тамыр йәйә. Бөйөк ижадсы Аллаһ, әгәр теләһә, ер йөҙөндә бер генә милләт, халыҡ, тел булдырыр ине. Улай түгел бит. Тимәк, уға башҡорт та, урыҫ та, татар ҙа кәрәк. Бөйөк яратыусы беҙҙе төрлө итеп бар ҡылған, бәй, ниңә шулай булғас, бөтәбеҙҙән бер винегрет яһарға ынтылырға? Был - Аллаһ хөкөмдәренә ҡаршы барыу. Тағы беҙгә бит Аллаһ аҡыл биргән. Аҙашмаҫҡа, абынмаҫҡа . Халыҡ белеп әйткән: аҡыл - алдан, асыу арттан йөрөһөн...

Өс һорауға яуабым да дингә барып төртөлдө. Был -заман талабы. Аллаһы Тәғәлә: "Һорағыҙ - яуап бирермен ",- тигән. Һорайыҡ. Үҙебеҙгә - сабырлыҡ, милләтебеҙгә - һан, тәнебеҙгә - һаулыҡ, иманыбыҙға - ныҡлыҡ, телебеҙгә - ҡеүәт, күңелебеҙгә - өмөт. Миңә атлап килгән бәндәмә йүгереп барырмын, тигән бит Аллаһ. Күмәкләп һорағандың ҡабул булыуына ышаныс ҙур.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА:**

1. Ғорурлыҡтың тамырҙары бары үҙенде киҫкен шарттарҙа янғыҙлыҡтан ҡурсалауға барып тоташҡан. Өлкәнерәк апайҙарҙан ҡала, беҙҙең йәштәштәребеҙ әсәй, өләсәй, еңгәләр биргән тормош һабаҡтары солғанышында буй еткерҙе.

Беренсенән, ҡыҙ бала ата-әсә йортонда өлгөрә, әммә ире йортонда сәскә ата. Шуға күрә, ваҡытлыса мауығыуҙарға

**✓ Өс кешенең доғаһын мин ҡабул ҡылмам: яман ҡатынын айырмағандың, аласағын юллап алмағандың, аҡылы юҡҡа мал биргәндең, "Аҡылы юҡҡа мал бирмә!" - тип, әйткән һүҙҙе тыңламағандың.**

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

68
Барыһына мал хужа тип,
Әйтә күрмә ҡомһоҙ һүҙен.
Яулаһын кеше күңелен
Күркәм холҡоң, көләс йөҙөң.

69
Бәрәкәт - һинең алдында:
Атыңдың маңлай ялында.

70
Сабырлыҡ - Алла бүләге,
Ашығыу - шайтан теләге.

71
Өс балаһы булһа әгәр бер ҡатындың,
Шул өс бала һаҡлар уны ут-ялҡындан.

72
Өс кешене һис яратмаҫ һинең Раббың:
Емерек өйөндә ҡул ҡаушырып ултырғанды,
Ауыҙын асып, юл уртаһында торғанды,
Малдарын сығарып ебәреп,
Туҡтат шуларҙы, Аллам, тип,
Доға ҡылыуҙан уҙмағанды.

73
Өс кешенең доғаһын мин ҡабул ҡылмам:
Яман ҡатынын айырмағандың,
Аласағын юллап алмағандың,
Аҡылы юҡҡа мал биргәндең,
"Аҡылы юҡҡа мал бирмә!" - тип,
Әйткән һүҙҙе тыңламағандың.

74
Ҡиәмәт көнө килгәс һәр кемгә,
Дәғүәм булыр өс төркөмгә:
Миңә һүҙ биреп, шул һүҙгә
Хыянат иткән бәндәләргә,
Ирекле кешене һатып,
Хаҡын ашаған йәндәргә,
Кешене яллап эшләтеп,
Хаҡын түләмәгәндәргә.

75
Ҡиәмәт көндә өс кешегә
Боролоп та баҡмаҫ Аллаһ,
Ғазаплар, тормаҫ ярлыҡап.
Ул ғазап - зинасы ҡартҡа,
Тағы - алдаҡсы батшаға,
Тағы - тәкәббер ярлыға.

76
Ихлас күңел менән инан,
Аҙ ғәмәлең дә шул саҡта
Булыр һинә оло иман.

77
Үҙ-үҙенән йәлләмәйсә саҙаҡаға
Һис юғында ярты хөрмә бирһен бәндә.
Ул да юҡта яҡты йөҙлө, яҡшы һүҙле
Мөғәләмәң һаҡлар һине йәһәннәмдән.

78
Йәтим баланы аҫырап,
Матур үҫтергән ғаилә -
Аллаһ өсөн иң күркәме,
Ҡарар уға һөйөү илә.

79
Атырға өйрәнһәң һин
Сәп итмә йән эйәһен.

80
Ҡаты һабаҡ алғас бер сағылып,
Йәнлек ояһына кем ҡағылыр?

81
Һатып бер ни ҙә алмайым -
Аҡсаға мин ҡағылмайым.

**(Дауамы бар).**




И-и, әхирәткәйҙәрем, булмаһа булмай икән баҙарҙа көл күмәсе! Был ләкәп минең һымаҡ эҙләгәнен табыуҙан өмөтө өҙөлгән берәүҙең әсенеп әйткән һүҙҙәрелер инде. Ә ҡыҙ кешенең был донъяла иң ныҡ теләгәне, билдәле инде - кейәү. Ҡупшылап әйткәндә - һөйгән йәр, китапса - хәләл ефет. Ымһынмаҫ та инең - Хоҙай Тәғәлә булмышыңды шулай яратҡас, ҡайҙа бараһың? Уҡымышлылар уны тәбиғәт, тип аңлатмаҡсы. Ләкин нисек кенә атаһаң да, асылы бер - һөйгә, һөйөлгә килә, шайтан.

Баштан уҡ ҡыҙып китеп, үҙем менән таныштырыу ҙа иҫтән сыҡҡан. Гөлниса мин. Йәғни, гөл кеүек бисә. Әлегә ҡыҙ кешемен, исемемдә "гөл һымаҡ ҡатын буласаҡ" тип юрап ҡушҡандар. Ысынлап та, һыу һибеүсеһе булһа, йыл һайын бөрөгә тулышып, сәскә атырға әҙермен.

Исемең матур икән, тиерһегеҙ. Өйрәнһәң, бөтә исемдәр ҙә матур инде ул. Үҙемә оҡшай былай. Ләкин есемем менән сағыштырғанда, исемем сүп кенә. Ҡайһы бер әҙәби аҫәрҙәгесә әйткәндә, буш ауаз. Халыҡ теле менән атаһаң - ҡоро тауыш.

Маҡтана тимәһегеҙ, баяғы есемемә ҡағылышлы миҫал килтереп үтәйем. Моғайын, күбегеҙ ауыл тормошон күҙ алдына килтерәләр: йыш ҡына район үҙәгенә юл төшә. Бөтә нәмә ҡағыҙға ҡоролған заманда йомошо ла табылып ҡына тора. Ҡайһы берҙә юҡ йомошто бар итеп магазин йә баҙар ҡыҙырып та ҡайтаһың. Беҙ, бисәләр, уны яратабыҙ бит инде. Һатып алырға хәлдән килмәһә лә, затлы кейем-һалым ҡарап йөйыуаңы үҙе бер һөнәр.

Ситкәрәк киттем шикелле. Танмайым - бар миндә ундай етешһеҙлек. Әлеге лә баяғы яңғыҙлыҡ касафаты - зарығып йөрөгәс, эс серҙәренең ҡайһыһын һөйләргә белеп булмай. Бәгзе берәү: "Был ирһерәүҙән алйып, аҡылға бер көйгә әүерелеп бара түгелме?" - тип уйлар. Әстәғәфирулла, тәүбә!..

Эйе, уйыбыҙ район үҙәге тирәләй урала ине. Унда беҙҙең ауылдан берәү күҙ врачы булып эшләй. Йәше ҡырҡ менән илле араһында. Үҙе бик шаян телле. Шул Хәмит ағай мине урамда осратып, бер көндө: "Гөлниса, һин район үҙәгенә килеп ҡайтһаң, миңә пациенттар һөрлөгөшөп килә - барыһы ла ир-егет, бөтәһененң дә бер диагноз: ҡылый күҙлелек", - тип шаяртҡан була. Үҙе көлмәй генә әйтһә лә, күҙҙәре йылмандап, йыҙлап тора. Һиҙҙермәҫкә тырышып ҡарашын кәүҙәмдең әле бер, әле икенсе еренә күсереүенән үҙенең дә хәле шаяртып телгә алған пациенттарыныҡынан арыу түгел икәнен тойомларға мөмкин. Икенсе бер ваҡыт ауылға ҡайтҡанында әлеге Хәмит ағай: "Һуңғы арала район үҙәгендә күренмәй киттең. Һин килмәгәс, пациенттар юҡ, эшһеҙлектән йонсоп кабинетта тик ултырам", - тип көлдөрә ине.

Ул төрттөрмәһә лә, ир-аттың ҡомһоҙ ҡарашынан үҙемде ҡайҙа итергә белмәгән саҡтарым күп була. Ҡаймаҡҡа тамшанған бесәй һымаҡ күҙҙәрен майландырып, ашай яҙып текләп үтеү менән мөрхәтһенмәйенсә, боролоп арттан ҡарап ҡала, хәсистәр. Уларҙың оятһыҙ ҡараштарынан янбаш тирәләре менән балтырҙарым сәнсеп-сәнсеп ала хатта.

Шулай уҡ эс серҙәреңде һөйләрлек бер кемең дә юҡмы ни, тиерһегеҙ. Арлы-бирле донъя хәлдәре тураһында һөйләшер кешеләр етерлек тә, тик йөрәк серҙәрен бүлешер, уй-хыялдарҙы уртаҡлашыр әҙәм юҡ. Шул уҡ әсәйемде алайыҡ. Беҙ уның менән мин иҫ белгәндән алып икәүҙән-икәү донъя көтәбеҙ. Атайым мин имсәк бала саҡта фажиғәле рәүештә һәләк булған. Әсәйемдең һөйләүе буйынса, Уралдан өйләк бүрәнә алып ҡайтып килгәндә, трактор арбаһына тейәлгән сей ҡарағайҙарҙың өҫтәгеһе үр төшкәндә шылып китеп, кабиналағы атайымды бәреп үлтерә. Мин уның үҙен дә, төҫөн дә хәтерләмәйем. Ә эс серҙәремде, йөрәгемдең яныуҙарын әсәйемә һөйләп, уның ҡайғыһын яңыртайыммы? Былай ҙа минең өсөн көйәләнә, һаман үҙемә иш таба алмағанға бошона. Һуңғы өс-дүрт йылда намаҙға баҫып, Аллаһы Тәғәләнән миңә бәхет теләп ялбарып та ҡараған була, йөрәккәйем. Бер көн эштән иртәрәк ҡайттым да, серемгә киткән булһа, уятмайым тип, шым ғына өйгә инеп килһәм, уның иламһыраған тауыш менән Хоҙайға аҙарынғанын ишетәм: "... ниңә генә гәҙеллегең юҡ? Минең аһ-зарҙарым менән түккән күҙ йәшем әҙ булдымы? Ошо бер бөртөк бауыр итемдең яҙмышын уйлап, һораткан ерҙәргә бармай заяға уҙғарған ғүмерем етмәнеме? Шулар бәрәбәренә ҡыҙыма бәхет бирһәңсе, Раббым, үҙенең һынарына юлыҡҡала. Ә яңылыш һүҙ ысҡындырһам? Тәүбә, тәүбә, Хоҙай күрһәтмәһен!..

Донъяла егерме һигеҙ йыл йәшәп, әҙәми заттың холоҡ-фиғелен ятлап бөткәнмен. Араларында әйткәнендә үҙең һымаҡ ихлас ҡабул иткәндәре бихисап. Уларҙан айырмалы рәүештә, һөйләгән хәбәреңдән йөй эҙләргә торғандары ла етерлек. Ана шул һуңғы төркөмгә ингәндәр: "Ҡупырайыуыңа ҡарағанда, һинән дә һылыу бисә юҡ. Улайһа, ниңә утыҙға тиклем кейәүгә сыҡмай ултырҙың?" - тип сәнстерер. Беренсенән, ҡупыраймайым, ә булғанын әйтәм. Уныһын да ярты-йорто ғына. Икенсенән, мин әле бисә түгел, ҡыҙ кешемен. Аллаға шөкөр, ғиффәтлемен. Әсәйем шулай тәрбиәләгән. Ысынлап та, барыбыҙға ла ир-аттың муйынына аҫылынып, һуңынан бала ҡосаҡлап ултырып ҡалырға тимәгән. Була икән - тәртипсә, ә булмай икән - ана тора...

Шулай ҙа мин дә быйыл кейәүгә сыға яҙып ҡуйҙым бит. Әллә Хоҙай әсәйемдең ялбарыуҙарын ишетә бирһаңсы!... Һинең ҡөҙрәтең киң, йомартлығың сикһеҙ бит!.."

Әсәйемдең шундай мәхрүмселеккә төшөүенән күңелем тулды. Икенсенән, уны шул көнгә ҡалдырыуым өсөн гәрләнеп, үҙемә йәнем көйҙө. Ни рәүешле килеп инһәм, шулай шым ғына кире сыҡтым да, һарайға бикләнеп, туйғансы иланым.

Әйткәндәй, мин ауылыбыҙҙағы икмәк бешереү цехында кондитер булып эшләйем. Мин унда эшкә төшкәндә райондың өҫтән бер өлөшөн биләп ятҡан ҙур совхоз тарҡалыу өҫтөндә ине. Бөгөн иһә ҡасандыр гөрләп торған хужалыҡтың емерелеүе уңышлы тамамланды. Уның урынына эштән ҡотолған айырым ауылдар һәм шуларҙың уртаһында әле беҙ йәшәп ятҡан элекке совхоз үҙәге генә тороп ҡалды. Хужалыҡ тарҡалһа ла, халыҡтың көн һайын икмәк ашағыһы килә. Шуға күрә, был эштең булғанына шөкөр итеп тик йөрөйөм. Эштә лә әхирәттәрем юҡ түгел, әлбиттә. Ләкин берҙе биш итергә торған ҡыҙ-ҡыркынға артыҡ хәбәрҙе бары тик үҙ-үҙенә дошман булған кеше генә һөйләйҙер. Әле бер ҡул менән ауыҙҙы, икенсеһе менән ир-аттың күҙен ҡыҙҙырған ерҙе ҡаплап ҡына йөрөгән көйө саҡ булып реп ҡалды, әллә яҙмыш тигәндәренең берәй ғилләһе булды. Уныһына хәбәремдең дауамынан төшөнһәгеҙ, бәлки, һеҙ төшөнәрһегеҙ. Мин аңламаным былай. Сыға яҙҙым тип, шартына килтереп сыҡтым инде ул мин. Кейәү ҙә уйлап табылған түгел, ә ысын. Исеме Рәмил. Үҙе бала саҡта тыңлаған әкиәттәр шауҡымынан барлыҡҡа килгәндәй, уҙыуға китер ете диңгеҙ, ете тау арьяғынан түгел, ә күршелә генә ятҡан Миндегол ауылынан булып сыҡты. Йәше утыҙҙан уҙған, әсәһе менән генә донъя көтә икән. Былай иһе генә күренә, эсмәй, тартмай, ти. Әлбиттә, һеҙҙең ҡайһы берегеҙҙәй булып, күңелгә шик төшә бирер ҡуйҙы: "Улай нәжесен ергә төшөрмәй ил ауыҙы маҡтарлыҡ булғас, нишләп быға өйләнмәй йөрөгән икән?" Уй һинән һорап килмәй бит, ҡәһәрең! Әлегә уны тыйырлыҡ әмәл табылмаған.

Әммә ул яҙыҡлы уйҙы баштан ҡыуырға тырышам. "Бәй, төрлө сәбәптәре бар инде уның, - тип уйлайым. - Быуна мин дә ултырам бит ҡарт ҡыҙ ҡушаматы алып. Бәлки, ул да үҙенең күңеленә ятҡандай ишен таба алмайҙыр..." Әсәйемдең дә тел төбө өгөтнәсихәт яғынараҡ ауыша: "Әллә инде, ҡыҙым. Бар ҙа бар , тип димләмәйем, тик әле халыҡ егеттең үҙен,

нәҫел-нәсәбен маҡтағанға ғына әйтәм: әллә, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшкәндә яҡшы булыр ине, тигән йәүкә ебәреп ҡарайыҡмы? Кем белә, бәлки, бер-берегеҙҙе оҡшатып та ҡуйырһығыҙ..." Мин: "Ә нимә юғалтам һуң әле?" - тип уйланым да, бер һүҙ ҙә өндәшмәнем. Ысынлап та, кешегә күҙ менән тел нимә өсөн бирелгән һуң? Ә әсәйем минең холоҡто яҡшы белә: өндәшмәйем икән - тимәк, ҡаршы түгелмен.

Ауыл араһында йәүкә телефонынан да ышаныслыһы юҡтыр. Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китәйем әле: һуңғы арала унын мәғәнәһен боҙоп "йүкә телефоны" тип атайҙарсы. Әллә ҡайҙа уҡып, белем алмаһам да, йәүкәнең ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа тапшырып еткерелгән хәбәр икәнен аңлайым. Элемтәгә бер ҡатнашлығы ла булмаған йүкә ағасының бында ни ҡыҫылышы барҙыр инде?..

Ярай, быныһы һүҙ араһында ғына ысҡынып китте. Төп һүҙ әсәйемдең Миңдеғолға оҙатҡан йәүкәһе тураһында ине бит. Эйе, унын менән анау һөйләшеүҙән һуң өс-дүрт көн үткәс, эштән ҡайтһам, өйҙә ҡунаҡтар бар. Уларҙың кемдәр икәнлеген аңлар өсөн күп аҡыл кәрәкмәгәненә һеҙ ҙә төшөнәһегеҙҙер? Әсәйем нисектер теремекләнеп киткәндәй, йөҙөнән бығаса таныш булмаған нур бөркөлөп тора. Ул эске бер кинәнестән балҡып, Рәмил менән буласаҡ ҡоҙағыйын сәй менән һыйлай ине. Ҡәйнә була торған кеше әсәйемдән тиҫтә йылға йәшерәк күренә, теле лә күпкә һөйәкһеҙерәк. Бергәләп сәй эскән арала улын бәләкәйҙән яңғыҙ тәрбиәләгәненән алып, хәҙерге көндә унын вахта ысулы менән Екатеринбург ҡалаһында төҙөлөштә эшләгәненә ҡәҙәр һөйләп бирҙе.

Әсәһенән айырмалы рәүештә, Рәмил бик баҫалҡы күренде. Үҙенә төбәп килгәс, кешене һынайһың бит инде. Былай аҫтыртын, эскерле кешегә оҡшамай - әсәһенең хәбәрен көләмһерәй биреп тыңлап тик ултыра. Миңә бер-ике тапҡыр күҙ һирпеп алды ла, башҡа күтәрелеп ҡараманы - аҫҡа теклэп ултырыуҙы хуп күрҙе. Аңламаҫһың: әллә әҙәплелек күрһәтеүе, әллә миңә ҡарата битарафлыҡ һаҡлауы? Миңә ҡалһа, Рәмил әсәһенең һүҙен йыға алмайынса, ҡыҙыҡһыныуҙанмы, башҡа сәбәптәнме, уға эйәреп кенә килгәндәй тойолдо.

Китаптарҙа: "Ҡатын-ҡыҙҙа һиҙемләү көслө була", - тип яҙалар. Ысын икән. Минең дә һиҙемләүем раҫҡа сыҡты. Ләкин Рәмил тураһындағы фаразым дөрөҫләнгәнгә тиклем икебеҙҙең никах йолаһы башҡарылды. Ул теүәл бер аҙнанан һуң булды. Никахты тиҙләтеү ҙә ҡәйнә булаһы кешенең бөтмөрлөгөнән ине. Йәнәһе, йәштәр бер-берәһен күрҙе, кемеһелер кире уйлап-фәлән ҡуймаҫ борон тимерҙе ҡыҙыуында һуға.

Бер-беренде күреү - бер хәл, унын оҡшатыу, күңел тартыу тигән ғәләмәте бар бит әле. Мөхәббәт тураһында һүҙ ҙә юҡ. Был никахҡа риза булыуым сараһыҙлыҡтан инде. Әсәйем дөрөҫ әйтә: һайлана торған сағым түгел. "Йәшәй-йәшәй өйрәнеп китермен әле, - тип уйланым. - Ана, элек кәләш булаһы ҡыҙ үҙенең барымсығын ҡайһы саҡта никах көнөндә генә күргән. Шулай булһа ла ғаиләләр тарҡалмаған. Ә хәҙер? Бөгөн ҡыҙ менән егеттең үлә яҙып яратышҡанын, иртәгәһенә айырылышҡанын күрәһең. Ә Рәмилдең төҫкә йәмһеҙерәк булыуына килгәндә иһә, ҡатын-ҡыҙҙар үҙ-ара былайтып шаярта: "Ир кеше маймылдан әҙ генә һөйкөмлөрәк булһа, уға кейәүгә сығырға мөмкин".

Хәлебеҙҙе самалап ҡына ойошторолған никах мәжлесенән һуң мин Миңдеғолға - ҡәйнә йортона оҙатылдым. Һөйләшеү буйынса, икеөс айҙан буласаҡ туйға ҡәҙәр унда йәшәп торорға тейеш инем. Былай тәү ҡарауға донъялары төҙөк, йорт-ҡуралары тәрбиәле генә икән. "Тимәк, егеттең ҡулы ипле, тормош көтөүгә дәрте бар", - тип уйлап, эсем йылынып китте. Ә ҡалғаны, ысынлап та, булыр әле. Ҡыҫҡаһы, яҙмышыма тамам күнеп, күңел урынына ултыра яҙып ҡуйҙы.

Быna бер мәл ҡыҙ дәүеремдең һуңғы көнө һүрелеп, энер кискә, кис төнгә ауышты. Нисәмә йылдар күнегелгән азат тормош менән хушлашыуы яманһыу шулай ҙа. Аңлайышһыҙ тойғоларҙан күңел елкенә, бар донъяны солғап алған ҡара төн ише билдәһеҙлекте уйлап, йөрәк семетеп ҡуя. Бығаса татып ҡарамаған ғаилә тормошо, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт ымһындыра ла, ҡурҡыта ла.

Беҙ төпкө бүлмәләге диванға яттыҡ, ҡәйнәм үҙенә түшәкте алғы өйҙөң урындығына йәйҙе. Минең йөрәк ашҡыныуҙан дарҫ та дорҫ тибә, бер юрған аҫтында ятҡан егеттән ниндәйҙер хәрәкәт көтә. Нимәнән башлар икән? Моғайын, тәүҙә ҡулдарымды тотҡан булыр. Һуңынан ҡосағына алыр, наҙлап иркәләр, үбер... Нишләтһә лә ризамын - бөгөнгө көндән унын никахлы кәләшемен бит.

Ләкин егет яғынан бер ниндәй шипкерт-фәлән беленмәй. Әйтерһең, эргәлә тере йән түгел, ә түмәр ята. Һис юғы, йәнһеҙ түгел икәнен белгертеп, берәй йылы һүҙ шыбырлаһа, яҡыныраҡ шылып ятһа ни була икән? Төҫ-һыным, килеш-килбәтем унын күңелендә бер ниндәй хис уятмай микән ни? Ята торғас, ғәрлек килә башланы. Эстән генә: "Әллә әсәһенең ҡаты йоҡоға талғанын көтә микән?" - тип уйлайым да, тағы аптырайым. Әгәр шулай икән, уныһы ла килешкән - бер төнгә күрше-маҙарына барып йоҡлаһа ла була бит.

Шулай өн-тынһыҙ байтаҡ ятып ташланыҡ. Сама менән төндөң яртыһы үтһә лә, йөрәкһеүҙән күҙгә йоҡо эленмәй - дауырғыған күңел ниҙер көтә, өмөт итә. Бындай хәлде башынан үткәргәндәр аңлайҙыр: тәүге ҡауышыу төнөндә ниндәй йоҡо булыуы мөмкин? Бер мәл ул әйләнеп, был тулғанып зарыға торғас, шикләнә башланым: әллә артыҡ йөрәкһеүҙән үлеп ҡуйҙымы был? Нисек кенә намыҫ килмәһен, үҙем тәүәккәлләргә булдым - иплэп кенә ҡулын һәрмәнем. Ҡулы йылы былай - үлгән кешенекенә оҡшамаған. Хәҙер минең яҡынлауға бер ниндәй ҡаршы хәрәкәт булмауҙан күңелгә икенсе шик төштө: йоҡлап ята түгелме? Ысынлап та, мин ҡапшаған нәмә ҡул ни, ағас ни. Етмәһә, Рәмил минең ҡағылыуҙан йоҡо аралаш ыңғыраша биреп, ауыҙын шапылдата-шапылдата тәмле итеп тамшанды ла арты менән боролоп, төш күреүен дауам итте.

Бына һиңә зифаф төнө, бына һиңә кейәү!.. Хурлыҡ менән ғәрлек тойғоларының бер юлы ябырылыуынан башыма эҫе йүгерҙе, йәнем тетрәнеүҙән маңлайға тирҙәр бәреп сыҡты. Бындай мәсхәрәгә ҡаршы бар көскә ҡысҡырып ебәреүҙән үҙемде саҡ тыйҙым. Нимә булды был: мине хурлауымы, мыҫҡыл итеүеме? Әллә Хоҙай ирлек ҡеүәтенән мәхрүм иткән бер эшлекһеҙме? Мәсхәрәләп, үс алырлыҡ зыяным теймәгән, моғайын, һуңғы фараз дөрөҫләккә тап киләләр. Әгәр шулай булһа, инәһенең башына мине ҡаңғыртамы?..

Эргәмдә иҫ белмәй йоҡлап ятҡан кейәү шәрәмәтен быуып үлтерерҙәй, үҙ-үҙемде өҙгөләп ташларҙай булып үртәлеп ятыу етмәгән, ҡапыл тумбытып-тумбытып тешем һыҙлай башланы. Бер осрағанда Хәмит ағай: "Бөтә ауырыуҙар нервынан бит ул", - тип һөйләп торғайны, моғайын, шулайҙыр - көйәләнеүем ҡаты әрнеү булып аҙау тешкә бирәлер. Кемдең башынан үткән, шул белә инде - теш һыҙлауҙан да яман рәнйеү юҡ. Ундай саҡта ыңғыраша-ыңғыраша бар донъяны ҡәһәрләгәнегеҙ иҫегеҙҙәлер. Мин дә шундайыраҡ хәлдә ятам. Ваҡыты менән һыҙлау кәмегән һымаҡ була ла, бер аҙҙан тағы көсәйә. Шундай мәлдә, ауыртыуға түҙмәй, ыңғырашырға тотонам. Өҫтәүенә, эргәмдәге йән көйөгөнөң әпсәһе нервыла уйнай. Ауыртыуға сыҙамай ыңғыраша башлаһам, урталағы ябыҡ ишек аша: "Рәмил, балам, ниңә киленде ул ҡәҙәре ыҙалатаһың? Килен бер көнләк түгел дә һуң", - тип һөйләнә. Уф, Аллам! Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та. Ул бупылдаған арала теш һыҙлауы баҫылғандай була - мин тынып ҡалам. Әҙерәк ятҡас, әрнеү йәнә көсәйә - мин ыңғырашмайынса түҙә алмайым. Алйыған ҡарсыҡ тағы теге бүлмәнән төшөнөң әллә нисәнсе серияһын күреп ятҡан улын тыйып маташа: "Рәмил, етер инде! Бер төн менән төн бөтәме?" Унын был көләмәскә тартым хәбәре былай ҙа дөрләп янған йөрәгемә кәрәсин булып һибелә лә, баяғы ҡәһәр һуҡҡан теш оторо ныҡ һыҙлай башлай. Эй, илаһым, ниндәй гонаһтарым өсөн был ғазаптар?!.

Ул арала көн нурының бөләнгерт шәүләһе булып таң һыҙыла башланы. Яҡтылыҡтың ошо осмот ҡынаһы зиһенемдә: "Мин нишләп былайтып ятам әле?" - тигән һорауҙы уятты. Ысынлап та! Ҡырҡа-яран бер фекергә килеп, ырғып торҙом да, кейенә башланым. Йән асыуҙан ашығып кейенгән арала, үҙ-үҙемде әрләйем: "Иҫәр! Аңын-тоңон белмәйенсә, анталашып кейәүгә сығамы кеше? К...ң ҡысып йөрөгәндә, шул кәрәк һиңә!.."

Ҡәйнә була яҙған кеше, юҡ нәмәне аңдып, һаман йоҡламай ятҡан икән - мин төпкө бүлмәнән килеп сыҡҡас, башын кәкәндәтеп тороп килә: "Ҡайҙа бараһың, килен?" "Атаңдың башына", - тип әйтергә тел ҡысытып ҡуйҙы, тик, берҙән, ул ғәйепһеҙ, икенсенән, оло кешене ниңә рәнйетергә, тип уйлап: "Сығып инәм", - тинем дә, тышҡа ашыҡтым. Хуш, Миңдеғол, һаумы, тыуған ауылым!

Ғәжәп, әллә саф һауанан, әллә дөрөҫ ҡарарға килеп, йән тынысланa төшөүҙән, тештең һыҙлауы баҫылғандай итте. Ә, бәлки, мөҙҙәте сыҡҡандыр. Шуның шикелле, минең был хурлығым да, ул һалған йән әрнеүҙәре лә баҫылыр әле. Төрлө хәбәрҙәр, имеш-мимештәр булыр - мейес утынһыҙ яна алмағандай, ауыл да ғәйбәтһеҙ йәшәй алмай.Тик улар ҙа тиҙҙән онотолор. Әсәйемде генә йәлләйем: үҙ һыңарымды табып, бәхетле булыр көндәремде күрә алмаҫ микән ни? Мин уға кейәүгә бармаҫ борон айырылып ҡайтыуымдың сәбәбен оялмайынса һөйләй алмам, бары тик: "И-и, әсәй, булмаһа булмай икән баҙарҙа көл күмәсе!" - тип кенә әйтермен. Моғайын, аңлар - сабырлығы башынан ашҡан, әүлиәгә тиң Алла бәндәһе бит ул минең әсәйем.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# КӘЛӘШЕҢДЕ...

## мәһәр түләп ал

**Биш йыл элек бер егет менән ҡыҙға бата йәғни никах уҡыталар. Шул саҡта алдан һөйләшелгән мәһәрҙе егеттең ата-әсәһе тултырмай килтерә. Ҡыҙҙың атаһы: "Ошо көн ҡыҙымдың хәтерендә оҙаҡҡа ҡалһын өсөн иҫтәлеккә бүләк алып бир", - тип аҡсаны кейәү егеткә бирә. Кискеһен ҡыҙҙы йәшереү, ишек бауы, йыртыш йолалары атҡарыла. Барыһына ла кейәү аҡса һала. Икенсе көндө лә ҡәйнеш балдыҙ-ҡәйнештәренә бүләккә аҡса тарата. Шуның менән аҡса, дөрөҫөрәге, мәһәр бөтә. Ә кәләшкә бүләк алынмай ҡала. Ваҡыт үтә. Дуҫ ҡыҙҙары: "Мәһәр аҡсаһына үҙеңә ниндәй бүләк алдың?"- тип һорап аптырата. Ләкин ыңғай яуап алынмай. Йәғни мәһәр түләнмәгән, килен һатып алынмаған - беҙҙең яҡтарҙа был ғәрлек һанала. Ғөмүмән, мәһәрҙе кем түләргә тейеш: егет үҙеме, әллә унын ата-әсәһеме? Зинһар, нисек булырға тейеш икәнлеген аңлатығыҙсы!**
**Һорауға Баймаҡ мәсете мөхтәсибе Хөрмәтулла хәҙрәт Буранбаев яуап бирә:**

Мәһәр -Ҡөрьән буйынса һорап алынған бүләкте аңлата. Ҡыҙ бала, әгәр үҙе оялһа, ата-әсәһе аша үҙенә бүләккә кәрәкле әйберҙе, аҡсамы, ҡиммәтле биҙәүесме, һораттыра. Ике ара мәһәрҙең хаҡын һөйләшеп, килешкәс кенә никах уҡытыла. Әгәр шул саҡта кейәү кәләшенә ниҙер вәғәҙә итә икән, ул уны мотлаҡ үтәргә тейеш. Был кейәүҙең һәм унын ата-әсәһенең мотлаҡ үтәй торған бурысы булып тора. Хат яҙыусы "килен һатып алынманы" тигән. Мәһәр ҡыҙҙы һатып алыуҙы аңлатмай. Ниндәй кеше үҙенең балаһын һатырға риза булһын? Һүҙ ҡыҙға биреләсәк бүләк тураһында бара.

Ислам динендә ҡатын кешенең байлығы, мөлкәте һәр саҡ үҙендә һаҡланып ҡала. Ғаиләне ашатыу-кейендереү, тулыһынса тәьмин итеү - ир-егеттең бурысы. Ҡатын-ҡыҙ тапҡанын үҙенә генә тотона. Был ҡатын кешегә балаһына кейем һатып алырға тыйыла тигәнде аңлатмай. Әлбиттә, ул да балаларына кейем-һалым, уйынсыҡтар һ.б. алыуы мөмкин. Тик ғаиләһен тәьмин итеү тулыһынса ир кешенең елкәһендә булырға тейеш.

Ә беҙ хәҙерге ғаиләләрҙә нимә күҙәтәбеҙ? Ир кеше алған эш хаҡын тулыһынса ҡатынына бирә. Ҡатын ул аҡсаны аҙыҡ-түлеккә, кейем-һалымға, коммуналь хеҙмәттәргә, балалар баҡсаһы өсөн түләүгә, машинаға бензинға, запчаҫҡа, иренә тәмәкегә тотона. Күпме генә тартып һуҙһа ла, аҡсаны еткерә алмай аҙаплана. Әммә ир быны аңламай, "Мин бит һиңә эш хаҡымды бирҙем, һин уны ҡайҙа иттең?" тип ҡаңғырта. Был һәр ғаиләлә күҙәтелә бөгөн. Шуға күрә ир-егет ғаиләһен тәьмин итеүҙе тулыһынса үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Әгәр аҡса етмәй башлаһа, ул өҫтәлмә эш йәки юғарыраҡ эш хаҡы түләнгән урын табыу тураһында уйланырға бурыслы. Юғиһә, хәҙерге ҡатындар үҙҙәре һәм балалары өсөн генә түгел, ә ирҙәре өсөн дә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә ауҙарып, ирҙәренең булдыҡһыҙлығына зарлана. Ә кем ғәйепле һуң был хәлгә? Ғаилә ҡоролошо, ҡатын һәм ир бурыстары тураһында беҙҙең изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә барыһы ла яҙылған. Әммә уны тотоп ҡараусы ғына юҡ.

Мәһәр мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтҡанда, биргән онотола, һораған онотолмай, тигәндәр. Шуға күрә ҡыҙҙы биргәндә ҡиммәтле бүләк һорауҙан тартынырға кәрәкмәй. Аҙаҡтан барыбер уртаҡ фекергә киләсәкһегеҙ. Мәҫәлән, ни өсөн кешеләр быяла һауытҡа ҡарағанда гәлсәрҙе өҫтөнөрәк күрә? Сөнки гәлсәр - ҡиммәтле. Әгәр ҡатын-ҡыҙ баштан уҡ үҙенең абруйын тота белә икән, ире лә уға гәлсәргә ҡарағандай ҡарар, һаҡлар. Ә инде тәүҙән үк үҙегеҙҙе ҡәҙерләргә өйрәтмәһәгеҙ, ғүмер буйы һеҙгә шул арзанлы, ватылыусан быяла һауытҡа ҡарағандай мөғәмәлә булыр.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА әҙерләнe.**

*✓ Иремдең туғандары - минең дә туғандарым, киләсәктә лә бер-беребеҙҙе ташламай, ҡыуаныстарыбыҙҙы уртаҡлашып, ауыр саҡта ярҙам итешеп, иңгә-иң терәшеп йәшәргә яҙһын.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИР-ЕГЕТ...

## бала кеүек

■ Халыҡ араһында күптән ир-ат ҡартайғансы бала булып ҡала, тигән фекер йәшәй. Мәҫәлән, көслө заттың ҡайһы берҙәре ғаилә ҡорғас та ҡатынын яҡлаусы һәм һаҡлаусы түгел, ә мыжыҡ бала булып ҡалыуҙы хуп күрә, ҡайһылары ҡорал, машина кеүек "ир-егет уйынсыҡтары"н йыя. Испания тикшеренеүселәре көслө затта тағы ла бер бала сифаты тапҡан. Билдәле булыуынса, оло кешеләр тиҙерәк асыуын онота, ә балалар оҙағыраҡ үпкәләп йөрөй. Ғалимдар әйтеүенсә, ир-ат та балалар кеүек, кешене ниндәйҙер ғәйебе өсөн оҙағыраҡ ғәфү итмәй икән. Етмәһә, көслө зат йышыраҡ ғәйепте үҙендә түгел, ә башҡаларҙан күрә.

■ Тормошта булған хәлдәрҙе тик насар яҡтан ғына күргән һәм киләсәктә лә ыңғай ваҡиғалар булырына ышанмаған кешеләрҙе тәбиғәт үҙе шулай итеп яралтҡан, имеш. Америка ғалимдары асыҡлауынса, бындай кешеләрҙең баш мейеһендә невропептид Y (NPY) тип аталған үҙенсәлекле матдә түбән кимәлдә. Мичиган штаты университетының ғилми хеҙмәткәрҙәре тикшеренеү барышында организмға тап ошо матдә молекулаларының етешмәүе һөҙөмтәһендә кеше стресҡа ҡаршы көрәшмәй. NPY кимәле нәҫелдән килеүен иҫәпкә алғанда, билдәле әйтемде "пессимист булып тыуалар" тип үҙгәртеп әйтеү ҙә дөрөҫ буласаҡ, тип яҙа Лондондың "Дейли телеграф" гәзите.

■ Сит ил ғалимдары балдың файҙаһын лаборатор ҡомаҡтарҙа тикшереп ҡарауҙы дауам итә. Һуңғы тикшеренеүҙәрҙә ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлеп, уларҙың бер төркөмөнә - сахароза, икенсеһенә бал ашатҡандар. Сахароза ашаған ҡомаҡтарға ҡарағанда бал диетаһында ултырған ҡомаҡтар әүҙемерәк булған. Улар ҙур киңлектә аҙашмайынса йөрөй алған, юлындағы кәртәләрҙе лә тиҙерәк еңгән. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, балда еңел үҙләштерелә торған углеводтар һәм биологик ҡиммәтле матдәләр күп.

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше унының бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике шәшке йәшел сәй эсеү, 1 әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьҫиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Америка ғалимдары иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа һәм татлы аҙыҡтар ашамаҫҡа кәңәш итә. Татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уянғас та тәм-том менән "һыйланған" организмға ғәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, бигерәк тә юғары калориялы эсемлектәр зарарлы.

ӘЙ, ЯҘМЫШ...

# ҮҘЕҢ ӨСӨН КӨРӘШ,

## ә эскесе ир өсөн түгел

**Һәр беребеҙҙең тиерлек тормошона теге йәки был дәрәжәлә үтеп инеп оялаған эскелек хаҡында ниҙәр генә ишетмәйбеҙ ҙә, ниҙәр генә күрмәйбеҙ һәм кисермәйбеҙ. Хәйер, "эскелек хаҡында" тип әйтеү битарафлыҡ булыр, дөрөҫө "эскелек арҡаһында" күрмәгәнде күрергә мәжбүр ителәбеҙ, тиергә кәрәктер. Көйәбеҙ, хәсрәтләнәбеҙ, утһыуға төшәбеҙ һәм шунан ары китә алмайбыҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, ошо ҡырағай күренеш менән һыйышып йәшәргә тырышып ятҡан көнөбөҙ.**

Эйе, беҙ күптән уға тәбиғәт тарафынан ебәрелгән стихиялы бәләгә ҡараған шикелле ҡарайбыҙ, унын менән тамам килешеп йәшәргә күнеккәнбеҙ. Ә унын тормошобоҙҙо спрут һәрмәүестәреләй ҡармап алған социаль ғына түгел, бәлки, иң беренсе иҡтисади, сәйәси, әхләҡи һәм тағы ла әллә күпме аныҡ идара ителеүсе тамырҙары, йәғни механизмына әллә ни иғтибар бирмәйбеҙ. Дөрөҫ, йәмғәтселек был проблемаға күҙ йомғанға күрә, ил хөкүмәте ниндәйҙер бик алыҫ китмәгән ҡыйыуһыҙ ғына аҙымдар яһап ҡарай ҙа бит, тик бының алкоголизм державаһы һәм эскеселәр өсөн себен безелдәгән ише лә тәьҫире юҡ. Хәйер, монополистар кеҫәһен ҡалынайтмаһа, ил бюджетын тәьмин итеүсе төп тармаҡтарҙың береһе булараҡ файҙаланылмаһа, спиртлы эсемлектәр етештереү һәм һатыу, уны ҡулланыуҙы сикләү буйынса һөҙөмтәлерәк саралар ҙа күрелер ине, бәлки. Бөтә әтнәкәһе лә шунда бит: араҡы етештереү һәм һатыуҙан айырым "эшмәкәрҙәр" һәм дәүләт ҡаҙнаһына ағылған файҙаның ябай кеше, ғаилә - халыҡ өсөн матди һәм рухи хәйерселеккә, бәлә сығанағына, тоҙаҡҡа әүерелеүе. Үҙенә күрә парадокс та, фарс та, фажиғә лә был. Йәғни күп йөҙлө ҡурҡыныс күренеш.

Эскелеккә бирелгән кешегә иң тәүҙә, бәлки, мәсьәләнең бына ошондай торошон ныҡлап төшөндөрөргә, уны байҙар кеҫәһен ҡалынайтыу өсөн сара итеп файҙаланыуҙарын кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән ышандырырға кәрәктер. Саманың сиген үтеп киткән эскесе өсөн, әлбиттә, бының бер файҙаһы ла булмаҫтыр, шәйт, сөнки уларҙа, мәғлүм булыуынса, кешелек дәрәжәһе, сәм, ғорурлыҡ кеүек сифаттар юҡҡа сыҡҡан була бит. Ә шулай ҙа бөгөн эскелеккә ҡаршы һөҙөмтәле генә көрәш саралары бар. Мәҫәлән, ошо көндәрҙә ҡулыма килеп эләккән "Ал-Анон"дың ғаилә төркөмдәре өсөн баҫып сығарылған программаһы иғтибарымды йәлеп итте. Тәүҙә асыҡлап китәйек булмаһа: нимә һуң ул "А-а" һәм "Ал-Анон"?

Был Америка медицина ассоциацияһы тарафынан эскелеккә ҡаршы эшләнгән "Алкогомекс Анонимоус" ("А.А.") тип аталған махсус программа. Ысул Америка ерлегендә ойошторолһа ла, хәҙер ул бик күп илдәрҙә һынау үтә һәм уның күптәргә ярҙамы тейә. Аноним алкоголиктарҙың Өфө ҡалаһы берләшмәһе хәҙер тиҫтә йылдан ашыу эшләп килә. Уҙған йыл ахырында уның ағзалары - төрлө йәштәге төрлө һөнәр эйәләре йыйылышып, берләшмәнең ойошторолоуына 11 йыл тулыуҙы билдәләне. Байтаҡ йылдар айыҡ тормош менән йәшәүсе элекке эскеселәр нисек итеп сәләмәт йәшәү рәүешенә ҡайтыуҙары хаҡында һөйләне. Хәҙер улар үҙ алдына шундай маҡсат ҡуйған: үҙең эскелектән ҡотолған икәнһең - башҡаларға ярҙам ит!

Берләшмә ағзалары бында тәжрибә уртаҡлаша, лекциялар тыңлай, махсус әҙәбиәт менән таныша, сәй табыны ойоштора һәм дискотека үткәрә, тәбиғәткә походҡа сыға. Бөгөнгө көндә Өфөлә өс ана шундай төркөм эшләй: "Феникс", "Өмөт", "Ҡорос ағас" ("Ясень").

Быларҙан тыш, эскеселәрҙең ғаилә ағзалары, дуҫтары өсөн махсус эшләүсе "Ал-Анон" төркөмдәре лә бар. Улар айына бер йәки ике тапҡыр йыйылыш үткәреп, үҙ-ара туғандарса йылы шарттарҙа аралаша, түңәрәк өҫтәл артында һәр береһе сиратлап үҙ хәлен һөйләй, белгестәрҙән кәрәкле психологик ярҙам, кәңәштәр ала. Шундай йыйылыштарҙың береһендә ҡатнашырға тура килгәйне миңә лә. Егермеләп ҡатын-ҡыҙ йыйылды. Ҡатын-ҡыҙ - ҡайҙа ла ҡатын-ҡыҙ инде: бер ай байтаҡ ваҡыт, улар бер-береһен күреүгә ҡыуанышып, сыр-сыу килеп күрешәләр. Шунда уҡ бер нәмә күҙгә ташланды: береһенең дә йөҙөндә хәсрәт, һағыш күрмәҫһең. Бөтәһе лә матурҙар, ипле һәм тәрбиәле күренәләр. Аҙаҡ дөйөм ултырып һөйләшкән саҡта уларҙың ни тиклем аҡыллы фекер йөрөтөүе, керһеҙ, саф күңелле булыуы ла асыҡланды. Дөрөҫ, бында "Ал-Анон" берләшмәһе уставының йоғонтоһо ла һиҙелмәй түгел, һиҙелә: һәр ваҡыт үҙеңде яҡшы һәм яҡты уйҙарға көйләү, башҡалар менән игелекле мөнәсәбәттәрҙә булыу, ғәйбәт һөйләмәү, кеше ҡылыҡтарын тикшереп, уны ғәйепкә алмау һ.б. шундай матур ҡағиҙәләр йоғонтоһо һиҙелә был ҡатындар тәбиғәтендә. Һәр береһе сиратлап һүҙ башлағас, мин шөбһәләнеү ҡатыш ҡыҙыҡһыныу менән күңелһеҙ ғаилә күренештәре, аһ-зар тулы хикәйәләүҙәр көткәйнем, тик быларҙың эҙе лә булманы улар сығышында. Үҙ-үҙҙәрен нисек итеп тынысландырырға, борсолмаҫҡа, нисек итеп эскесе ир йоғонтоһонда, уның бәйһеҙ тәртибе арҡаһында ауырыуға әйләнмәҫкә, күңелдә эскесегә ҡарата оялап өлгөргән асыу һәм нәфрәт утын нисек "һүндерергә" өйрәнергә, яңы аралашыу мөхите, дуҫтар һәм йөрәккә ятышлы шөғөл табырға - бына ошо һәм тағы ла бик күп нәмәләр хаҡында һөйләште "Ал-Анон" ағзалары. Әлбиттә, күҙ йәштәрһеҙ ҙә булманы, тик был әрнеүҙән түгел, ә таҙарыныу йәштәре ине...

**Нәфисә (исемдәр үҙгәртелде):** Ирем менән яратышып ҡауыштыҡ, 23 йыл йәшәйбеҙ, шунын тиҫтәнән ашыу йылы буйы ул эсә. Ҡайҙарға ғына йөрөтөп ҡараманым: наркологтар ҙа, экс-

НИСЕК АҢЛАЙҺЫҢ?




# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТ:

## "Иреңдең туған-тыумасаһына хөрмәт күрһәт"

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА, тележурналист:** Иреңдең туған-тыумасаһына иғтибарлы булыу - иреңдең дә күңелен күреү, уларға хөрмәт күрһәтеү - иреңә лә хөрмәт күрһәтеү ул. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тиелгән халҡыбыҙҙың тағы ла бер мәҡәлендә. Ирендең туғандарына яҡты йөҙ күрһәтмәйенсә тороп, үҙеңдең туғандарға ла яҡшы мөғәмәлә талап итеп булмайҙыр ул. Ғаилә ҡорғандың тәүге мәлендә минең, һинең туғандар, тип айыраһың, ә йәшәй-йәшәй барыһы ла үҙеңдекенә әйләнә. Тормош юлдашың менән бер-береңде хөрмәт итһәң, уның күңелең уйлаһаң, бындай мәсьәлә бөтөнләй тыумаясаҡ, тип уйлайым. Ҡайным менән ҡәйнәм миңә шул тиклем һәйбәт мөнәсәбәттә, мин уларҙың күңелен уйлап булһа ла, арыған, йә ваҡыт булмаған саҡта ла килгән-киткән туғандарға яҡты йөҙ күрһәтергә тырышам. Ирем дә киң күңелле һәм туған йәнле кеше, ул минең һеңлеләремдең еҙнәһе генә түгел, ә серҙәше лә. Минең бик матур, аҡыллы бикәсем, ауыр саҡта гел ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған ҡәйнешем бар, уларҙы кәрәк булған өсөн генә түгел, ә ихлас күңелдән яратам. Ҡәйнәм бик аҡыллы кеше. Туғандарҙың барыһының да тыуған көндәрен иҫтә тотоп бөтмәйһең бит инде, ә ҡәйнәм барыһын да иҫләй, һәр береһен ваҡытында ҡотлап бара. Шул уҡ ваҡытта миңә лә шылтыратып: "Килен, телефондан ҡотлап ебәр, кешегә бер йылы һүҙ етә", - тип иҫемә төшөрөп ала. Иремдең туғандары - минең дә туғандарым, киләсәктә лә бер-беребеҙҙе ташламай, ҡыуаныстарыбыҙҙы уртаҡлашып, ауыр саҡта ярҙам итешеп, иңгә-иң терәшеп йәшәргә яҙһын.

**Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә:** Халыҡ, килен - ҡәйнә тупрағынан, тигән бит. Мине лә, бигерәк тә иремдең туғандары, ҡәйнәмә бик оҡшаталар. Уның һымаҡ аш-һыуға бик-бик оҫта булмаһам да, ашарға төрләндереп бешерергә өйрәнеп барам, сөнки өйҙә өс ир заты.

Иремдең өләсәһе бик егәрле кеше. 80-де уҙып китһә лә, ҡулынан еп-энәләрен төшөргәне юҡ. Үҙемдең нәнәйҙәрем

✓ *Үҙем өсөн яңы донъя астым. Хәҙер мин үҙемдең сәләмәтлегемде ҡайғыртырға, балаларымды тәрбиәләүгә, тышҡы ҡиәфәтемде, өҫ-башымды ҡарарға күберәк ваҡыт бүлә башланым.*

трасенстар ҙа, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларындағы махсус дауалау учреждениелары ла ҡалманы, тик бер файҙаһы ла булманы. Шунда ғына, ниһайәт, аңлай башланым: мин бит үҙ-үҙемде эскелек ҡорбанына әүерелдереп, тамам ауырыуға һабышам. Ғүмерем хәүеф аҫтына ҡалған ерҙән табиптар, туғандарым һәм дуҫтарым үлемдән тартып алып ҡалды. Бер танышымдан "Ал-Анон" хаҡында ишеттем дә, шунда уҡ килеп тә еттем. Өс йыл инде хәҙер яңы дуҫтар табып, яңы мөхиткә баштан аяҡ сумыуыма. Холҡом яҡшы яҡҡа үҙгәрә бара: ярһымайым, иҫерек ирҙең теләһә ниндәй нахаҡ бәләләре, бәйләнеүҙәренә асыу һаҡламайым. Ниндәйҙер ҡоршауҙан, ҡапҡандан ҡотолған төҫлө еңеллек, күңел һиллеге тоям. Иң мөһиме - хәҙер мине аңлап, аяп торған дуҫтарым бар.

**Татьяна:** "Ал-Анон"да дуҫтарым, серҙәштәрем менән осрашыу көнөн сәғәтләп һанайым. Бында йөрөй башлауыма ни бары йыл ярымдан ашыу ваҡыт үтте, ләкин мин әле үк әйтә алам: үҙем өсөн яңы донъя астым. Хәҙер мин үҙемдең сәләмәтлегемде ҡайғыртырға, балаларымды тәрбиәләүгә, тышҡы ҡиәфәтемде, өҫ-башымды ҡарарға күберәк ваҡыт бүлә башланым. Эштәге әхирәттәрем миндәге үҙгәрештәрҙе бик тиҙ күреп тә ҡалды һәм, әллә ирең эсеүҙән туҡтанымы, тип ҡыҙыҡһыналар. Ҡайҙа инде ул! Эсеүен дауам итә, ә шулай ҙа ун көнгә 1-2 көн булһа ла эсмәй башланы. Мин быны үҙемдәге үҙгәрештәр менән бәйләмәйем, әлбиттә. Күп эсһә, ныҡ ауырый: йә бауыры, йә бөйөрө сәнсеүгә зарлана, йә быуындары һыҙлай, йә башы әйләнә - белмәҫһең, ауырыуы әллә йәлләтеүеме... Ә миңә барыбер хәҙер, үҙе теләгән - йылан ите ашаған, тигәндәй. Элекке кеүек уның саҡырыуынан ҡойолоп төшөп, сәбәләнеп һыу килтереп эсерергә, үлән төнәтергә йә булмаһа баш төҙәтеүенә эшкәлек артынан магазинға сығып йүгермәйем. Быны мин бәләкәй генә булһа ла еңеүем тип иҫәпләйем. Улым менән ҡыҙым да ҙурайып киләләр, шөкөр, яҡлаусыларым бар, минең өсөн тауҙай торалар, һау-сәләмәт булһындар. Бергәләшһәк, бер алкаштың диктатына ғына бирешмәбеҙ әле, тимен, фәҡәт һаулыҡты һаҡлап ҡалырға тырышам.

**Зөлфиә:** Йомшаҡһың бигерәк, тәүәккәл түгелһең, күптән күтәрә һуғып айырылышырға ла тыныс башың ғына йәшәргә кәрәк тә бит, ти туғандарым да, дуҫтарым да. Улар миңә күптән ҡул һелтәгән, сөнки мине тормошомдо ҡырҡа үҙгәртерлек ниндәйҙер аҙым яһарға көсө лә, теләге лә юҡ, тип уйлайҙар.

Ә бит уйлап ҡараһаң, эскесе ир менән йәшәү өсөн дә көслө булырға кәрәк. Ярай, айырылдым да, ти. Ғүмер буйы туплаған әҙме-күпме донъя малын да бүлдек, ти. Эш ундамы ни һуң? Ул кемгә әйләнәсәк аҙаҡ? Эйе, бәлки, бындай шоктан айнып, эсеүен ташлауы ла бар йәки, киреһенсә, асыуынан, депрессиянан тағы ла нығыраҡ эске һаҙлығына батасаҡ. Хәҙер бит яуыз уйлы әҙәмдәр күп, эсереп, эс-бауырына инеп, фатирын да үҙләштерерҙәр, үҙен дә ҡыуып сығарырҙар. Асарбаҡ булып урамда йөрөһөнмө шунан? Йә миңә килеп йығылыр - ҡотолоп булмаясаҡ унан. Балаларымдың атаһы бит һуң ул ниндәй генә булһа ла... Күрәләтә шундай хәлгә төшөүенә булышлыҡ иткем, ир рәнйеше алғым килмәй. Өйҙә барыбер тамағы ла туҡ, өҫ-башы ла ҡараулы, тәрбиәле. Ныҡлап ҡына сирләй башлаһа, ташлар, бәлки. Беҙгә теймәһә, ашыма таш бәрмәһә, ҡалғанын үҙе ҡараһын. Мин балаларыма кәрәк. Мин эшләргә, уларҙы аяҡҡа баҫтырырға тейешмен, шуға ла хәҙер үҙемде ҡайғыртам. "Ал-Анон"да эскесе менән һыйышып йәшәргә, үҙемде психологик йәһәттән ыңғайға көйләргә өйрәнәм.

"Ал-Анон" төркөм ағзалары булып торған был ҡатындарҙың һөйләгәндәренән күренеүенсә, улар эскегә бирелгән ирҙе айыҡ юлға баҫтырыу маҡсатынан төңөлгән, иҫерек менән туҡтауһыҙ көрәшеүҙән туҡтаған. Бөтәһе лә "Ал-Анон"са, уның уставында ла бит "Эскесе үҙе контроллек итә алмаған сир менән ауырый" тигән факт менән килешергә, эсмәүен талап итеп, уға гел генә бәйләнеүҙән, тауыш ҡуптарыуҙан, әрләшеүҙән, бәхәсләшеүҙән һәм "Алла һаҡлаһын, уны ғәйепләүҙән тыйылырға" ҡушыла, сөнки, тиелә унда, былар ярҙам итмәйәсәк, киреһенсә, был сираттағы талаш-тауышҡа ғына әйләнәсәк.

"Ал-Анон" көн дә ошо ябай ғына булып тойолған саҡырыуҙарға эйәрергә ҡуша:

- Беренсе урынға үҙегеҙ өсөн иң мөһим булған мәсьәләне ҡуйығыҙ.
- Йәшәгеҙ һәм башҡаларға ла йәшәргә ирек бирегеҙ.
- Әкрен, ләкин дөрөҫ юлдан барығыҙ.
- Үҙегеҙҙе Аллаһы Тәғәлә ҡулына тапшырығыҙ.
- Бөгөнгө көн менән йәшәгеҙ.
- Бөтә нәмәгә лә ғәҙәти итеп ҡарағыҙ.
- Уйланығыҙ.
- Тыңлағыҙ. Күҙәтеүҙәрегеҙҙән өйрәнегеҙ.
- Үҙегеҙҙә кеше хәлен аңлау һәләтен үҫтерегеҙ.

Күренеүенсә, бында эскесе һәм уның яман ҡылыҡтары, уға ҡаршы көрәш саралары хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Тимәк, ул кәрәкмәй ҙә. Ғаиләләге эскесе ир (йә ҡатын) сәләмәт организмға йәбешеп үҫкән паразит шеш кеүек, мәле еткәс, ул үҙенән-үҙе сереп, организмдан айырылып төшәсәк. Шуға күрә яман шеш бөтә организмға таралып, уны ағыуламаһын өсөн организмды сыныҡтырырға, иммунитетын нығытырға һәм мөмкин тиклем уны сирҙән аралау сараларын күрергә кәрәк. Йәғни сирләү ихтималы менән ул әле сиргә әүерелмәҫ борон уҡ көрәшә башлау хәйерле.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алкоголиктарҙы үҙ проблемалары менән япа-яңғыҙ ҡалдырыу кешелекһеҙлек тип уйлаусылар ҙа булыр был яҙмаларҙы уҡығас. Ә ғүмер буйы балаларын, ҡатындарын, башҡа яҡындарын йәберләп, зар илатып йәшәү кешелеклелекме ни улайһа? Эскесе фәҡәт үҙен генә уйлай икән, ниңә әле башҡалар ҙа шуны уҡ эшләргә тейеш түгел? Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ сабыр, түҙемле, әлбиттә, һүҙ ҙә юҡ, ләкин ғүмер бит бер генә. Иҫерек ир менән ғүмер буйы ыҙа сигеп йәшәү дөрөҫ түгел ул барыбер. Әллә башҡа төрлө уйлаусылар ҙа бармы? Булһа, әйҙәгеҙ, фекер алышайыҡ.**

ожмах эйәһенә әүерелгәс, әбейҙәр янында үҫкәс, Мөслимә өләсәй миңә тағы ла яҡыныраҡ.

Туғандарҙы һайлап алмайҙар, әммә иҫән саҡта барыһының ҡәҙерен белергә кәрәк. Иң мөһиме - үҙ-ара ихтирам булһын. Һәр кемдең үҙ холҡо, үҙ яҙмышы. Бәндәләрҙе ғәфү итә лә белергә кәрәк, уларҙы Хоҙай шулай бар иткән, ә уның эшенә беҙ ҡыҫыла алмайбыҙ. Кешеләрҙең беҙгә ниндәй мөнәсәбәттә булыуында, бигерәк тә туғандарҙыҡында, беҙ үҙебеҙ сәбәпсе. Маҡтанайым әле, мине иремдең туғандары - Мөслимә өләсәй, Әминә инәй, Нурия апай, бабайҙарыбыҙ, еҙнәләребеҙ бик тә үҙ итә. Ә инде улар беҙгә килеп инһәләр, мин йүгереп йөрөп сәйемде ҡуям, хәл-әхүәлдәрен һорашам. Ҡунаҡҡа саҡырһалар, барабыҙ. Элеккесә йолаларҙы тотоу булмаһа ла, туғандар менән аралашып йәшәү - изге эш. Хоҙай һине һәм уларҙы туғанлыҡ ептәре менән бәйләгән икән, Аллаһтың эше менән риза булмау дөрөҫ түгел. Йәшәй-йәшәй килә ул туғандарҙы аңлау. Сөнки үҙем дә ике ул үҫтерәм, киләсәктә үҙем дә ҡәйнә буласаҡ кеше. Уларҙың миңә мөнәсәбәте нисек булыр - шул турала уйлаһаң, иреңдең туғандарына үҙеңә ниндәй ҡараш теләйһең, шундай мөнәсәбәттә булаһың. Был донъяла бит һәр нәмә бумеранг кеүек кире әйләнеп ҡайта.

**Илдар БИКҠУЖИН, эшҡыуар:** Егет менән ҡыҙ өйләнешкәндән һуң туғандарға ике тапҡыр байый төшә, сөнки егет - ҡыҙҙың, ә ҡыҙ - егеттең туғандарын ҡан ҡәрҙәшеләй ҡабул итергә тейеш. Туғандарҙың татыулығы бар байлыҡтан артыҡ, тигән беҙҙең халыҡ. Килен кешенән күп нәмә тора: ул иренең туғандарын хөрмәт итергә, яҡты сырай, асыҡ йөҙ күрһәтергә, үҙен ятҡан кеүек яратырға бурыслы. Олоно - оло, кесене кесе итә белергә, йәғни ҡайны менән ҡәйнә, ҡайнаға менән ҡайынбикә, ҡәйнеш менән бикәс тигәндә кәләш кеше һәр кеме менән үҙен нисек тотоуҙы, улар алдында ни бурысы, ни хаҡы барлығын белергә тейеш. Иренең туған-тыумасаһына хөрмәт күрһәткән ҡатын үҙе лә хөрмәт күрер, урыны гел түрҙән булыр. Аҡыллы, зирәк ҡатындар күп осраҡта үҙенең туғандарына ҡарағанда иренең туғандарына күберәк иғтибар бүлә. Мин дә улар бик дөрөҫ эшләй тип уйлайым. Сөнки үҙ туғандарың һине барыбер ташламай, үҙ туғаны итеп ҡабул итә, ә иренең туғандарына яраҡлашырға, эйәләшергә, өйрәнергә тура килә. Әгәр ҡатын-ҡыҙ иренең туған-тыумасаһына хөрмәт күрһәтә, уларҙы ярата икән, тимәк, ул иренә лә шундай уҡ мөнәсәбәттә.

**Вәлит ҒӘЙНЕТДИНОВ, журналист:** Ҡайны-ҡәйнәнде һанламаһаң, ҡайнаға-еңгәләреңә, олораҡ килендәштәреңә ҡаты булһаң, үҙеңде уларҙан өҫтөнөрәк ҡуйһаң, аҡыллыраҡ күренергә тырышһаң, уларҙың етешһеҙлектәрен ҡабул итә һәм ғәфү итә белмәһәң, уларҙы нисек бар - шулай ҡабул итмәһәң, улар алдында иреңде хөрмәтләмәһәң, уны һөйләп, яман яҡтарын ғына күреп, ҡырыҫ бәрелеп ултырһаң - ҡатын-ҡыҙҙың донъялағы иң ҙур ахмаҡлығы ошолор, моғайын. Шуға ла ул әле генә һанап үткәндәрҙең киреһен эшләһә, әлбиттә, үҙенә ихтирам яулаясаҡ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Шәхси етешһеҙлекте көслө яҡтар менән алмаштырыу

Килемегеҙгә, оҙаҡ йәшәүегеҙгә, тормошҡа ҡыуаныуығыҙға ҡурҡыуҙарығыҙ һәм фобияларығыҙ йоғонто яһаған кеүек, уларға ҡайһы бер шәхси етешһеҙлектәрегеҙ һәм көсһөҙлөгөгөҙ ҙә йоғонто яһай. Улар ҡасандыр ҡуйылған установкалар һәм программалашыу һөҙөмтәһендә тыуа. Ниндәй шәхси үҙенсәлектәр тураһында һүҙ бара һуң? Мәҫәлән, бына беҙ үҙгәртергә теләгән бер нисә көсһөҙ һәм көслө яҡтарыбыҙ.

**Көсһөҙ яҡтарыбыҙ:**

**Эмоционаллек** - кеше ҡысҡырырға, асыуын сығарырға мөмкин.

**Ҡатып ҡалғанлыҡ**- ғәҙәти, өйрәнелгән эш тәртибе үҙгәрһә, көйһөҙләнә; үҙенең эшенә ҡыҫылмауҙарын өҫтөн күрә.

**Үҙ-үҙен яратыу** - уңышһыҙлыҡта башҡаларҙы ғәйепләп, барлыҡ маҡтауҙарҙы үҙенә алырға тырыша; күп маҡтана.

**Сәйерлек** - кеше кейемендә, ҡыҙыҡһыныуҙарында, үҙ-үҙен тотошонда ғәҙәти булмаған ғәҙәтте өҫтөн күрә.

**Намыҫһыҙлыҡ** - кеше илтифатһыҙ, алдаҡсы, башҡаларға ихтирамһыҙ. Ҡатылыҡ - нәмәне кәрәкле тип уйлай, шуны эшләй.

**Мизантроп** - башҡаларҙың уңышына көнләшә.

**Ауырлыҡтарҙан ҡурҡыу** - бер урында ултыра алмай, өҙөп-йыртып эшләй, бөхтә түгел, тиҙ генә өмөтһөҙлөккә бирелә.

**Ййлылыҡ** - дәртһеҙ, эште һүҙа, уға маҡсатҡа ынтылыш етмәй.

**Пессимизм** - кеше уңышһыҙлыҡҡа ышана, баҫылған.

**Көслө яҡтарыбыҙ:**

**Ғәҙел ҡараш** - кеше һәр саҡ тыныс һәм баҫалҡы.

**Яраҡлашыу** - кеше яңы шарттарға яраҡлашырға һәләтле.

**Баҫалҡылыҡ** - унда-бында тығылып бармай; кешегә күрһәтмәй генә үҙен юғары баһалай.

**Ҡанундарҙы тыңлау** - кеше ҡабул ителгән стандарттарҙы тота; оригиналь була ала, әммә саманан арттырмай.

**Иғтибарлылыҡ** - кәрәк булғанды эшләй, кәрәкмәгәнен эшләмәй.

**Һиҙгерлек** - башҡаларға ҡарата иғтибарлы, шәфҡәтле.

**Кешелеклелек** - кешеләрҙе ярата, уларҙы ғәфү итә белә.

**Ныҡышмалылыҡ** - көслө ихтыярлы, башлаған эшен аҙағына еткерә.

**Йүнселлек** - кеше тәүәккәл, инициативалы, ҡанатланған.

**Оптимизм** - кеше уңышҡа ышана, ыңғай фекер йөрөтә.

Һеҙҙең кеүек кешегә ниндәй һыҙаттар хас булырға тейеш түгел? Уларҙы ҡапма-ҡаршы һыҙаттар менән бергә күсереп алығыҙ, үҙегеҙҙә булған һыҙаттарҙы ла өҫтәгеҙ. Артабанғы программалаштырыу өсөн түбәндәге инструкцияны бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ:

-Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.

-Үҙегеҙҙе кафела тип хис итегеҙ. Ҡулығыҙҙа батмус һәм һеҙ ризыҡ һайларға әҙерһегеҙ.

-Һәр блюдо исемлектәге көслө яҡтарығыҙға тап килә. Кәрәклеһен һайлап алығыҙ (күҙҙәрегеҙҙе асып исемлек менән сағыштырһағыҙ ҙа мөмкин).

-Ризыҡты ләззәтләнеп ашағанығыҙҙы күҙ алдына килтерегеҙ.

-Уйығыҙҙа ғына: "Был көслө яҡтар хәҙер минеке. Хәҙер тормошомдағы ижади миссияны яҡшыраҡ үтәй алам. Һәм был шулай", - тип, был картинаны юйығыҙ.

-"Мин тулыһынса үҙ аңымда", - тип күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Әле генә программаланған көслө яҡтарығыҙ ярҙамында тормоштоң теге йәки был хәл-торошонан сығыуығыҙҙы хыялығыҙҙы күрегеҙ.

**Роберт Стоун.**



## 7 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
05.30 "Теща"
07.10 "Ну, погоди!"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Весна на Заречной улице". Мелодрама
12.10 "Любовь глазами женщин"
13.10 "Женщины". Мелодрама
15.00 "Гараж". Трагикомедия
17.00 "Минута славы"
19.00 "Любовь и голуби". Комедия
21.00 "Время"
21.15 "Большая разница"
22.20 "Про любовv". Мелодрама
00.20 "Случайный муж". Комедия
02.00 "Мой мальчик"
04.00 "Искушение"

### РОССИЯ 1
05.45 "Северное сияние"
07.40 "Разные судьбы"
09.45 "Укротительница тигров". Лирическая комедия
11.45 "Анжелика"
14.00 "Вести"
14.20 "Анжелика". Продолжение
15.55 "Парад звезд"
17.55 "Найденыш". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.15 "Найденыш-2". Мелодрама
00.05 "Детям до 16..." Драма
02.45 "Двенадцать стульев". Комедия
НТВ
04.40 "Автобус"
06.40 "Бременские музыканты", "По следам бременских музыкантов"
07.25 "Смотр"
08.00, 13.00 "Сегодня"
08.25 "Живут же люди!"
09.00 "Кулинарный поединок"
10.00 "Сегодня"
10.25 "Главная дорога"
11.00 "Квартирный вопрос"
12.05 "Своя игра"
13.25 "Мамочка, я киллера люблю", 1-6 серии. Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Мент в законе". Сериал
23.20 "Музыкальный ринг НТВ"
02.00" Дачный ответ"
03.00 "Пурпурный дождь". Музыкальный фильм

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 М. Карим. "Похищение девушки". Спектакль**
**08.45 "Автограф"**
**09.15 "Любимым посвящается…"**
**10.00 "Робин Гуд"**
**11.30 "Тамыр представляет"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Истории"**
**13.30 "Надо знать!"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**16.15 "Полезные новости"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Весело живем"**
**17.15 "Третий звонок". А. Атнабаев. "Близнецы". Спектакль Салаватского башкирского государственного драматического театра**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Третий звонок" (продолжение)**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 Художественный фильм**
**00.15 "Свидание с джазом"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 8 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Ну, погоди!"
06.40 "Одинокая женщина желает познакомиться"
08.20 "Будьте моим мужем"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Пока все дома"
11.00 "Я боюсь, что меня разлюбят. Андрей Миронов". Док. фильм
12.00 Новости
12.10 "Три плюс два". Комедия
14.00 "Любовь и голуби". Комедия
16.00 "Белая птица". Концерт Елены Ваенги
18.00 "Бриллиантовая рука". Комедия
20.00 Праздничный концерт "Восемь"
21.00 "Время"
21.15 Праздничный концерт "Восемь". Продолжение
22.30 "Сегодня в театре сатиры". "Здравствуйте! Это Я! Андрюше - 70!"
00.20 "Психоаналитик"
02.15 "Затура"
04.10 "Грязные мокрые деньги"

### РОССИЯ 1
04.55 "8 Марта"
06.45 "Суета сует"
08.30 "Самая обаятельная и привлекательная". Лирическая комедия
10.10 "Полосатый рейс". Комедия
12.00 "Анжелика". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Анжелика". Сериал. Продолжение
16.00 "Вести"
16.15 "Все звезды для любимой". Праздничный концерт
18.05 "Служебный роман". Лирическая комедия
21.15 "Добрый вечер с Максимом"
22.45 "Праздничное шоу Валентина Юдашкина"
01.00 "Блеф". Комедия
03.05 "Двенадцать стульев". Комедия

### НТВ
05.10 "Сказка о Золотом Петушке", "Сказка о мертвой царевне и семи богатырях". Мультфильмы
06.10 "Про любовь". Мелодрама
08.00 "Сегодня"
08.20 "Удачный обмен". Мелодрама
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Женский взгляд"
11.00 "8 марта с Ириной Аллегровой"
13.25 "Мамочка, я киллера люблю...", 6-12-я, закл. серии
19.00 "Сегодня"
19.25 "Мент в законе". "Охота на авторитета"
23.10 "Мисс Россия-2011"
01.10 "Квартирный вопрос"
02.10 Футбол. Лига чемпионов УЕФА. "Барселона" (Испания) - "Арсенал" (Англия)
04.20 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"

### БСТ
**07.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Посланники любви"**
**08.45 "Млечный путь"**
**09.45 "Весело живем"**
**10.00 "Тамыр представляет…"**
**12.00 "Судьбы радужные нити"**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 М. Файзи. "Асыльяр". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**18.15 "Весело живем"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Мелодия моей души". Концерт**
**21.00 "Теплый дом"**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Млечный путь"**
**22.45 "Деньги к деньгам"**
**23.15 Художественный фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 9 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Любовь без правил", 1-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "КВН. 50 виртуальных игр"
00.50 "А вот и Полли"
02.30, 03.05 "Двойник"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05, 04.00 "Бегство от смерти. Маргарита Володина"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 8-я серия
17.55 "Все к лучшему", 35-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 106-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Откройте, это я", 1-я, 2-я серии
22.50 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий"
23.50 "Вести+"
00.10 "Мстители"
01.45 "Честный детектив"
02.20 "Двенадцать стульев"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Гончие". "На грани безумия", 1-я и 2-я часть. Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Погоня за тенью". Сериал
00.35 "Главная дорога"
01.10 "Детектив Раш"
02.10 "Суд присяжных"
03.10 "До суда"
04.05 "Ты не поверишь!"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Специальный репортаж"**
**10.00 "На самом деле"**
**10.30 "Полезные новости"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Шэп арба"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Башкирское ТВ представляет…"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 Художественный фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 10 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Любовь без правил", 2-я серия
22.30 "Владимир Гостюхин. Территория моей любви"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня", 13-я серия
00.40 "Лезвия славы"
02.30, 03.05 "Бермудский треугольник"
03.00 Новости
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Маршрут милосердия"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 9-я серия
17.55 "Все к лучшему", 36-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 107-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Откройте, это я", 3-я и 4-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.10 "Возвращение супермена". Приключения
03.15 "DEADLIME"
04.20 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Гончие". "На грани безумия", 3-я и 4-я части
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.40 "Погоня за тенью". Сериал
22.50 "Бес". Триллер
00.50 Футбол. Лига Европы УЕФА. "Твенте" (Голландия) - "Зенит" (Россия). Прямая трансляция
03.00 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.30 "Кулинарный поединок"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Специальный репортаж"**
**10.00 "На самом деле"**
**10.30 "Полезные новости"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Экиэт китабы"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Башкирское ТВ представляет…"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русс. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Специальный репортаж"**
**23.15 Художественный фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 11 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Женский журнал"
15.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
16.00 "В поисках сверхчеловека"
16.40 "Федеральный судья"
17.40 Вечерние новости
18.00 Чемпионат мира по биатлону. Эстафета. Мужчины. Прямой эфир
19.30 "Криминальные хроники"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.40 Закрытый показ "Миннесота". Драма
02.40 "Приключения Барона Мюнхгаузена". Приключения
05.00 "Хочу знать"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "С новым домом!"
12.50 "Маршрут милосердия". Сериал
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 10-я серия
17.55 "Все к лучшему", 37-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 108-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала". Фестиваль юмористических программ
22.15 "Песни кино". Творческий вечер композитора Александра Зацепина
00.45 "Без изъяна". Криминальная драма
03.00 "Горячая десятка"
04.10 "Городок"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Таксистка"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Следствие вели"
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Суперстар" представляет: "Надежда на любовь"
22.45 "НТВшники"
23.50 "Женский взгляд". "Игорь Николаев"
00.40 "Вам письмо". Романтическая комедия
03.05 "Суд присяжных"
04.10 "До суда"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Специальный репортаж"**
**10.00 "На самом деле"**
**10.30 "Полезные новости"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр", "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Весы"**
**14.00 "Широка река"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Цирк"**
**15.30 "Миллион лет до нашей эры"**
**16.00 "Башкирское ТВ представляет…"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.15 "Специальный репортаж"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Йома"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.15 Художественный фильм**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 5 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Внимание, цунами"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.50 "Великий пост". Док. фильм
12.00 Новости
12.20 "Среда обитания"
13.20 "Георгий Юматов. Трагедия офицера". Док. фильм
14.20 "Россия от края до края. Урал"
15.20 "Кто хочет стать миллионером?"
16.30 Чемпионат мира по биатлону. Масс-старт. Женщины
17.15 Новости
17.30 "Желание"
19.30 "Фабрика звезд. Возвращение"
21.00 "Время"
21.15 "Фабрика звезд. Возвращение". Продолжение
22.00 "Прожекторперисхилтон"
22.40 "Детектор лжи"
23.40 "Быть Джоном Малковичем". Комедия
01.50 "Век невинности"
04.25 "Грязные мокрые деньги"
05.15 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00 "Личной безопасности не гарантирую"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок"
10.05 "Дела и люди"
10.30 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Была любовь"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Была любовь". Продолжение
16.10 "Субботний вечер"
18.10 "Шоу "Десять миллионов"
19.10 "Дублерша". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Дублерша". Продолжение
23.40 "Девчата"
00.10 "Красный лотос". Криминальная драма
02.00 "Неизвестного происхождения"
03.55 "Молодой Эйнштейн"

### НТВ
05.05 "Автобус"
07.05 "Капризная принцесса". Мультфильм
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Живут же люди!"
09.20 "Внимание розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Сеанс с Кашпировским. Экстрасенсы"
14.10 "Таинственная Россия"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Последнее слово"
17.30 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Мумия: гробница императора драконов". Приключения
00.55 "Вне поля зрения". Триллер
03.25 "До суда"
04.25 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**07.15 А. Хусаинов. "Бандабика и Ерэнсе сэсэн". Спектакль**
**09.00 "Весело живем"**
**09.15 "Млечный путь"**
**09.45 "Специальный репортаж"**
**10.00 "Артур и минипуты"**
**11.30 "Тамыр представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Надо знать!"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Теплый дом"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Истории"**
**17.30 "Третий звонок". Н. Гаитбай. "День всех влюбленных". Спектакль Уфимского татарского государственного театра "Нур"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Третий звонок" (продолжение)**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Йома"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 Художественный фильм**
**00.15 "Свидание с джазом"**
**01.00 "Прогноз погоды"**

## 13 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Пароль знали двое"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.15 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.10 "Ян Арлазоров. Народный мужик России"
13.20 "Попытка Веры". Мелодрама
17.20 "Кардиограмма любви". Мелодрама
19.00 "Жестокие игры"
21.00 "Время"
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Yesterday Iive"
23.20 "Познер"
00.30 "Слезы солнца". Боевик
02.40 "Проделки норбита"

### РОССИЯ 1
05.45 "Делай ноги"
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.00 "Сам себе режиссер"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Была любовь". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Была любовь". Сериал. Продолжение
15.10 "Смеяться разрешается"
17.05 "Танцы со Звездами". Сезон-2011"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Любовь и немного перца". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного". Концерт
00.30 "Новый парень моей мамы". Комедия
02.30 "Победить или умереть". Фантастика

### НТВ
05.20 "Автобус"
07.20 Мультфильмы
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.50 "Пир на весь мир"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Семин". Детективный сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Развод по-русски"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Глухарь". Криминальный сериал
00.50 "Авиаторы"
01.25 "Живут же люди"
02.00 "Мороз по коже". Триллер
03.45 "Наказание. Русская тюрьма вчера и сегодня"

### БСТ
**07.00 Новости (на русск. яз.)**
**07.15 К. Тинчурин. "Голубая шаль". Спектакль Татарского государственного академического театра им. Г. Камала**
**10.00 "Тамыр представляет…"**
**11.45 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Весы"**
**13.30 "Надо знать!"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Истории"**
**17.30 А. Шагиев. "Шаг к себе"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Пора разобраться" (на башк. яз.)**
**19.45 "Полезные новости"**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Забытые войны"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "Специальный репортаж"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.15 "Вечер.com"**
**23.00 Художественный фильм**
**00.15 "Музыка на канале"**
**01.00 Прогноз погоды**

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА

# ӨС ДОНЪЯНЫҢ БЕРЛЕГЕ



## Йыл йыланы

*"Йылан , боланды йоҭҡас,*
*Шундуҡ бер егет булған."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Үтеп китте тағы бер йыл.
Үтеп китте йыландай.
Йыл йыланы һәр саҡ юлда,
Сейәләнмәй, уралмай.

Сәйнәп йотто ул боланды,
Сәйнәп йотто айҙарҙы,
Һәр бер көнөн һәр бер айҙың
Ҡорһағына ауҙарҙы.

Йоттормай ҙа, ҡоҫтормай ҙа
Тамағында кипсәлгән
Болан мөгөҙөн дә йотто -
Йылан түгел иҫәрҙән.

Йотмаһа, ваҡыт туҡтарын
Белә йылдың йыланы.
Бына уның тамағында
Һуңғы минут туланы!

Һуңғы секундҡаса йотто -
Йылан йылды ашаны:
Шундуҡ йәш егет булды ла
Яңы сәфәр башланы.

Йәш йыл сәйәхәт башланы!
Тағы бына күнелгә
Болан булып саҡырыусы
Йылан тауышы килә...

## Ахрызаман

*"Ярым бушҡа туҙа, тиеп*
*Һис бер йылға аҡмаһа..."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Ярым бушҡа туҙа, тиеп
Һис бер йылға аҡмаһа,
Емереләм, ыуалам, тип
Ҡая күккә ашмаһа,

Иреп, ағып бөтөрмөн, тип
Башына ҡар ятмаһа,
Яуынламаһа болоттар,
Йәшендәре атмаһа,

Дауыллауҙан ҡурҡам, тиеп
Елдәр әгәр иҫмәһә,
Кибәм,быуға әйләнәм, тип
Ергә ысыҡ төшмәһә,

Ҡыуарам, тип, ҡоройом, тип
Үсемлектәр үҫмәһә,
Диңгеҙ йотор мине, тиеп
Тауҙан шишмә тиртмәһә,

Барыбер ҙә байырға, тип
Көндөҙ ҡояш сыҡмаһа,
Барыбер ҙә һүнергә, тип
Ай-йондоҙҙар баҡмаһа,

Түлләнмәһә шыуышҡандар,
Аяғында йөргәндәр,
Бар осҡандар, бар йөҙгәндәр -
Ҡан йә үлән ейгәндәр -

Ваҡыт етер шул сағында
Был донъяға бөтмәгә!

Барыбер ҙә туктайым, тип
Йөрәгебеҙ типмәһә,
Барыбер ҙә үлергә, тип
Бер кеше лә тыумаһа,
Илгә ҡаза килгәнендә
Бер батыр ҙа булмаһа,
Нимә булыр донъяға?

## Юл саты

*"Йылан илен үткән ир,*
*Унддан һулға сыҡҡан ир."*
**"Урал батыр" ҡобайырынан**

Юл сатына ҡуйған кешене Хоҙай:
Теләгәнең һайлап ал, тигән.
Үҙ хөкөмкәйҙәрен үҙ ҡулында,
Ни ҡылһаң да хаҡың бар, тигән.

Ирек биргән ул бит бәндәһенә,
Юл һайларға ихтыяр ҡуйған.
Мөмкин ҡылған уға хаҡһыҙлыҡты,
Хаҡ юлды ла ихтимал ҡылған.

Үҙендә ни, шуны биргән уға.
Азатлыҡты биргән кешегә.
Бирмәгән ул уны фәрештәгә,
Кертмәгән иблис өлөшөнә.

Һайлай кеше унды, һайлай һулды -
Ни ҡылһа ла ирке бар уның.
Күркһеҙлеге уның яманда тик!
Яҡшыла тик күрке бар уның.

Утта янмай, һыуҙа батмай яҡшы.
Ундан һулға мөмкин сығырға.
Уйланырға урын бар кешегә,
Юл сатында торған сағында.

## Яуап

*"Кин диңгеҙҙең өҫтөндә*
*Тау барлыҡҡа килгән, ти."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Торатау әле тормаған,
Ятып торған сағында,
Түбәләр төп булған мәлдә
Өҫтөң кире яғында,

Туфан сығып, диңгеҙҙәрҙең
Аҫты өҫкә килгәндә,
Ерҙәр һыуға күмелгәндә,
Өҫтәр аҫка иңгәндә,

Һыуҙан тауҙар күренгәндә,
Төптәр түбә булғанда,
Уралтауҙар күккә ашып,
Торатауҙар торғанда,

Урал батыр ҡайығында
Кешелек ҡотолғанда,
Тереклек тере ҡалғанда,
Йәшәргә ынтылғанда,

Башланған яңы донъябыҙ
Бергә иҫкеһе менән:
Иҫке тереклеге менән,
Иҫке кешеһе менән.

Иҫке һыуҙары диңгеҙҙең
Яңы ярға ташланған.
Иҫке терек нигеҙендә
Яңы тормош башланған.

Өр-яңынан туфан сығып,
Утлы дауыл иҫкәндә,
Аҫтар өҫкә ҡалҡҡанында,
Өҫтәр аҫка киткәндә,

Иҫән ҡала алыр микән
Ҡабаттан был иҫкелек?
Еребеҙ бит мәңгелек тә,
Мәңгелекме кешелек?

Иҫке, үлемһеҙ донъябыҙ
Яуызлыҡ менән тулһа,
Һәләкәттән ҡалмаҫ әҙәм,
Яңы тереклек тыуһа!

## Өс донъяның берлеге

Башланғанбыҙ Уралдан беҙ -
Өс улдың атаһынан:
Яйыҡ, Нөгөш, Ағиҙелдең
Булабыҙ сатағынан.

Башланғанбыҙ Уралдан беҙ -
Өс батша кейәүенән:
Ҡатил, Әзрәкә, Самрауҙың
Өс бөйөк төйәгенән.

Башланғанбыҙ Уралдан беҙ -
Иренән өс ҡатындың:
Гөлөстандан, Һомайғоштан
Һәм ҡыҙынан Ҡатилдың.

Тыуҙырған беҙҙе донъяға
Өс әсә, килен, кәләш.
Өс батшалыҡ һылыуҙары
Уралға йәнкәй-йәнәш.

Башланғанбыҙ Уралдан беҙ.
Тоҡомобоҙ йыраҡтан:
Ерҙең аҫты, өҫтө, күктән -
Хасилбыҙ өс тарафтан.

Өс батшалыҡ балаһы беҙ,
Өс донъяның берлеге!
Хәтер шулай һөйләп тора
Кешелектең кемлеген..

## Үлемһеҙлек

*"Ҡулындағы һуйылға*
*Күҙ йүгертеп ҡарасы."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Был һуйыл да ҡасандыр бер
Ергә тамыр йәйгәндер.
Имсәк имгән сабый төҫлө,
Ерҙең һөтөн имгәндер.

Башта орлоҡ булғандыр ул.
Шунан ағас булғандыр:
Япраҡтарын сәпәкәйләп,
Елгә шаулап торғандыр.

Ботаҡтарын ботағастың,
Әйләнгән ул һуйылға.
Утка һалһаң, ҡалыр ине
Көлгә йәки торонға.

Ерҙә ятып серегә ул,
Ҡалыр ине туҙанға.
Тупраҡҡа аш булыр ине,
Ғүмер өҫтәп Уралға.

Әйләнә ул ала ине,
Төҙөп ҡуйһаң, ҡорамға.
Һуйыл итеп яһағастын,
Әйләнгән ул ҡоралға.

Үлем юҡ ул! Бар ни бары
Әүерелмеш, әйләнмеш,
Берҙән икенсегә күсмеш,
Мең төрлөгә әйләнмеш.

Уйланырға булдым әле
Мин дә, ҡарап, һуйылға:
Үлемһеҙлек үлем аша
Аша икән бойомға!

## Һомай

Йәншишмәнең юлын белә Һомай:
Сығанаҡты белә Алиһә.
Шул белемгә эйә булыр Урал,
Аулап уны, тотоп ал иһә.

Ауламаһа әгәр, аңламаһа
Терек серен Урал, йән серен,
Тороп ҡалыр мәңге аң шишмәһе
Дейеү илдәрендә йәшерен.

Белә Һомай үлемһеҙлек юлын,
Баҡыйлыҡтың ҡайҙан килгәнен,
Күбәләктәй йәндең ғүмерҙәрен,
Үле донъяларҙың Шүлгәнен.

Кеше көсөн белә был Алиһә,
Батырҙарҙың белә үткәнен.
Уртлаһа ла , йотмай, бар белгәнен
Ниһә улар илгә бөрккәнен!

Кеше исеменә лайыҡ бәндә,
Эсмәгәндә генә аҡылын!
Шундайҙарға Һомай серҙәр аса,
Йөрәгенең бирә ялҡынын.

## Оҡшашлыҡ

*"Тәңре тиһәм, кешеһен."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Асмандарҙың бар ҡанаты:
Бер түгел, ә икелер.
Бер ҡанаты Тәңре булһа,
Бер ҡанаты кешелер.

Был йыһанда уларҙан тыш
Бер нәмә лә ҡылынмай.
Кеше - Тәңре, Тәңре - кеше
Булмайынса булынмай.

Тәңреһенә оҡшаш тейеш
Кешенең бит асылы.
Ошо хаҡта бәйән итә
Башҡорт "Урал батыр"ы.

Уйланмышы шул донъяның.
Йәшәйештең был сере.
Үҙенә тиң булһын өсөн
Яралтҡан Күк кешене.

Тәңрегә тиң булмағандар
Кеше тиеп танылмаҫ.
Асмандарҙа хөкөм гәҙел:
Бөйөктәргә ягынмаҫ.

Батырҙарға ягынмаҫ Күк -
Улар Тәңре ишеләр.
Был донъяны алға илтә
Тәңрегә тиң кешеләр.

## Йылҡысыҡҡан

*"Үҙ тылсымым яһаған*
*Дингеҙемдең ҡалдығы."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Ғәжәп күл ул Йылҡысыҡҡан.
Һыу сыҡҡан был урындан.
Йылҡы - йылға тигән һүҙ ул,
Һыу тигән һүҙ борондан.

Донъя һыуҙан сыҡҡан, тиеп
Инанған баш бабалар.
Һыуҙан сыҡҡан ҡоро ерҙәр,
Һыуҙан сыҡҡан һауалар.

Ер менән күк айырылған
Һыу барлыҡҡа килгән һуң.
Һыу иң тәүҙәгеһе булған,
Ҡалған нәмә - һүлдән һуң.

Ҡалған барлыҡ бүтән нәмә
Аҙаҡ килгән барлыҡҡа.
Һыу яралтҡан, һыу тыуҙырған,
Сыҡмаған һыуҙар юҡҡа!

Ҡарап торам Йылҡысыҡҡан
Күлгә, таңға ҡалыптар -
Донъяларҙың һыуҙарынан
Тороп ҡалған ҡалдыҡҡа...

## Йолалар

*"Яуызлыҡты дан яһап,*
*Яҡшылыҡты хур яһап..."*
**"Урал батыр" эпосынан**

Муйынына таштар бәйләп,
Ҡойоға ҡыҙ һалғандар.
Тәңре өсөн ҡорбанға, тип
Тотоп әҙәм салғандар.

Әҙәм әҙәмдәшен ейгән,
Яуызлыҡты дан яһап.
Күк аҫтында, ер өҫтөндә
Йылға-йылға ҡан яһап.

Кешелекте кесе яһап,
Йыртҡыслыҡты ҙур яһап,
Ҡанлы туйҙар үткәрелгән,
Яҡшылыҡты хур яһап.

Хурлы шөһрәткә күмелгән
Борон-борон замандар.
Баш ашаусы, ҡан эсеүсе
Замандар бит ямандар!

Аҡланыу юҡ яманлыҡҡа,
Аҡланыу юҡ вәхшәткә:
Хатта тәңре хаҡына ла
Ҡылынылған дәһшәткә!

Шәфҡәтһеҙлек, ҡанһыҙлыҡтан
Тарихтың бар яраһы:
Изге булмағаны өсөн
Изге маҡсат сараһы!

НИСЕК АҢЛАЙҺЫҢ?

# ЙӘШ КӘЛӘШКӘ НӘСИХӘТ:




## "Ирендең ҡолағын һаҡла"

**Анфиса ХАННАНОВА, журналист:** Был боронғоларҙан ҡалған өгөт-нәсихәт бушҡа ғына әйтелмәгәндер. Иренде төрлө ғәйбәттәрҙән ары тот, кеүек тә яңғырай ул. Был нәсихәт бөгөнгө көндә лә бик әһәмиәтле, сөнки ғәйбәт арҡаһында матур ғаиләләр тарҡалыу осраҡтары ла бар. Ялған һүҙҙәр ир менән ҡатын мөнәсәбәтен ҡаҡшата. Шуға күрә лә ололар, үҙең дә бер ваҡытта ла ғәйбәт һөйләп ултырма, икенселәрҙе лә тыңлама, тип кәңәш биргән. Яман һүҙ кеше үлтерер, изге һүҙ кеше терелтер, тигән әйтем дә шул мәғәнәгә эйә, тип уйлайым. Шуға күрә аҡыллы ҡатын иренә уның күңелен иретерлек, йөрәген яуларлыҡ матур, наҙлы, йылы һүҙҙәр генә әйтер.

Шул уҡ ваҡытта ире лә ҡатынының "ҡолағын һаҡларға" бурыслы.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА, хужабикә:** Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм, кемдең йәннәткә ингеһе килә, шул телен һәм ҡулын тыйһын, тип әйтеп ҡалдырған. Ысынлап та, тел кешене тамуҡҡа ла, ожмахҡа ла индерәсе ағза. Күп осраҡта әйтер һүҙеңдән тыйылып ҡала белеү кешене күңелһеҙ хәлдәрҙән һаҡлап ҡала. Ирем бер саҡ: "Һин минең көҙгөм. Һинең йөҙөңдә ҡояш яҡтыра икән, тимәк, минең күңелемдә лә яҙ йылмая, һиндә ҡара болот күренһә, миндә лә уның ҡуҡрәүе яңғырай", - тип әйтеп ҡуйғайны. Шуға ла иренде һәр ваҡыт яҡшы кәйефлә итеп күргең килһә, уға наҙлы, татлы иркәләү һүҙҙәренде йәлләргә ярамай. Яҡшы һүҙҙең зыяны юҡ. Ә бына ҡайһы саҡта уйланмай әйтелгән бер генә һүҙ ҙә кешенең күңелен ҡыйып ҡуйыуы ихтимал. Ә бит ауыҙҙан сыҡҡан һүҙҙе кире тартып алып булмай. Ирендең кәйефе юғала икән, һинең дә күңелең төшә, шулай аралар һыуына, ғаилә ҡото китә. Иренә тик йылы һүҙҙәрең, аҡыллы кәңәштәрең менән ярҙам итеп торғанда ул да һинән ҡәнәғәт була, ә ирең һинән ҡәнәғәт икән, тимәк, Аллаһ ризалығына өлгәшәсәкһең. Ә был ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҙур бәхет.

## "Аш-һыуҙы ваҡытында яҡшы итеп әҙерлә"

**Айгөл МӨХТӘРОВА, бухгалтер:** Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге төп һәм мөһим бурыстарының береһе - ашарға ваҡытында һәм тәмле итеп бешереү. Хәҙер инде үҙемдең тәжрибәмдән дә сығып әйтә алам: ысынлап та, ир кешенең алдында йылы аш булыуы бик мөһим. Ашап алһа, уларҙың кәйефе лә юғары, күңеле лә көр була. Башҡорттоң тағы ла шундай бер мәҡәлә бар: ас кешенең асыуы яман. Әгәр иренде асыуландырмайым, тиһәң, сәғәте етеү менән алдына аш ҡуяһың инде. Ғөмүмән, ваҡытында аш әзерләү, ашауы ла рәхәтләнеп ашарлыҡ, ғаилә ағзаларының да күңеле төшә, шул уҡ ваҡытта өй ҙә нисектер һалҡынайған, ҡото әҙәйгән кеүек була. Өйҙә йылытыу ҙа, аш әҙерләү ҙә элек-электән ҡатын-ҡыҙ вазифаһы. Мин дә был вазифаны ваҡытында теүәл итеп үтәргә тырышам. Ирем нисәлә ҡайтҡанын белешәм дә, нәҡ ул ҡайтыуға ашым әҙер ҙә була. Һыуынмаһын, тәме китмәһен тип тырышам. Ир-егет итле ризыҡтарҙы айырыуса ярата, шуға күрә ваҡытым булған һайын манты, билмән, итле бәлешләр бешереп, иремдең күңелен күрәм.

**Дилбәр ҒӘРРӘПОВА, хужабикә:** Был нәсихәтте туранан-тура аңлайым. Ғаилә ағзалары ҡайҙандыр асығып, арып ҡайтып инеүгә унған ҡатын-ҡыҙ әҙер булыу ваҡытын алдан самалап, йылы ашын әҙерләп, күркәм табын йәйеп тә ҡуя. Әгәр ҡатын кеше аш бешереүгә ире ишектән килеп инеүгә генә тотонһа, уның йә ризыҡы бешеп етмәҫ, йә ҡабаланып йөрөп көйҙөрөр, йә нимәһендер һалып еткермәҫ. Ас ирҙең асыуы яман. Өҫтәүенә, шундай ваҡыттарҙа башҡа "гәйеп-гонаһтар" ҙа иҫкә төшөп китә ул. Ҡатын-ҡыҙҙың ваҡытында аш әҙерләмәүе ғаүғаға ла алып барып еткерә торған сәбәп. Һинең ашың әҙер булғансы, ас кеше унан-бынан ҡапҡылап та өлгөрә, шунан уның аппетиты ла юҡҡа сыға һәм һинең һынлап бешергән ашыңды ашаусы ла табылмаҫҡа мөмкин. Ә аш ваҡытында әҙер икән, бергәләп ҡабаланмай ғына ашайһың, кәйеф тә күтәрелер, ирендең һинә хөрмәте тағы ла артыр. Шуға күрә һәр ҡатын-ҡыҙ аш-һыуҙы ваҡытында әҙерләргә тейеш.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



**Ө**фө ҡалаһында йәшәүсе **Заря Кинйәбай ҡыҙы БИКТАШЕВАны** 60 йәшлек оло юбилейы менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ!

8 март көнө тыуғанғамы икән, әхирәтебеҙ ҡатын-ҡыҙҙарға хас матур сифаттарҙы үҙенә йыйған. Ул изге әсә лә, һөймәлекле ҡатын да. Тормош иптәше Радик менән икеһе лә вузды ҡыҙыл дипломға тамамлап, ҙур урындарҙа эшләп йөрөйҙәр, ул һәм ҡыҙ үстереп, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫтырҙылар. Заря әле лә мәктәп йылдарындағы әүҙемлеген ташламаған. Беҙҙең сығарылыш уҡыусылары осрашыуҙарын ойоштороп, интернат-мәктәптең ҡеҙерле уҡытыусыларының хәлен белешеп, күңелдәрен күреп, яратҡан шөғөлө - волонтерлыҡ эшен башҡарып йәшәй бирә. Ул күп йылдар дауамында йәштәр араһында эскелек, наркоманлыҡ һәм тәмәке тартыу кеүек насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоу юлдарын аңлатыу эшен дә оло түҙем һәм ныҡышмаллыҡ менән башҡара. Урамдарҙа, республика районларында сығыш яһай.

Ҡәҙерле Заря Кинйәбай ҡыҙына киләсәктә ғүмерҙең шатлыҡ-ҡыуаныстарға тулы һәм оҙон булыуын, ғаилә татыулығы, ныҡлы һаулыҡ, бәхеттең ташып торғанын теләйбеҙ. Ҡояштай ягымлы, нурлы йөҙөң һис ҡасан да болоҡһоу белмәһен. Беҙгә терәк һәм кәңәшсе булып, балаларыңдың изгелеген күреп, ейән-ейәнсәрҙәреңдең шатлыҡтарын уртаҡлашып ғүмер итергә яҙһын. Тыуған көнөңдә тағы бер теләк: мәңге йәш бул, ҡартайма бер ҙә!

**Ихлас теләктәр менән, синыфташтарың Венера, Рәйлә, Сәмәрә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҠЫҘ АҪЫЛЫ - ҠИММӘТЛЕ,
## ир аҫылы - һиммәтле

Ир булған ир егерме биштә баш булыр, ир була алмаған ир иллелә лә йәш булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешене ҡурҡытам тип үҙендекен түбәләү - ҡурҡаҡтар шөғөлө.

**(Рәшит Шәкүр).**

Башҡаларҙы күрә алмаған кеше ғәҙәттә үҙен бөйөк тип һанаусан.

**(Л. Вовенарг).**

Аҡылһыҙлыҡ сифаттары булмаған бер генә бөйөк кеше лә юҡ.

**(Аристотель).**

Танылыу йәшлеккә бәрәбәр: бер килә лә башҡа әйләнеп ҡайтмай.

**(О. Петье).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Сәйәхәт ҡылып йөрөгәндә Будда бер ауылда туҡтай. Уға бер һуҡыр кешене алып киләләр. Төрҡөм эсендәгеләрҙең береһе Буддаға шулай тип мөрәжәғәт итә: "Бына беҙ һинә "Донъяла яҡтылыҡ юҡ", тип бәхәсләшеүсене алып килдек. Ул был һүҙҙәрҙе бөтә донъяға яңғырата, бар урында шул турала ғына ҡабатлай. Беҙ барыбыҙ ҙа яҡтылыҡ барлығын беләбеҙ, әммә был кешене шуға ышандыра алмайбыҙ. Уның дәлилдәре шул тиклем көслө, ул "Бирегеҙ миңә ул яҡтылыҡты, мин уны тотоп ҡарайым, мин уны еҫкәп йә тәмләп ҡарайым, бик тә булмаһа, яҡтылыҡҡа ҡағылығыҙ, мин ҡағылған тауышты булһа ла ишетәйем", ти. Арыныҡ беҙ был кешенең бәхәстәренән. Һин уны инандырһаң ине яҡтылыҡ барлығына".**

**"Эйе, был һуҡыр кеше хаҡлы, - ти Будда. -Уның өсөн яҡтылыҡ юҡ. Ни өсөн һеҙ әйткәнгә ышанырға тейеш һуң әле ул? Хаҡлыҡ шул: уға табип кәрәк. Һеҙ уны инандырырға тырышырға түгел, ә табипҡа алып барырға тейешһегеҙ". Шунда Будда үҙенең табибын саҡыра. Ә һуҡыр кеше Будданан: "Ә бәхәсте ни эшләтәбеҙ һуң?"- тип һорай. "Ә бәхәсте бер аҙға ҡалдырып торабыҙ, - ти Будда. - Бер аҙ сабыр ит, табип һинең күҙҙәренде ҡараһын әле..." Табип һуҡырҙың күҙҙәрен ҡарай һәм уны дауалап булыуы, күпмелер ваҡыттан һуң уның күрә башлаясағы тураһында хәбәр итә. "Һин был ауылда ҡалып, был һуҡырҙы дауала. Ул күрә башлағас, минең эргәгә алып кил", ти Будда.**

**Ярты йылдан һуң был һуҡыр кеше шатлыҡлы күҙ йәштәренә былыҡып Будда эргәһенә килеп инә һәм уның аяҡтарына йығыла. "Бына хәҙер беҙ һинең менән бәхәсләшә алабыҙ,- ти Будда. - Элек беҙ һинең менән төрлө донъяла йәшәй инек һәм бәхәсләшә алмай инек. Ә хәҙер беҙ бер донъяла, яҡтылыҡ аҫтында..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 811